*Тәбиғәттең төп ҡанундарының береһе - башҡаларға ни тиклем күберәк бирәһегеҙ, үҙегеҙгә шул тиклем күберәк кире ҡайта. Күптәр идеяларын, байлығын, милкен башҡалар менән бүлешһә, үҙҙәрендә был нәмәләр аҙ ҡалыр, тип ҡурҡып йәшәй. Был - сикләнгән һәм ярлы тормошҡа иң тура юл. Үҙегеҙгә башҡалар, бигерәк тә нужа күреүселәр өсөн нимәләр эшләүҙе ғәҙәт итеп алығыҙ.*

**Робин ШАРМА.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17 - 23 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№33 (555)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ерең һатһаң, ауылыңа һат...**
бер ситенә үҙең барып ултырыһың



3

**Әбйәлилдәр...**
һыуҙан ҡаза күрҙе



5

**Милләтте дәүләт түгел...**



8-9 иң тәүҙә ғаилә һаҡлай

**Евразия тауышы...**
алтын ҡурай сыңында



16

14 ТВ-программа

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Дәүләт Думаһына ҡабул итеүгә индерелгән Мәктәп намыҫы кодексында уҡыусылар, уҡытыусылар үҙҙәрен нисек тоторға, нисек кейенергә тейешлеге тураһында ла ҡағиҙә буласаҡ, имеш. Уҡытыусыларға дресс-код индереү тәҡдименә һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?

***Гөлшат СИРҒӘЛИНА, Баймаҡ районы мәғариф бүлеге етәксеһе вазифаһын башҡарыусы:*** Үҙем совет системаһында тәрбиәләнгәнгә күрә, мәктәптә уҡыусыларға берҙәм форма индереүгә ҡарашым бик ыңғай. Мәктәптә уҡығанда ла бөтәбеҙҙең дә кейемебеҙ бер үк булды, берәү ҙә айырылып торманы, бер ниндәй бүленеш тә юҡ ине. Уҡыусы иртән тороп мәктәп формаһын кейеү менән үҙен психологик яҡтан белем алыуға ла әҙерләй, унда яуаплылыҡ тойғоһо барлыҡҡа килә. Әле районда барлыҡ мәктәптәр ҙә яңы уҡыу йылына формалар һатып алыу, тектереү менән мәшғүл. Ә бына уҡытыусылар өсөн дресс-код булдырып, форма индереү кәрәклеге фекерен бер ҙә ыуртаҡлаша алмайым ниңәлер. Уҡытҡан предметынан, үҙенең шәхси сифаттарынан сығып, уҡытыусылар әле лә үҙенең статусына ярашлы итеп кейенә.

Был тәҡдимде индереүселәр ҡыҫҡа итәктәр, асыҡ түштәр, сағыу косметика менән көрәшергә уйлайҙыр, әммә оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләп, минең былай асыҡ-ярыҡ кейенеп мәктәпкә килгән бер уҡытыусыны ла күргәнем юҡ. Уҡыу йортон тамамлап, саҡ эшкә килгән йәштәр башта бер осор ҡыҫҡа итәктә йөрөп ала, әлбиттә, сөнки кисәге студенттың гардеробы үҙгәргәнсе ваҡыт та кәрәк. Мәктәп тормошона күнегеп, уҡыусылар менән эшләп, ата-әсәләр менән аралаша башлаһа, улар үҙҙәре лә етди кейемгә күскәнен һиҙмәй ҙә ҡала, коллектив та йоғонто яһай. Заман да, мода ла үҙгәрә, тик уҡытыусының статусы, дәрәжәһе үҙгәрмәй. Бына минең атайым да, әсәйем дә уҡытыусы булып эшләне, уларҙың кейеме гел ипле, матур булды. Студент саҡта үҙем тегеп кейенгәндә лә классик стилгә өҫтөнлөк биргәнгә, минең тормошома был яңылыҡ үҙгәрештәр индермәйәсәк.

***Гүзәл КӘРИМОВА, уҡытыусы:*** Мин был тәҡдимгә ҡуш ҡуллап риза. Балалар мәктәпкә белем алырға килә. Ә уҡытыусының мода артынан ҡыуып, сағыу кейемдәр кейеп, биҙәнеп-төҙәнеп килеүе баланың иғтибарын ситкә йүнәлтә. Уҡытыусыларға ла дөйөм форма булдырыу тураһында уҡытыусылар менән форумдарҙа ла һөйләшкәнебеҙ булды, әлбиттә, ҡаршы сығыусылар ҙа күп, әммә, минеңсә, рәсми дөйөм кейем булдырылһа, яҡшы ғына буласаҡ. Сөнки йәш уҡытыусылар ни өсөндөр үҙҙәренең тышҡы ҡиәфәтенә бик иғтибар бирмәй, ҡыҫҡа итәк, йә булмаһа, тәненең бөтөн ерҙәрен белдереп торған ҡыҫынҡы кейемдәр кейә. Блузканың да түштәре күренеп торғанын һайлайҙар.

Беҙ училищела уҡығанда тышҡы ҡиәфәт нисек булырға тейешлеген өйрәткән махсус дәрестәр була ине, хәҙерге уҡытыусылар әҙерләүсе уҡыу йорттары был турала бер мәғлүмәт тә бирмәйҙер, тигән фекергә килдем. Шуға күрә, әгәр ҙә мәктәптә дөйөм форма була икән, был бик прогрессив күренеш булыр ине. Тик ҡайһы бер офистарҙағы кеүек, тик итәк кенә кейеүгә ҡаршымын, минеңсә, классик дөйөм форма итәкле костюмдан һәм салбарлы костюмдан торорға тейеш. Сәскәле, биҙәкле, ажурлы булмаһын, төҫтәре лә классик костюмдарҙыҡы кеүек булһын. Шулай уҡ уҡытыусылар оҙон итеп тырнаҡ үҫтереп йөрөмәһен ине, уҡытыусы балалар менән ашханаға ла бара, уларҙы ашата, ә тырнаҡ аҫтында ниндәй генә бысраҡ юҡ. Ғөмүмән, алтын-көмөш биҙәүестәрен ялтыратып, оҙон алҡалар тағып килгән уҡытыусыны ла өнәмәйем, бындай әйберҙәрен башҡа ерҙә таҡһындар ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ШАҒИР ҺҮҘЕ




## ОРАН

***Мин - яуҙарҙа үлгән***
***башҡорттарҙың***
***Тере рухы - һеҙгә һүҙ ҡушам.***
***Уралтауҙа һеҙ йәшәһен, тиеп,***
***Ҡайта алмай ҡалдыҡ һуғыштан.***
***Беҙҙең өҫкә баҫып атлайһығыҙ,***
***Был ерҙәрҙә беҙ һәр аҙымда.***
***Башҡорт ерен, һары майҙай күреп,***
***Беҙ тасҡаныҡ йөрәк ҡанында.***
***Ер өҫтөнә һин дә, һин дә, һин дә***
***Шытып сыҡтың беҙҙең орлоҡтан.***
***Ғүмер баҡый ҡоллоҡ булыр илең,***
***Ошо хаҡта әгәр онотһаң.***
***Аҡһаҡалдар! Белмәйһегеҙ... һеҙме? -***
***Буйҙар етмәгәнен терһәккә.***
***Һеҙ бит һаман булмышығыҙ менән***
***Алдар эленеп торған элмәктә.***
***Быуындарҙан күсереп быуындарға,***
***Һаҡлағанбыҙ икән кем өсөн?***
***Ҡайҙа иттегеҙ һеҙ Уралтауҙың***
***Ҡар(а) урманын, алтын-көмөшөн?***

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ХАЛЫҠ ҺҮҘЕНӘ ТАЯНА,

## шуға ла уҡымлы

**Мин сит илгә сығып киткән саҡта "Киске Өфө" гәзите юҡ ине әле. Ул саҡта Яҙыусылар союзында эшләп йөрөгән Әхмәр Үтәбай менән телефон аша аралашып торҙоҡ. Мин уға үҙем йәшәгән Италиялағы тормош хозурлығы тураһында һөйләй торғас, бер мәл Әхмәр ҙә сит илгә сығыу тураһында хыялланып йөрөнө. Әммә ул был теләгенән, ниңәлер, тиҙ һүрелде. Баҡтиһәң, етди сәбәбе булған икән.**

Италиянан отпускыға ҡайтҡанымда уның өп-өр яңы "Киске Өфө" гәзитендә янып эшләп йөрөгәнен белдем. Бер осрашып һөйләшкәйнек, минең хаҡта гәзиттә мәҡәлә лә пәйҙә булды. Шунан һуң мин сит илгә киткән һайын күмәртәләп "Киске Өфө" гәзитен алып сыҡтым, уларҙы Италияла эшләп йөрөгән, тыуған яҡтан килгән һәр һүҙгә, тыуған ил моңона сарсаған ватандаштарыма тараттым.

Хәҙерге ваҡытта "Киске Өфө" гәзите иң уҡымлы баҫмаларҙың береһенә әйерелде. Редакция коллективы көнө-төнө, арымай-талмай, гәзит һүҙен нисек тә халыҡтың аңына еткереү, уны уҡымышлы итеү өҫтөндә эшләй. Ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә халыҡ күңелен яулап өлгөргән баҫманы халыҡ гәзите тип атарға ла була. Сөнки гәзиттең һәр бер битендә халыҡ һүҙе, халыҡ фекере, халыҡ аҡылы ярылып ята. Халыҡ һүҙенә таянған - яңылышмаҫ, ти мәҡәл. Гәзит хеҙмәткәрҙәре ошо хәҡиҡәтте дөрөҫ аңлай һәм уны байраҡ итеп алып, һис бер тынғы белмәйенсә, быны ун беренсе йыл инде халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итә.

Гәзиттең һәр бер бите бай йөкмәткеле һәм фәһемле. Минең иғтибарымды йәлеп иткәне шул: гәзиттә милли аң ярылып ята! Төп лейтмотив булып халыҡ мәҡәлә, халыҡ йолалары, халыҡ һүҙе ята гәзит битендә. Бына ошондай сифаты менән "Киске Өфө" гәзите башҡаларҙан айырылып тора ла инде.

Ошондай мәғлүмәт быуатында милли баҫмаларҙың төп маҡсаты нимәгә ҡайтып ҡала һуң? Беҙ элек кенә ул ваҡытлы матбуғаттың төп маҡсаты - мәғлүмәт еткереү, тип иҫәпләнек. Ә электрон мәғлүмәт саралары йылдам үҫешкән, һәр бер яңылыҡ, мәғлүмәт халыҡҡа бер секунд эсендә барып еткән заманда милли баҫмаларҙың төп маҡсаты шәхес тәрбиәләүгә ҡайтып ҡалырға тейештәр. Был йәһәттән "Киске Өфө"ләр үҙ маҡсатына йөҙ процентка өлгәшә! Уның уҡыусылары үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған бик күп һорауҙарға яуап таба уның биттәренән. Шулай уҡ башҡорт халҡының абруйлы һәм оло тормош тәжрибәһе туплаған шәхестәре менән әңгәмәләр ҙә баһалап бөткөһөҙ тәрбиәүи әһәмиәткә эйә.

Тәнзилә КЕЙЕКБАЕВА.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***РФ Дәүләт Думаһына ҡабул итеүгә индерелгән Мәктәп намыҫы кодексында уҡыусылар, уҡытыусылар үҙҙәрен нисек тоторға, нисек кейенергә тейешлеге тураһында ла ҡағиҙә буласаҡ, имеш. Уҡытыусыларға дресс-код индереү тәҡдименә һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?***

(Башы 1-се биттә).

*Мөнәүәрә МӘҠСУТОВА, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары:* Уҡытыусы балаларҙы һүҙ менән генә түгел, үҙенең өлгөһө, кейеме менән дә тәрбиәләргә тейеш, быныһына шик юҡ. Тик бының өсөн ниндәйҙер документ ҡабул итеп, уҡытыусылар өсөн махсус форма уйлап сығарыу кәрәк эшме икән? Уҡытыусыға сираттағы тапҡыр ниндәйҙер уйлап сығарылған гәйептәр ташлау кеүек тойолоп китә хатта. Проектты әҙерләүселәр фекеренсә, йәнәһе, уҡытыусыларға форма индермәйенсә, уҡыусыларҙа тыйнаҡлыҡ һәм баҫалҡылыҡ тәрбиәләп булмаясаҡ. Ни өсөн мәктәп әхлаҡыҙлыҡ урыны булып китте һуң әле?

Бар һөнәрҙәр ҙә - уҡытыусынан, уҡытыусы һөнәре - Хоҙайҙан, ти. Уҡытыусы исеме йөрөткән кеше бер ваҡытта ла дәрәжәһен, баһаһын төшөрөп, эшкә теләһә нисек кейенеп килмәйәсәк. Беҙҙең гимназияла ҡатын-ҡыҙ уҡытыусыларҙың салбар кейеп йөрөгәнен дә күрмәҫһегеҙ, барыһы ла ыҫпай, матур, килешле костюмдарҙа. Унан һуң, халҡыбыҙға хас баҫалҡылыҡ та бар бит әле, уҡытыусыға бөләкәйҙән ихтирам менән ҡарау бар. Уҡытыусылар һәр ваҡыт намыҫ һәм оло ихласлыҡ менән, яуаплылыҡ тойоп эшләүсе һөнәр эйәләре. Уҡытыусы ҡайҙа ғына йөрөһә лә һәр ваҡыт уҡытыусы булып ҡала. Йәш уҡытыусыларға ла һүҙ тейҙерерлек түгел. Һуңғы йылдарҙа гимназиябыҙға килгән йәштәргә ҡарап, һоҡланып, ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Аҡыллылар, егәрлеләр, кәңәшендә, ярҙамынды дөрөҫ аңлап, тырышып эшләйҙәр. Уларҙы бер төрлө итеп кейендереп ҡуймаһаң да, үҙҙәренең уҡытыусы икәнен онотмайынса, үҙ эштәрен яҡшы итеп башҡарасаҡ.

Был проект буйынса төрлө фекерҙәр булыр әле. Уҡыусыларға форма индереүгә бик тә ыңғай ҡарайым, был уларға яуаплылыҡ өҫтәй, мин хәҙер ысын уҡыусы, мәктәпкә барам, тип ғорурлана улар. Форма кейгән уҡыусы джинсы салбарҙағы уҡыусыға ҡарағанда эстетик яҡтан да матур күренә, сәләмәтлеге өсөн дә файҙалы. Әлбиттә, уҡытыусылар өсөн дә берҙәм форма булдырырға була. Тик был шул тиклем кәрәк сарамы икән?

Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Август аҙағына тиклем уҡыусыларыбыҙға 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн 2013 йылғы хаҡтар менән, йәғни 378 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Сентябрҙән хаҡтар үҙгәрәсәк.**



● Шулай итеп, август айында 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - **2014 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптары на лайыҡ буласаҡ.

● **Әйткәндәй,** 2013 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға әле лә һуң түгел: 17 авгусҡа тиклем яҙылһағыҙ -сентябрҙән, 17 сентябргә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитебеҙҙе октябрҙән алдыра башларһығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

МӨХӘРРИРИӘТ.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ОРАН

(Дауамы. Башы 1-се биттә).

**Был һорауҙы, сабыйың теле менән,**
**Мин һорармын, мең ҡат һорармын.**
**Ҡайҙа, тиеп, бәҫе, күркәмлеге**
**Салауаттан ҡалған Уралдың?**
**Һорармын мин - яугир башҡорттарҙың**
**Тере рухы…**
**- Әй, ил инәһе!**
**Башҡортлоҡто баҫҡан ошо ҡәһәр**
**Әллә һинән, һинән киләме?**
**Һин төкөрҙөңмө әллә иманыңа,**
**Беҙ ҡалдырып киткән ырыҫҡа?**
**Нисә улың илен ташлап китте,**
**Нисә ҡыҙың сыҡты урыҫҡа?**
**Ниндәй Рәсәй һуң ул туйыу белмәй,**
**Башҡорт еркәйенә ҡаныҡҡан?**
**Алтын түгел - беҙҙең һөйәк бит ул,**
**Нефть түгел - ул бит беҙҙең ҡан!**
**Беҙҙе урап яткан - офоҡ түгел,**
**Ваҡыттыр бит шуны аңларға.**
**Ул бит - беҙҙең ҡәбер. Ҡояш булып,**
**Беҙ ҡалҡабыҙ һеҙҙе барларға.**
**Йөҙөбөҙ саф, сөнки намыҫ таҙа,**
**Беҙҙең намыҫ ҡанда сайҡалған…**
**Уян, башҡорт! Үлгән улдарыңдың**
**Ҡәберенән тороп саң ҡағам!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөлә ШОС һәм БРИКС саммиттарына объекттар төҙөү һәм реконструкциялау барышы менән танышты. Билдәле булыуынса, Каруанһарай эргәһендә - "Holiday Inn" отеле, Конгресс-холл янында "Хилтон" ҡунаҡханаһы төҙөлә, шулай уҡ "Нефтсе" мәҙәниәт һарайы һәм Конгресс-холл бинаһы реконструкциялана. Барлыҡ объекттарҙа эштәр графиктан алда бара. Мәҫәлән, Конгресс-холл янындағы ҡунаҡханала төп төҙөлөш эштәрен график буйынса 2014 йылдың мартында тамамлау планлаштырылғайны. Әммә, төҙөүселәр һүҙҙәренсә, эштәр ғинуарҙа уҡ тамамланасаҡ.

✓Башҡортостан Президенты "Өфө" йылға портында булды. Бында ул йылға порты етәкселеге менән территорияны үҫтереү тураһында һөйләште. Асыҡланыуынса, бүлмәләрҙә ҡуртымсылар урынлашҡан. Порт тулы ҡеүәтенә эшләмәй - "Өфө - Мәскәү" рейсына һуңғы пассажир 20 июлдә юлланған. Әлеге ваҡытта пароходтар был йүнәлештә Дүртөйлөнән ҡуҙғалып китә. Рөстәм Хәмитов Өфө етәкселегенә йылға порты территорияһын "йәнләндереү һәм тергеҙеү" өсөн саралар уйлап табырға ҡушты.

✓Канаданың Монреаль ҡалаһында хәрәкәт-таяныу аппараты зарарланған, күреү һәләте насар булған һәм интеллектуаль кәмселектәре булған спортсылар араһында йөҙөү буйынса донъя чемпионаты бара. Ярыштарҙа донъяның 60 иленән 650-гә яҡын кеше ҡатнаша. Рәсәй йыйылма командаһы составында Башҡортостан спортсылары - Анна Кришина, Михаил Зимин һәм Александр Неволин-Световтар сығыш яһай. Александр Неволин-Светов (һуҡыр ҙар спорты) 100 метрлыҡ дистанцияла иреклестилдә йөҙөү буйынса "көмөш" яуланы. Михаил Зимин (һуҡырҙар спорты) шундай уҡ дистанцияла брасс стиле менән йөҙөү буйынса шулай уҡ икенсе урынға лайыҡ булды.

✓Республика башлығының Йәмәғәт палатаһы ағзалары менән осрашыуында Палата ағзаһы Денис Мусин Өфөлә Эшҡыуарлыҡ йорто асыуҙа ярҙам күрһәтеүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Уның һүҙҙәренсә, бөгөнгө көндә республика эшҡыуарҙарының үҙҙәренең айырым майҙансығы юҡ. Осрашыуҙа шулай уҡ Президенттың республика мәктәптәре уҡыусыларын бал менән тәьмин итеү, граждандарҙы дөйөм ятаҡтарҙан күсереү программалары әҙерләү тураһындағы тәҡдиме тикшерелде.

***✓ Беҙ бөгөн егерменсе быуаттың ун етенсе йылдары алдында торған кеүекбеҙ: өҫтәгеләр ил менән идара итә алмай һәм ниндәйҙер кимәлдә үҙен азат тойоп өйрәнгән кеше ҡабаттан ҡол булырға бер ваҡытта ла риза булмаясаҡ.***

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ЕРЕҢ ҺАТҺАҢ, АУЫЛЫҢА ҺАТ...

## бер ситенә үҙең барып ултырырһың

**Ер һатыуға бәйле мәҡәл-әйтемдәр әллә ни күп түгел. Булғандары ла берәгәй. Уларҙың араһында бер нисәүһе: "Ерен һатҡан - гүрен һатҡан", "Ереңде һатыу - ғәзиз әсәңде һатыу", "Ерең һатһаң, ауылыңа һат: бер ситенә үҙең барып ултырырһың". Ғөмүмән, был темаға мәҡәл-әйтемдәр әллә ни күп булмаһа ла, халҡыбыҙ тарихында ер һатыуға бәйле бик әсендерер, сәстәр үрә торорлоҡ мәғлүмәттәр байтаҡ. Бында әсмүхәгә, тирегә бәйле ер һатыу миҫалдарын килтереү ҙә етә .**

**Бер уйлаһаң, ул замандар әллә ҡасан үтеп, тарихта тороп ҡалған кеүек булғайны ла, әммә беҙ хәҙер һаман да шул уҡ проблемалар алдында баҫып торабыҙ: тыуған еребеҙ һатылыуын дауам итә. Шул уҡ ваҡытта йәштәр эш эҙләп ситкә китә, ситтә төпләнә, йылдан-йыл еребеҙгә ситтәр килеп төпләнә һәм беҙҙекеләр ташлап киткән ерҙе үҙҙәренең йәшәү сығанағына әйләндерә. Улар беҙгә килеп төпләнеп кенә ҡалмай, туған телебеҙгә, моңдарыбыҙға, бер һүҙ менән әйткәндә, милли йәнебеҙгә үҙенең дәғүәһен ҡуя.**



Был ваҡиға үҙемә һәм туғандарыма бәйле булғас, был хаҡта яҙмаҫҡа ла мөмкин булыр ине. Әммә күптәрҙең был етди мәсьәләгә ҡарата күҙен асыр өсөн яҙмайынса ла булдыра алмайым. Хәйер, был тик миңә һәм туғандарыма ғына ҡағылмай, милләтебеҙҙең ҙур өлөшө йәшәгән ауылдарыбыҙҙың киләсәгенә бәйле ул. Тураһын әйткәндә, ауылдарыбыҙ мигранттар һәм донъяның һәр төрлө әҙәмдәре өсөн анһат ҡына яулап булырҙай, ҡапҡалары шар асып ҡуйылған урынды хәтерләтә. Был мәсьәләнең асылын бар тулылығында үҙем аңлар һәм башҡаларға аңлатыр өсөн яҙам быйылғы йәйемдә шаһит булған сетерекле бер хәл-ваҡиға хаҡында.

Яңыраҡ тыуған ауылым Буранбайға ярты ғына көнгә һуғылып киткәйнем. Бер туған апайымдарҙың усаҡлығында (аласыҡ) сәй, ҡымыҙ эсеп ултырғанда мосолман кейемендәге ирлеҡатынлы ике сит кеше килеп инде. Исәнләштеләр. Ир кеше һаҡаллы, ҡатыны ҡап-ҡара төҫтәге мөслимәләр кейемендә. Улар икеһе лә Рәсәйҙәге халыҡ-ара аралашыу телендә һүҙ атҡара, башҡортса - ләм-мим. Үҙ-үҙҙәрен тотоштарына ҡарағанда бөтөнләй Урал-Иҙел буйы мосолмандарына оҡшамағандар. Баҡтиһәң, Сибайҙа йәшәгән бер туған һеңлебеҙ мәрхүм булып ҡалған ҡустыбыҙҙың ауылыбыҙҙағы өйөн һатырға тип гәзиткә иғлан биргән дә, аралашсы итеп ошо апайымды билдәләгән икән.

Йола буйынса ҡунаҡтарҙы өҫтәл артына саҡырҙыҡ. Улар ураҙала булыуҙарын сәбәп итеп, сәй эсеүҙән баш тартты. Йорт һатыу хаҡында мин дә алдан бер аҙ хәбәрҙар булғанлыҡтан, килеүселәргә йортто ҡасан һүтеп алып китергә теләүҙәре хаҡында һорау биргәйнем, улар: "Беҙ бит телефон аша йортто, баҡсаһы-картуфлығы-уты менән бергә 150 мең һумға һатып алырға һөйләшкәйнек. Ауылығыҙ матур урында, йәмле Һаҡмар буйында. Кешеләр ҙә бында яҡшы тип әйттеләр. Беҙ ошо ауылда йәшәргә теләйбеҙ..." - тип әйтеп һалдылар.

Шыпырт ҡына апайыма төбәлдем, ә ул иһә, минең был ҡараш-ты йортҡа хаҡты аҙ ҡуйғанһығыҙ тип аңлап, миңә шыбырлап ҡына: "Күсеп килергә булғастары, әйҙә, 200 мең һум һорайыҡ һуң..." - тине. Апайым үҙенсә самалап, иҫәпләп, баҡсалыҡ, картуфлыҡ ерен 50 мең һумға баһаланы, булһа кәрәк. Апайым мине ғәфү итһен, эй, халҡымдың ябайлығы, бер ҡатлылығы, тип эстән генә уйлап ҡуйҙым.

Оло аптырашта ҡалдым. Етмәһә, килеүселәр "Әйҙә, йортто барып ҡарайыҡ", тип ҡабаландыра. Етмәһә, " Алдым-бирҙем" килешеүен дә шул көндө үк төҙөп, йорт хаҡын да түләмәкселәр. Мин өлкән апайым менән телефон аша һөйләшергә, кәңәшләшергә кәрәк, тип йортҡа инеп киттем. Телефон аша дин юлындағы апайым менән еҙнәйемә килеп тыуған хәлде аңлатып биргәйнем, икеһе бер булып минең фекерҙе хупланы: әгәр ҙә йортто ҡутарып алырға булһалар ғына һатырға ризабыҙ, юҡ икән - юҡ. "Белмәгән-күрмәгән сит кешеләргә ауылға ишек асып, ауылдаштарыбыҙҙың ҡарғышын алырғамы ни беҙгә?" - булды өлкән апайымдың өҙөп әйткән һүҙе.

Әйе, бындай хәлдәр хаҡында элек тә ишеткәнем бар ине. Улар башта ғына шулай ипле күренә, аҙаҡ бар ауыл халҡы өсөн сиҡанға әүерелә. Ишетеп торабыҙ бит. Хәйбулла районының Һаҡмар буйындағы бер матур ауылда йәшәүсе берәү сит бауырға өйөн һатҡан да, күсеп килеүселәр менән уларҙың тотош ауыл халҡын тәшкил итерлек туғандары килеп тулған. Ауыл урамы буйлап оялмайынса трусиксан ғына йөрөйҙәр, ауыл халҡын йылғаға үткәрмәйҙәр икән. Был ауыл халҡы уларға ҡаршы бер нәмә лә эшләй алмай, ти. Сөнки барыһы ла законлы, документтар буйынса йорт һатып алыусы ошо ауылда ғүмер буйына йәшәүселәр менән тип-тигеҙ хоҡуҡлы. Йортон һатыусы кеше үҙе лә шул ауылда йәшәй һәм уның да балалары Һаҡмарға һыу инергә лә бара алмай икән. Тик терһәк алыҫ, тешләп булмай. Тағы ла бер ауылға дини сектаға ҡараусылар эйәләшкән, улар мәктәп балаларын үҙҙәренең йоғонтоһона эләктереп, аңын томалаған. Бер нисә бала мәктәпкә лә йөрөмәй башлаған. Һанай китһәң, бындай миҫалдар бихисап.

Телефон аша үткәрелгән ғаилә ағзалары ҡороноң ҡарарын килеүселәргә еткерергә, тип, кире усаҡлыҡҡа сыҡҡан саҡта инде улар үҙҙәренең маҡсатын үҙгәртеп тә өлгөргәйне. Баҡтиһәң, улар беҙҙең ҡайһы яҡтандыр яҡын туғаныбыҙ һәм һатып алынған йортта уларҙың әсәһе йәшәйәсәк икән. Бына бит нисек, ҡаршы тороусы табылғас, теләр шундуҡ хәйләһен дә уйлап сығарған.

Ниндәй ҡарарға килеүебеҙҙе ҡунаҡтарға еткерҙем. Улар шундуҡ, хушлашып та тормайынса, сығып киттеләр. Ә килеп ингәндәрендә шундай итәғәтле инеләр. Апайым уларҙы оҙата сыҡты. "Ниңә, ауылығыҙ ҡустығыҙҙың шәхси мөлкәтеме ни?" тип әйтеп киткән һаҡалтай апайым менән хушлашыр саҡта. Ҡунаҡ аҙ ғына яңылышҡан. Ауылыбыҙ минең шәхси мөлкәтем түгел, ә ырыуыбыҙҙың, халҡыбыҙҙың шәхси мөлкәте.

Һабағы алынмаған тарих кире ҡабатлана, тиҙәр тарихсылар. Беҙ бөгөн һәр йәһәттән егерменсе быуаттың ун етенсе йылдары алдында торған кеүекбеҙ: өҫтәгеләр ил менән идара итә алмай һәм үҙгәртеп ҡороу йылдары эсендә ниндәйҙер кимәлдә үҙен азат тойоп өйрәнгән кеше ҡабаттан ҡол булырға бер ваҡытта ла риза булмаясаҡ. Иң үкендергәне: ил мөлкәтенең 70 проценты (урыны менән был күрһәткес 95 процентты тәшкил итә, тиҙәр) айырым кешеләрҙең ҡулына тупланған бер ваҡытта илебеҙҙең күпселеген тәшкил итеүселәр был күренешкә бөтөнләй битараф. Һәр төрлө битарафлыҡтың иң мөһиме - үҙ-үҙеңә, үҙ яҙмышыңа битарафлыҡтыр.

Инде ҡасандан "Ер кодексы" ҡабул ителеп, инде ҡасандан ауылдарҙа пай ерҙәрен бушлай халыҡҡа бүлеп биреү бара, күпселек үҙ ерен юллап алыу ғына түгел, ерҙе ни өсөн алырға кәрәк икәнлеген дә аңларлыҡ хәлдә түгел. Ундайҙарға гәзиттә мең тапҡыр әйткәнде тағы бер мәртәбә ҡабатларға мәжбүрмен:

**Хөрмәтле ауыл хеҙмәтсәндәре, ауылдаштарым, милләттәштәрем! Ер аҫты байлыҡтары нисек кенә кешенең күҙен ҡыҙҙырмаһын, улар уҙа барһа яңынан 50-100 йылдан бөтөнләй һурып һәм ҡаҙып алып бөтөрөләсәк. Шуға күрә ерҙең иң ҡиммәт өлөшө - уның иген, үлән, ағас, йәшелсә-емеш үҫә торған өҫкө өлөшө. Ер өҫтө кешелеккә Ҡиәмәт көнөнә тиклем хеҙмәт итәсәк. Йыл һайын Ер шары халҡы 60-70 миллионға арта барғанын иҫәпкә алғанда, яңынан 20-30 йылдан аҙыҡ-түлек ҡытлығы башланасаҡ һәм ул сағында ере булғандар иң бай кешеләр иҫәпләнәсәк. "Ер кодексы" - беҙгә еребеҙгә аҫаба хоҡуғыбыҙҙы ҡайтара торған берҙәнбер юл!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы киләһе һанда).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән республикала 2013 йылдың икенсе кварталында уртаса айлыҡ йәшәү минимумы күләме билдәләнде - 6433 һум. Эшкә яраҡлы халыҡ өсөн ул - 6848 һум, пенсионерҙар өсөн - 5257 һум, балалар өсөн 6408 һум күләмендә билдәләнде, тип хәбәр иттеләр БР Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.

✓2013 йылдың 14-19 августында Канаданың Виндзор ҡалаһында 47-се Халыҡ-ара балалар уйындары үтә. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, март башында Өфө мэры Ирек Ялалов ярыштар флагын һәм эстафета утын Виндзор вәкилдәренә - ҡышҡы Уйындарҙан йәйге ярыштарға тапшырғайны. Әлеге спорт форумында 100-ҙән ашыу ил вәкилдәре ҡатнашасаҡ. Канадаға Өфө делегацияһы ла юлланды. Команда составында - 11 бала. Улар еңел атлетика һәм волейбол буйынса көс һынашасаҡ.

✓Башҡортостан баш ҡалаһының Беренсе йәмиғ мәсетендә яңыртыу эштәре бара. Уның колонналары һәм диуарҙары аҡ төҫкә буяла, ишек алды реконструкциялана. Проектҡа ярашлы, мәсет эргәһендә ултырып ял итер өсөн эскәмйәләр ҡуйыласаҡ, фонтан эшләйәсәк. Айырым торған өс ҡатлы бинала 10-15 урынға иҫәпләнгән ҡунаҡхана урынлашасаҡ. Шулай уҡ ризыҡланыу һәм тәһәрәтләнеү бүлмәләре булдырыу ҡаралған. Ошонда уҡ мосолман әҙәбиәте һәм сувенирҙар һата торған кибет урынлашасаҡ. Төҙөлөш менән бер нисә ойошма мәшғүл. Эштәрҙе ағымдағы йылдың сентябрь-октябрь айҙарында тамамлау планлаштырыла.

✓Киң мәғлүмәт сараларында БР бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутатлыҡҡа кандидаттарҙың һайлау алды агитацияһы башланды. Агитация өсөн бушлай эфир ваҡыты түбәндәге киң мәғлүмәт сараларында бүленә: "Башҡортостан юлдаш телевидениеһы" (БЮТ) һәм "Россия" (Россия-1) телеканалдарында, Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә "Радио России" һәм "Юлдаш" радиоканалдарында. Бушлай урын шулай уҡ "Башҡортостан", "Республика Башкортостан", "Кызыл таң", "Йәшлек", "Молодежная газета", "Өмет", "Истоки", "Урал сасси", "Чолман", "Ошмес" гәзиттәрендә бирелә. Киң мәғлүмәт сараларында һайлау алды агитацияһы 6 сентябргә тиклем барасаҡ.

**“Башинформ”дан**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КӘЗӘ ҠЫМЫҘЫ ЛА...

## һыйыр ағы ла килем килтерә



**Бәғзе ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының эшһөйәрлегенә, уңғанлығына хайран ҡалырһың. Сабыр хужабикә, усаҡ йылыһын һаҡлаған күп балалы әсәнең матурлығын, һөмғоллоғон һаҡлап ҡалыуы ла һоҡланғыс.**

Баймаҡ районының Һәмән ауылында гөрләтеп донъя көткән Рәмзиә Мөхәмәтйән ҡыҙы Кинйәбулатова нәҡ шундай уңғанбикәләрҙең береһе. Күрше Бөрйән районынан килен булып төшкән ханым тормош иптәше Рәсүл Рәфҡәт улы менән Яҙгөл, Аҡназар, Искәндәр исемле аҡыллы балалар үҫтерә. Ун беренсе класҡа барған Яҙгөл әсәһенең алмаштырғыһыҙ ярҙамсыһы ла, яҡын кәңәшсеһе лә.

Рәмзиә ҡояштан алда уянып, тормошҡа оло һөйөү менән бағып, яратҡан эштәренә тотона. Ул өс һыйырын һауа, артабан һигеҙ һауын кәзәһе урынлашҡан ҡураһына йүнәлә. Рәмзиә Мөхәмәтйән ҡыҙы әҙерләп һатҡан кәзә ҡымыҙын күптәр яратып ала. Шулай булмай, кеше организмы өсөн бик тә файҙалы, үпкәгә лә, йөрәккә лә йән өргән шифалы эсемлек бит ул. Велосипедҡа атланып алған Рәмзиә ҡымыҙҙы күрше ауылдарға алып барып һата, Билал мазинына һатыуға ҡуя. Бынан тыш, Темәс баҙарына сығып, шифалы эсемлектең 1,5 литрын 100 һумдан һатып, аҡса эшләй.

Һыйырҙарының ағын да әрәм-шәрәм итмәй, ҡаймаҡ, май, аҡ һәм ҡыҙыл эремсек, сыр әҙерләп һатыуға сығара. Элегерәк ул һөт аҙыҡтарын Магнитогорск ҡалаһына алып бара торғайны, хәҙер уларҙы үҙ районында ла һатып бөтөүгә өлгәшә. Сөнки таҙа, тәмле итеп әҙерләнгән ризыҡты кешеләр ҙур теләк менән ала.

Ҡышҡыһын Рәмзиә Кинйәбулатова яратҡан шөғөлө - бәйләмдәренә тотона. Йөндө үҙе нәҙек кенә итеп иләп, матур итеп кофталар, жилеттар бәйләй. Бала саҡтан уҡ шөғөлләнгән ул был эш менән. Рәмзиәнең эштәре төрлө күргәҙмәләрҙең еңеүсеһенә әүерелә. Йортонoң һәр бүлмәһен дә күңел йылыһы биреп бәйләнгән әйберҙәр биҙәй. Ҡатын-ҡыҙҙар уға төрлө кофта-итәк бәйләргә заказ бирә. Рәмзиә Мөхәмәтйән ҡыҙы уларҙы ҙур теләк менән башҡара. Был да күп балалы ғаиләнең килеменә ярайһы ғына өлөш индерә.

Уңған хужабикә, хәстәрлекле әсә Oriflame косметика фирмаһының консультанты булып та аҡса эшләүгә өлгәшә. Селтәрле маркетинг аша ниндәйҙер һыҡай һәҙәмтәгә өлгәшеү бик ауыр булыуы бер кемгә лә сер түгел. Әммә Рәмзиә Кинйәбулатова әйтеүенсә, "аҡса беҙҙең аяҡ аҫтында ғына түшәлеп ята, тик ялҡаулыҡҡа юл ҡуйырға ярамай".

**Гүзәл ИСӘНГИЛДИНА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# КИЛӘСӘК МӘКТӘБЕ...

## электрон мәктәп



**Үткән аҙнала Бөрө ҡалаһында мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһе булып үтте. "Мәғариф һәм педагогик эшмәкәрлек - бик етди тема. Эшмәкәрлегебеҙҙең был йүнәлеше нисек ҡоролған, балаларға ниндәй тәрбиә бирәбеҙ һәм был процеста нисек ҡатнашабыҙ, тормошобоҙ ҙа шундай буласаҡ", - тине пленар ултырышта уҡытыусылар алдында сығыш яһап республика Президенты Рөстәм Хәмитов. Шуға ла республика етәксеһе киләһе уҡыу йылына ҡуйылған бурыстар араһында электрон белем биреү йүнәлешен үҫтереүҙе төп урынға ҡуйҙы.**

Бөгөнгө көндә республикала демографик үҫеш күҙәтелә, мәсәлән, 2001 һәм 2002 йылдарҙа мәктәпкәсә йәштәге балалар һаны яҡынса 250 булһа, хәҙер был һан 335-кә еткән. Был һан өс-дүрт йыл тирәһе һаҡланасаҡ әле, һуңынан тағы түбәнәйә башлаясаҡ. Президент билдәләүенсә, балалар баҡсалары һәм мәктәптәрҙә урындар һанын ошонан сығып билдәләү зарур. Балаларҙың һаны күпме булыуға ҡарап, мәктәптәрҙең һаны ла үҙгәрәсәк. "Мәктәптәрҙе оптималләштереү" темаһына ҡағылып, Р. Хәмитов мәктәптәр ябылыуында Рәсәй Федерацияһы кимәлендә бер уҡытыусыға уртаса ун биш уҡыусы тура килергә тейешлеге тураһындағы ҡарарҙың "гәйепле" булыуын һәм 2006 йылдан 2010 йылға тиклем республикала мәктәптәр һанының 3200-ҙән 1800-гә тиклем кәмеүен билдерҙе. Йәғни, 1400 мәктәптең статусы үҙгәртелгән, уларҙың филиалдары барлыҡҡа килгән. 2010 йылдан 2012 йылға тиклем яҡынса 150-200 мәктәп оптималләштерелгән.

Республика етәксеһе әйтеүенсә, мәғариф өлкәһен финанслау арта, һуңғы өс йыл эсендә ул йылына 48 млрд һумға еткән. Был ресурстар иң тәүҙә хеҙмәт хаҡын түләүгә, мәктәптәрҙең матди торошон яҡшыртыуға йүнәлтелгән. Һуңғы йылдарҙа республика мәктәптәрендә ҡорамалдарҙы яңыртыу буйынса ҙур эш алып барыла. Президент билдереүенсә, компьютер менән тәьмин ителеш 54 мең берәмеккә еткән.

Хәҙер мәғариф өлкәһендә электрон белем биреү системаһына күсеү мәсьәләһе ороуы ла билдәләнде кәңәшмәлә. Көнбайышта "смарт-йәмғиәт" тип йөрөтөлгән аҡыллы йәмғиәт нигеҙен төҙөү өсөн тормоштоң бөтөн өлкәләренә глобаль заманса мәғлүмәти технологиялар индереү зарур. "Кемгә нисек оҡшай, әммә беҙ бар яҡлап информацион технологиялар ҡолона әүерелә барабыҙ, улар беҙҙе төрлө яҡлап уратып алған. Яҡын 10-20 йыл эсендә тормош тап ошо йүнәлеш буйынса барасаҡ. Бөгөн донъяла мәктәптәр электрон формаға күсә. Балаларҙы иҫкесә уҡытып булмай", - тине Р. Хәмитов һәм Мәғариф министрлығына электрон белем биреү йүнәлешен үҫтереү буйынса ғәмәли эшмәкәрлек башлауҙы талап итте.

Кәңәшмәлә башланғыс һөнәри белем биреүсе уҡыу йорттары, вуздар тураһында ла һүҙ булды. "Республика вуздарының барыһын да тиерлек, хатта филиалдарҙы һаҡлап алып ҡалдыҡ, әммә филиалдар буйынса эштәр дауам итә әле", - тине президент.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠАНУН БОҘОУ ТҮГЕЛ,

## әммә әхлаҡҡа һыймай

**Башҡортостан юлдаш телевидениеһы каналына БР Президенты Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Аббас Ғәлләмов хәбәр итеүенсә, республиканың юғары уҡыу йорттарына ҡайһы бер вазифалы кешеләрҙең балалары маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡырға ингән. Асыҡланыуынса, ҡайһы бер абитуриенттарҙың БДИ буйынса йыйған балдары хатта юғары ла булмаған. Был хаҡта киң мәғлүмәт сараларында баҫылған мәҡәләләрҙән билдәле булды.**

"Мәҡәлә факты буйынса Президент Хакимиәтендә махсус комиссия булдырылды. Тұбәндәгеләр асыҡланды: ҡайһы бер юғары вазифалағы чиновниктарҙың балалары, ысынында ла, маҡсатлы йүнәлтмәләр алған. Был уларҙы башҡа абитуриенттарҙан өҫтөн ҡуйған. Юридик йәһәттән бында ҡанун боҙоуҙар юҡ, әммә әхлаҡи яҡтан был ярамаған ҡылыҡ. Шуға күрә Президент Хөкүмәт ағзаларының балаларына бүленгән барлыҡ маҡсатлы йүнәлтмәләрҙе ғәмәлдән сығарырға тигән ҡарар ҡабул итте. Юғары уҡыу йорттарына улар, БДИ буйынса йыйған балдарына ярашлы, башҡалар менән бер тигеҙ шарттарҙа уҡырға инәсәк. Бынан тыш, Президент был ваҡиғала ҡатнашҡан Хөкүмәт ағзаларына шелтә белдерҙе", тип билдәләне Аббас Ғәлләмов.

**"БАШИНФОРМ".**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 26 һәм 27 сентябрҙә Күгәрсен районында "Урал төбәгенең һәм уның менән сиктәш булған биләмәләрҙең биологик төрлөлөгөн һаҡлау мәсьәләләре" төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференцияһы үтә. Уны БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы, "Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығы, "Башҡортостан" милли паркы, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге, Башҡортостандың айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләре буйынса дирекция һәм "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы ойоштора.

✓Баш ҡаланың Профсоюздар йорто алдындағы майҙанда Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә һәйкәл ҡуйыласаҡ. Монтажлау эштәрен сентябрь урталарында тамамлау планлаштырыла. Скульптура янында сквер булдырыласаҡ. Унда сәскә түтәлдәре, ике фонтан, заманса яҡтыртыу системаһы, йәйәүлеләр өсөн яңы юлдар булдырыласаҡ. Һәйкәл композицияһының дөйөм бейеклеге - алты метр, оҙонлоғо 15 метр буласаҡ. Яңы скульптура алға табан атлаусы шағирҙы, шулай уҡ уның "Ташлама утты, Прометей!", "Салауат", "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" һәм башҡа билдәле әҫәрҙәренең геройҙарын һынландырасаҡ.

✓Санкт-Петербургта Юрий Фалик исемендәге IX "Йырлы донъя" ("Поющий мир") халыҡ-ара конкурсы тамамланды. "Камера хорҙары" һәм "Халыҡ музыкаһы" номинацияларында Өфө дәүләт сәнғәт академияһы коллективы (етәксеһе Алһыу Хасбуллина) икенсе урындарға лайыҡ булды. Бәйгелә Ҡытай, Япония, Финляндия, Италия, Польша, Украина, Эстония һәм Рәсәйҙән 20-гә яҡын хор коллективы ҡатнашты.

✓Өфө автоинспекцияһы сираттағы "Штраф" операцияһын башланы. Юл полицияһы хеҙмәткәрҙәре водителдәрҙең түләнмәгән штрафтары бармы-юҡмы икәнен тикшерәсәк. Штрафтарын ваҡытында түләмәгән өсөн икеләтә күләмдәге штраф йәки 15 тәүлеккә ҡулға алыу ҡаралған. Июнь айында үткән операция ваҡытында икеләтә күләмдәге штраф 237 кешегә бирелгән, бер водитель суд ҡарары буйынса 15 тәүлеккә ҡулға алынған.

ИҒТИБАР: ЯРҘАМ ИТӘЙЕК!

# ӘБЙӘЛИЛДӘР...

## һыуҙан ҡаза күрҙе

**Август беҙҙең район өсөн һынауҙар айы булды. Бер нисә тәүлек буйы туктамайынса яуған ямғырҙар һөҙөмтәһендә барлыҡ йылғаларҙа, Оло һәм Кесе Ҡыҙыл, Йәнгел йылғаларында һыу ташты. Буранғол, Исхаҡ, Үтәгән, Рыҫҡужа, Рауил, Ишкол, Тәпән, Ишбулды, Байым, Мораҡай, Таштимер, Тоҙлокүл, Дәүләт, Яңауыл, Булат, Сиҙәм, Үрге һәм Түбәнге Әбдрәш ауылдары һыу аҫтында ҡалды.**

Халыҡ баҡсаһында үҫтергән йәшелсә-емешен дә, әҙерләгән бесәнен дә юғалтты, һыу йорттарға ла үтеп инде. Бөтәһе 4209 кеше, 850 хужалыҡ зыян күрҙе. Зыяндың дөйөм суммаһы - 260 млн һум тирәһе. 25 күпер, 2 гидротехник ҡоролма, юлдар эшлектән сыҡты.

Һыу стихияһына район халҡы ойошҡанлыҡ, сыҙамлыҡ, мобиллек һәм оперативлыҡ менән яуап бирҙе. Штаб төҙөлдө, ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителде. Ауыл биләмәләре башлыҡтары өй һайын йөрөп, килеп тыуған хәл тураһында аңлатты. Кешеләр ғаиләға бирелмәне, бер-береһенә ярҙам итте.

Дөйөм тырышлыҡ менән ташҡынға ҡаршы көрәшә алдыҡ. Иң мөһиме - кешеләрҙең ғүмерен, социаль объекттарҙы һаҡлап алып ҡалдыҡ. Бәлә килеп тыуғас та районға республиканың, шулай уҡ Түбәнге Новгород һәм башҡа ҡалаларҙың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы бүлексәләре килеп етте. Яҡын күршеләребеҙ - Магнитогорск, Баймаҡ, Сибай, Белорет, Мәләүез ҡалалары хакимиәттәре ҙур ярҙам күрһәтте. 10 августа районға республика Президенты Рөстәм Хәмитов килде.

Бөгөн стихиянын зәҙемтәләрен бөтөрөү һәм күрелгән зыяндың күләмен иҫәпләп сығарыу буйынса эштәр бара. Быны өсөн махсус комиссиялар булдырылған. Яҡын арала юлдарҙы, күперҙәрҙе тергеҙеү, территорияларҙы ремонтлау кеүек эштәрҙе атҡарыу бурысы тора. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ташҡын зәҙемтәләрен бөтөрөү һәм ҡыш миҙгеленә социаль объекттарҙы һәм шәхси хужалыҡтарҙы әҙерләп өлгөрөрбөҙ, тип ышанам.

**Рим СЫҢҒЫҘОВ,
Әбйәлил районы
хакимиәте башлығы.**

### Хөрмәтле республика халҡы!

Һуңғы йылдарҙа көслө һәм оҙайлы ямғырҙарҙан һуң республиканың таулы райондарында бәләкәй йылғалар ярҙарынан сығып, ошо йылғалар буйында урынлашҡан ауылдарҙы һыу баҫты. Бигерәк тә Ҡыҙыл йылғаһының ташыуы һөҙөмтәһендә Әбйәлил районы ауылдары зыян күрҙе. Һыу стихияһы ауыл кешеләрен бесәнһеҙ, картуф-йәшелсәһеҙ ҡалдырҙы. Дәүләт һәм йәмәғәтселек ярҙамынан тыш, әбйәлилдәргә был бәләнең зәҙемтәләрен бөтөрөү ауырға төшәсәк. Халыҡ мал аҙығы һәм картуф-йәшелсә һатып алыу өсөн финанс ярҙамына мохтаж.

Халҡыбыҙҙа бөтөн замандарҙа ла бәләгә ҡалғандарға ил менән ярҙам итеү йолаһы булған. Бөгөн Әбйәлил халҡы беҙҙең һәм һеҙҙең ярҙамға мохтаж. Әбйәлилдәр өсөн был ауыр көндәрҙә "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресс)" Башҡарма комитеты Советы республика халҡына мөрәжәғәт итеп, ауыр хәлдә ҡалған ауыл халҡына финанс ярҙамы күрһәтергә саҡыра.

Аҡсаларҙы түбәндәге реквизит буйынса махсус иҫәпкә күсереүегеҙҙе һорайбыҙ:

**Банк реквизиттары:
Благотворительный фонд МР Абзелиловский район РБ
ИНН 0201995162 КПП 020101001
Банк получателя: ОАО "Социнвестбанк", г. Уфа
р/сч: 40703810001150000054
БИК: 048073739
к/сч: 30101810900000000739**

### Хөрмәтле Өфө халҡы!

Өфө ҡала округы хакимиәте Әбйәлил районының һыу ташҡынынан ҡаза күреүсе халҡына социаль ярҙам күрһәтеү маҡсатында хәйриә ярҙамы йыйыу ойоштора. Аҙыҡ-түлек, кейем, башҡа кәрәк-яраҡтарҙы **Өфө ҡала округы хакимиәте**нең Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү буйынса идаралығына (Октябрь проспекты, 114/1) алып килергә мөмкин. Эш ваҡыты: 9.00 - 18.00

Ярҙам итергә теләүселәрҙе шулай уҡ **Дим районы**ның (Үҙәк урам, 18), **Калинин районы**ның (Б.Хмельницкий урамы, 53), **Киров районы**ның (Менделеев урамы, 136/2), **Ленин районы**ның (Ғафури урамы, 103), **Октябрь районы**ның (Энтузиастар урамы, 6), **Орджоникидзе районы**ның (Б.Хмельницкий урамы, 68/1), **Совет районы**ның (К.Маркс урамы, 65) халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү комплексы үҙәктәрендә иртәнге туғыҙҙан киске алтыға тиклем көтәләр.





ҺОРАУ - ЯУАП

### УНҺЫҘ ҘА ТЕРКӘРҘӘР

**Ирем айырылышыу талап итә, ә законлы никахта тыуған балабыҙға ни бары 10 көн. Уны теркәтеүгә ҡаршы килеп, ирем ЗАГС-ҡа паспортын биреүҙән баш тарта. Был мәсьәләне хәл итеү юлын нисек табырға икән?**

-РФ Ғаилә кодексының 17-се статьяһына ярашлы, ҡатыны ауырлы мәлдә һәм ул бала табып, бер йыл үткәнгә тиклем унын ризалығынан тыш ире айырылыу тураһында эш ҡуҙғата алмай.

ЗАГС органдарында баланың тыуыуын теркәтеү өсөн ирегеҙҙең ҡатнашлығы кәрәкмәй. Айырылышыуға ризалыҡ суд никахты тарҡатыу тураһында эште ҡарағанда бирелә.

### ЮЛЛАУ МӨҘҘӘТЕ ҮТКӘН

**1997 йылда беҙ атайым менән нотариуста ер участкаһын һатыу-һатып алыу килешеүе төҙөгәйнек. Хәҙер ул ошо килешеүҙе юҡҡа сығарып, бөтәһен дә үҙенә кире ҡайтарырға теләй. Был мөмкинме?**

- Атайығыҙ судта, килешеү төҙөгән ваҡытта эштең асылын аңлап етмәүе йә булмаһа хаталаныуын иҫбатлай алһа, судья эште унын файҙаһына хәл итеүе лә бар. Ә һеҙ, яуап тотоусы булараҡ (эш шуға барып етһә, әлбиттә), юллау мөҙҙәтенең үткәрелеп ебәреү мәсьәләһен ҡуҙғата алаһығыҙ.

### ЭШҠЫУАР ҠЫУАНҺЫН

**Һуңғы осорҙа эшҡыуарҙарға ҡағылышлы яңылыҡтар байтаҡ булды. Хәҙер эшен яңы башлап торған шәхси эшҡыуарҙы һалымдан азат итәсәктәр, тип ишеткәйнем. Шул дөрөҫмө?**

-РФ Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев тәҡдиме буйынса, үҙенең бизнесын тәү башлап теркәгән шәхси эшҡыуарҙар ике йылға бөтөн һалымдарҙан бушатылыуы ихтимал. Иҡтисад үҫеше министры урынбаҫары әйтеүенсә, был идеяны барлыҡ министрлыҡтар хуплаған да инде. Элекке эшҡыуарҙар был яңы льгота менән ҡулланыу маҡсатында иҫке бизнесын яңы тип күрһәтергә тырышасағын иҫәпкә алып, Хөкүмәт был эште үҙе контролдә тотасаҡ. Әлегә быны нисек эшләнәсәге билдәле түгел, унын нескәлектәре Финанс министрлығында һәм Федераль һалым хеҙмәтендә тикшерелә.

Бөгөн шәхси эшҡыуарҙар һалымды төрлө һалым режимы буйынса түләй. Ябайлаштырылған система (әйләнештән 6 процент йәки килемдән 15 процент), ваҡытлыса килемгә берҙәм һалым, НДФЛ һәм НДС, патент системаһы - һәр эшҡыуар уларҙың үҙенә ҡулайлыһын һайлап ала. Социаль түләүҙәр бөтөн режимдарҙа ла бар, был иғәнәләр һәр осраҡта ла һаҡланып ҡала. "Был яңылыҡ эшҡыуарҙарҙың легаль майҙандан күпләп китеүенә ҡарата яуап булып тора", - тип билдәләй "Деловая Россия"ның рәйесташе Александр Галушка. Йыл башынан страховка иғәнәләренең ставкаһы ике тапҡырға күтәрелеүе менән бәйле 458 000 кеше иҫәптән төшкән. 1 июнгә ҡарата 3,5 млн шәхси эшҡыуар теркәлгән булған.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аяҡ тирләһә

❖ Йәй аяҡ тирләү йышыраҡ йонсота. Ҡотолоу өсөн таҫҡа эҫе һыу ҡойоп, бер нисә бөртөк марганцовка бөртөгөн төшөрөргә. Һыу алһыуланғас, аяҡтарҙы һыу һыуынғансы шунда тығып ултырырға. Был дауаны бер нисә тапҡыр ҡабатларға була.

### Ағастар һауыҡтыра

Йәй ағастарҙан көс алыу өсөн ямғырҙан һуң килгән аяҙ көндә һайлау отошло. Тәүҙә ағасҡа 10-15 см етмәй тороп, тәләгендә әйт. Шунан ғына уға һыйын.

❖ Имән ағасы организмға көс бирә.

❖ Энәләләр (шыршы һ.б) - тонусты, иммунитетты күтәрә, депрессиянан һаҡлай. Ә йөрәк сирле, мигрень өйәнәклеләргә шыршы тирәһендә йөрөү тыйыла, сөнки кире йоғонто яһай.

❖ Тал - йомшаҡ, тынысландырыу энергияһы бирә, баш ауырыуын бөтөрә.

❖ Уҫаҡ - кәрәкмәгән энергияны ергә, һыуға ебәрә һәм кешегә таҙаһын бирә. Уны баш аҫтына һалып ятһаң да шифаһы тейә.

### Финик

❖ Организмды магний дифицитынан ҡотҡара. Күп кенә витаминдар менән тәьмин итә.

❖ Эҫ ҡатыуҙан ҡотолоу өсөн 4-5 бөртөк финик емешен ярты литр һыуҙа ҡайнатырға. Һыуынғас, аҫ ҡарынға эсергә. Ҡалған массаға һоло япраҡсаһы (хлопья) һалып, ярты сәғәт тотҡас, ашарға.

❖ Йөрәк сирлеләргә оҙаҡ ауырығандан һуң хәл йыйырға, арыуҙан ныҡ ярҙам итә. Шуға күрә финик емешен даими ашарға кәрәк. Айырыуса студент һәм уҡыусыларға. Ҡулланыр алдынан яҡшы итеп йыуырға онотмағыҙ.

### Ҡомалаҡ

❖ Ҡомалаҡ йоҡоһоҙлоҡтан яҡшы сара, үт ҡыуыуҙа, ҡаҡырыҡ сығарыуҙа уға еткән үлән юҡ. Шулай уҡ аппетитты күтәрә, ашҡаҙан спазмаһынан да ярҙам итә. Шуға ҡомалаҡ йыйырға онотмағыҙ!

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Йөрәк ауырыуына ҡаршы әпсендәр

**1.** Алтынтау. Алтынтауға алтын ағас. Алтын ағаста алтын ҡыуыш. Алтын ҡыуыш эсендә алтын өйрәк. Алтын өйрәк аҫтында алтын йомортҡа. Шул алтын йомортҡа ҡасан күккә төшөп ватыла, шул ваҡытта ғына минең йөрәгем һулҡылдап-һулҡылдап һыҙлар. Әгәр алтын күкәй күккә төшөп ватылмаһа, йөрәгем дә ауыртмаһын!

**2.** Етмеш ете ҡат ер аҫтында етмеш ете ҡат алтын шаршау. Алтын шаршау эсендә алтын ҡыҙ. Ҡасан шул алтын ҡыҙҙың етмеш ҡабат ерҙе, етмеш ете ҡабат шаршауҙы ярып сығып, йөрәге ауыртһа, шул сағында бының да йөрәге ауыртһын!

**3.** *Әй, йөрәк, ҡайт, йөрәк,*
*Ай ҡайтты, һин дә ҡайт,*
*Көн ҡайтты, һин дә ҡайт!*
*Ат башындай алтын йөрәк,*
*Ҡуй башындай көмөш йөрәк,*
*Урының тап, урының тап!*
*Имләмәһәм - миңә яҙыҡ,*
*Им булмаһа - һиңә яҙыҡ.*
*Минең ҡулым түгел,*
*Ғәйшә, Фатима инәләр ҡулы...*

**4.** Етмеш ете диңгеҙ артында аҡ ҡайын, аҡ ҡайын төбөндә алтын йүгән, алтын йүгән өҫтөндә алтын бикәс. Алтын бикәс алдында алтын өҫтәл. Алтын өҫтәл өҫтөндә алтын табаҡ. Алтын табаҡ өҫтөндә йөрәк бауын киҫә торған ҡайсы бар. Ҡасан шул ҡайсы (фәләндең) йөрәк бауын киҫә алһа, уның йөрәге ауыртһын... (Шулай тип өс мәртәбә өрөргә кәрәк).

## Һапылдатыу

Йөрәкте һапылдатып, йәғни күкрәкте алдан, арттан һуҡҡылап та имләгәндәр, һуҡҡылағанда ошондай әпсендәр ҙә әйтелгән:
*Һап-һап.*
*Һап-ҡурҡ,*
*Һап-ҡурҡ.*
*Ай ҙа ҡайтты,*
*Көн дә ҡайтты,*
*һин дә ҡайт.*
*Ҡайҙан килдең,*
*Шунда кит.*
*Һап-һап-һап.*
*Эй, Раббым!*
*Үҙең сихәтен бир*
*Ошбу ҡолоңа.*
*Минән сәбәп.*
*Алланан сихәт булһын.*
*Сыҡҡан ҡото*
*Кире керһен.*
*Һап-һап-һап.*
*Ай ҙа ҡайтты,*
*Көн дә ҡайтты,*
*Һин дә ҡайт.*
*Йәш ағас башына*
*Ҡунған ҡотом,*
*Кил, ҡотом.*
*Кил, ҡотом.*
*Үҙең кил!*
*Бында һинең маҡамың түгел.*
*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,*
*Сәбәп минән булһын,*
*Шифа Алланан булһын.*

Лә иләһи иллә-ллаһүл мәликүл ҡүддусүл сәләмүл муғминүл мүһәйминүл ғәзизүл жаббарүл мүтәкәббирү ғәммә Йусифун. Лә иләһә иллә-ллаһ, Лә иләһә иллә-ллаһ, Лә иләһә иллә-ллаһ, Лә иләһә иллә-ллаһ, сәбәп минән булһын. Сихәт Алланан булһын. Көф-көф-көф.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

**(Дауамы бар).**

ҺАБАҠТАР

# ҒҮМӘР ҠАРТ ФӘЛСӘФӘҺЕ

**Ғүмәр ҡарт ауылдың иң осонда йәшәй. Уның йорто урамдың һул яғына ла, уң яғына ла ҡарамай, тау битләүенең ҡап уртаһында. Шуға ла уға урамдағы хәлдәрҙең бөтәһе лә ус аяһындағы кеүек апасыҡ күренә. Билдәле инде, үҙенең ихатаһы ла клуб сәхнәһе һымаҡ, ғүмер буйы бөтә ауыл халҡының күҙ алдында булды.**



Йәш сағында урамға күҙ һирпергә ваҡыты булманы Ғүмәр ҡарттың, уның ҡарауы, хәҙер буш ваҡыты күбәйҙе. Бөтә эше - көнөнә бер нисә тапҡыр йорт-ҡураны әйләнеп сығыу, ә башҡаһына эшкинмәй. Эшкинмәй, тигәс тә, туғыҙынсы тиҫтәне тултырғанда шулай йөрөгәс тә яраған инде. Унан йәшерәктәр араһында таяҡҡа таяныл йөрөй алмағандар ҙа бар әле, тиҫтерҙәре иһә күптән гүр эйәһе булған.

Иртән торғас та ихата тирәләй йөрөп сығыу йәш саҡтан ҡалған ғәҙәте уның. Йорттары урманға терәлеп ултырған ҡалҡыулыҡта булғас, элегерәк төн сыҡҡансы әллә нисә төр януар-йәнлек килеп урар ине ихаталарына. Ҡуян, төлкө генә түгел, ҡырпаҡ ҡар өҫтөндә хатта бүре эҙҙәре лә күренә торғайны. Мал-тыуарға зыян иткәндәрен хәтерләмәй, иллә-мәгәр ҡош-ҡорттоң эҙһеҙ юғалған ваҡыттары күп булды. Төлкө генә ғәйепле түгел бында, әлбиттә. Сауҡалыҡта йолҡолған ҡаҙ-өйрәк йөнөн, ҡыҙҙырып ашаған усаҡ урынын, бушаған һыра, араҡы шешәләрен дә күргәне булды. Ҡулынан тотмағас, бер кемде лә бур тип әйтеп булмай. Хәйер, был йортта ғәйепле кешене эҙләргә, һүҙ эйәһен юлларға береһенең дә ваҡыты ла булманы. Бында ғүмер буйы ҡара таңдан ҡараңғы төшкәнсе эшләһәләр ҙә, эшмәшәҡәт бөтмәне. Әле улы менән килененә ҡарай ҙа, һөйөнөп бөтә алмай - электән килгән ғаилә йолаларына хыянат итмәнеләр. Күршекүләндең күбеһе, барыбер уңмай, тип, картуф та сәсмәй, ә уныҡылар, киреһенсә, баҡсаны ҙурайттылар, хатта күршеләренең бер нисә йыл буйы буш ятҡан ер участкаһына ла картуф сәстеләр. Иген ҡиммәт, тип, ҡош-ҡорт аҫырамаусылар ҙа күп хәҙер ауылда, ә Ғүмәр ҡарттың килене иһә йылдан-йыл ҡош-ҡортоноң һанын арттыра. Күстәнәсенә, тегеһенә-быныһына самалап ҡалдыра ла, бер аҙын һатып, йәй ашатыуға киткән игендең хаҡын ҡайтара һала. Магазинда хәҙер бөтәһе лә бар, тип, артыҡ мәшәҡәт талап итмәгән йәшелсәләрҙе лә ултыртмай башланы бит ауылдаштары. Магазинда булыр ҙа ул, ер аяғы-ер башы ерҙән килгәнгә ҡарағанда, үҙеңдеке яҡшыраҡ түгелме икән ни? Ауылда йәшәп, баҡса ла ултыртмағас, ҡош-ҡорт та тотмағас, тағы ни эшләргә була һуң? Шулай уйлай ҡарт балаларының баҡсаларында, ихаталарында эш менән мәж килгәнен күҙәтә-күҙәтә.

Иртә яҙҙан көҙгә тиклем тигәндәй көнөнөң күп өлөшө ихаталағы улы эшләп биргән артлы ултырғыста үтә Ғүмәрҙең. "Минең алтын тәхетем" тип шаярта ул. Йәш сағында көндөҙ йоҡлауҙы һөйһөнмәгән ҡарттың олоғайғас та кис етмәйенсә ятып тороу ғәҙәте булманы. Ултырып ойоп киткән, серем итеп алған ваҡыттары була булыуын, иллә-мәгәр сырхап тормаһа, көндөҙ һуҙылып ятҡаны юҡ. Әле лә бына ихатаһындағы иң ҡалҡыу урында, үҙе әйтмешләй, тәхетендә урамды күҙәтеп ултыра.

Ауылы ҙур түгел уның. Уға нигеҙҙе ҡарт олатаһы һалған. Ауылдаштарының бөтәһе лә тиерлек бер ырыу, бер ата бала булыуҙарына ҡарамаҫтан, уларҙың холҡо ла, яҙмыштары ла төрлө-төрлө.

Яңғыҙ ҡарағай үҫкән анау тәпәш ҡапҡалы йорттағылар ауылда иң иртә торған кешеләр. Эшкә бик шәптәр, әммә ғүмер буйы мандыманылар. Ирле-ҡатынлы икеһендә лә ҡоллоҡ психологияһы ныҡ урын алған - эйәртенешеп, кешегә эшләп көн күрҙеләр. Ҡатыны күрше-күләненә һарыҡ ҡырҡыу, йөн иләү, балсыҡ баҫып өй һылау, өй йыуышыу кеүек эштәргә йөрөһә, ире соҡор ҡаҙыу, бура бурау, ағас киҫеү, утын ярыу, бесән өйөү кеүек бөтә ҡара эште бушҡа эшләне. Иң бай кеше булырға тейеш тә һуң улар, әммә көндөкөн көнгә ялғап саҡ йәшәйҙәр.

Уларға ҡаршы яҡ йортта йәшәгәндәрҙең иһә, киреһенсә, ҡулдарынан бер ни килмәй. Ире хатта тейешенсә ат та егә белмәй, тиҙәр. Ғүмәр үҙе лә һынағаны бар: еккән аты, ысынлап та, юлда бер тапҡыр булһа ла туғарылмай ҡалмай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, даландары бар. Лотореянан отошто ла бер тапҡыр ғына алманылар. Һарыҡ-кәзәһе игеҙҙе бәрәсләй, һыйыры йыл һайын ике быҙау быҙаулай. Шуныһы ғәжәп: бынан күп йылдар элек был ғаиләләрҙең тәүгеһенең ҡарт олаталары алыпһатарлыҡ менән шөғөлләнеп, заманына күрә абруйлы, дәрәжәле генә кеше булған, мөгәзәй тотҡан. Икенсеһенеке ғүмер буйы көнлөксө булып хеҙмәт иткән.Тәҡдир тигәндәре шулмы икән? Тәүге ғаилә олаталарының белеп йәки белмәй ҡылған ниндәйҙер гонаһы өсөн һынау тотһа, икенсеһенеке, киреһенсә, үҙенең өлөшөнә бирелгән һынауҙы лайыҡлы үтеп, ейәндәренә юл асҡандыр...

Ғүмәрҙең ут күршеһенең атайолатайҙары һаранлығы менән дан тотҡан бай булған. Күршеһенән дә бит бер һәнәк һалам алһаң, бер күбә бесәнеңде әҙерләп тораһың. Ирле-ҡатынлы килешкәндәр инде, бер тинлек изгелек күрһәтәләр ҙә, әжерен унлата-йөҙләтә ҡайтаралар. Бесән өйгәндә лә быйыл иң һуңынан килеп, бер-ике һәнәк ырғытып ҡайтты ла, икенсе көнөнә, ҡулалмаш, тип, Ғүмәрҙең ике ейәнен алып китеп, көнө буйы эшләтте. Эшләгәндән кеше үлмәй ҙә ул, намыҫ, выждан тигән нәмә лә бар бит...

Ана, Матур апай урамға сыҡты. Ғүмәрҙән күпкә йәш булһа ла, ул да, ауылдың йәше-ҡарты кеүек, "апай" тип өндәшә уға. Йөҙгә лә, күңеле менән дә бик матур ул. Тик был тормошта бәхете генә булманы. Яратып ҡауышҡан кешеһе, береһенән-береһе бәләкәй ике улын ҡалдырып, хәбәрһеҙ юғалды. Атай тәрбиәһе күрмәгән балалар иһә йомшаҡ күңелле әсәйҙәренең һүҙенә илтифат бирмәй үҫте. Бөгөн уларҙың икеһе лә иркенән мәхрүм ителгән. Ә Матур апай һаман иң матур кейемдәрен кейеп, илле йыл элек юғалған ирен көтә. Йәшерәк саҡта ауыл ҡатындары ирҙәрен көнләшеп, төрлө ғәйеп тағырға маташты, әммә алтынға нәжес-бысраҡ яғыламы ни? Хәҙер, олоғайғас, бөтәһе лә уны изге йәнгә һанай. Кәңәш-төңәш итергә лә уға йөрөйҙәр, юлға сыҡҡанда фәҡәт уның ҡаршыларына сығыуын теләйҙәр. Яҙмышы уға ни өсөн бындай һынау әҙерләгәнен Ғүмәр ҡарт шулай юрай: ҡатындың ҡарт олатаһын ниндәйҙер ғәйебе өсөн ауылдан ҡыуған булғандар, ә уныһы, үс итеп, ауылдаштарына юл баҫып, ғүмерҙәрен ҡыйып йөрөгән. Шулай тип һөйләй торғайны олатаһы...

Бер уйлаһаң, ауылдаштарының береһенең дә бәхет һауыты мөлдөрәмә тулы түгел. Берәүһенең яңы ғына бурап ингән йорто янып, көлгә әйләнде, икенсеһенең берҙән-бер балаһы дауалап булмай торған сиргә дусар булды. Өсөнсөһөнөң улы ғәйепһеҙгә төрмәлә ултыра. Кемдер был тормошта юлды үҙе һала, икенселәр әҙер һуҡмаҡтан атлай. Ауылдың иң олоһо һәм ауылдаштарының бөтәһенең дә өләсәй-олатайҙарын белгән кеше булараҡ, теге йәки был ҡайғының, бәләнең сәбәбен, башын уларҙың ҡарт олатайөләсәйҙәренең тормошона бәйләргә ғәҙәтләнгән Ғүмәр. Балалар атай-әсәй өсөн яуап бирмәй, тиҙәр, шулай булырға тейеш тә һуң. Бөтә ғаләмдең, халыҡтарҙың ғәҙел хужаһы Аллаһу Тәғәлә бына шундай һынау ҡуя әҙәмдәр алдына. Ә бөгөнгө ауылдаштарының балаларының балаларын ниндәй яҙмыш көтә икән?..

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

ТАРИХ ШАҢДАУЫ

# ИХТИЛАЛ БАТЫРҘАРЫН...

## язалау урынылыр был

**Ваҡыты, уңайы тура килгән саҡтарҙа әсәйем үҙенең әсәһе Ғәрифә, өләсәһе Шәрифәнән ишеткән тарихи ваҡиғаларҙы бәйән итер ине: "Һикһәндән үтеп, тома һуҡыр ҡалған өләсәйем беҙҙе үҙенең янына йыйыр ҙа, "Беҙҙекеләр урыҫ батшалығына ҡаршы ныҡ һуғышҡан нәҫел. Ағайымдар шул яуҙа үлгәндәр. Тегеләрен, ихтилалда ҡатнашҡандары өсөн, язалап үлтергәндәр. Апайымдарҙы ҡоллоҡҡа һатҡандар..." тиеп, һәр береһенең исемен әйтеп, шул замандарҙағы хәл-ваҡиғаларҙы һөйләй торғайны. Уҡый-яҙырға өйрәнгәс, ниңә өләсәйемдең һөйләгәндәрен онотоп бөтмәҫтән элек яҙып ҡуйып һаҡламағанмын икән, тип тә үкенер ине..."**

Юҡҡа ғына "Халыҡ хәтере киң" тип әйтелмәгән. Һәр замандың ил өҫтөндә үткән хәл-ваҡиғалары бер-ике генә шаһиттың булһа ла хәтерендә һаҡлана. Шул бер-икәү күргән-ишеткәндәрен йәш быуынға һөйләп ҡалдыра... Ә шаһиттар араһында уҡымышлы, белемле һәм ишеткән-күргәндәрен ҡағыҙға теркәргә форсатын тапҡандар ҙа булған. Һуңғы 20 йылдар араһында халҡыбыҙ тарихына ҡағылған төрлө яҙма сығанаҡтар табылып, ҡайһы бер гәзит-журналдарҙа донъя күреүе халыҡ хәтеренең үлмәүе тураһында һөйләй. Бигерәк тә башҡорттарҙың Рәсәй батшалығына ҡаршы булған ихтилалдары һәм шул замандарҙағы тарихи шәхестәргә ҡағылған яҙма сығанаҡтар менән танышырға мөмкинлек тыуҙы. Шундай сығанаҡтарҙың береһе "Аҡай яуы" исемле тарихи хикәйә (Аҡай Күсем улы 1735-1740 йылғы ихтилалдарҙың етәксеһе) "Ватандаш" журналында ла баҫылып сыҡты. Йәненде, аңыңды тетрәндерер ваҡиғалар һүрәтләнә хикәйәлә:

"... Әле әйтелгән мәзлүм мосолмандарҙы, аяҡ-ҡулдарын быҒаулап, Минзәләгә килтерҙеләр, барыһын да зинданға яптылар. Аҡыл эйәһе ҡарттарҙы, яуҙа ҡатнашҡан егеттәрҙе ҡараңғы ер аҫтына һалдылар. Унан һуң ҡала тышында алты босмаҡлы ғимәрәй (эшафот) ҡорҙолар. Уның һәр босмағына осло тимер шештәр ҡаҙып ултырттылар. Бер тимер шеш уртала, ҡалған тимер шештәр тирәһенә тағандар таҡтылар.

Бынан һуң тотҡон батырҙарҙы килтерҙеләр. Тимер ҡаҙыҡтарҙы, дар ҡолғаһын кафыр ғәскәре сорнап алып, барабандар ҡағып, уйындар ҡылып, указ уҡылды. Урыҫтар язалауға тотондо.

Иң әүәл беренсе башлап яуға кергән егетте урталағы йыуан тимер шешкә тотоп ултырттылар. Ул тимер шеш егеттең бөтә эсен тишеп, иңбашына ҡәҙәр килеп сыҡты. Бүтәндәрен тирәһендәге осло тимер шешкә ултыртып, яман яза менән үлтерҙеләр. Аҙаҡ ярым үле кәүҙәләрен киҫәктәргә сабып өҙҙөләр. Ахырҙа баштарын киҫеп ташланылар. Ҡалғандарын ҡабырғаларынан тимер ырғаҡтарға аҫтылар. Аҙаҡҡа ҡалғандарын ауыр таштар менән бәргеләп, ҡанталҡан итеп үлтерҙеләр. Бынан тыш, мәғлүм булыуынса, әсиргә төшкән аҙаҡҡыларын Минзәлә ҡалаһының ситенә сығарып, сафҡа теҙеп, туп һәм мылтыҡтарҙан атып, барыһын да үлтереп бөттөләр. Шул саҡлы күп кеше үлтерелде, уларҙың мәйеттәрен күмеп тә тормайынса, үләкһә мал урынына сүплектәргә ташланылар..."

Башҡорт яу батырҙарын Минзәләлә шулай вәхшиҙәрсә язалау ваҡиғаһы тағы шундай ҡанһыҙлыҡ менән Ҡараһаҡал яуынан һуң 1740 йылда Һаҡмар буйында һәм Өфөлә, хәҙерге "Дуҫлыҡ монументы" торған урында ҡабатлана. 1572 йылдан (тәүге ихтилал) алып һуңғыһы - 1837 йылға тиклем Башҡорт иле ерҙәрендә 76 тапҡыр баш күтәреү осраҡтары билдәле (М. Мортазин).

Билдәле булыуынса, Ҡараһаҡал (Миңлеғәле Юнаев) юрматы ырыуы башҡорто һәм уның етәкселегендәге ихтилал юрматы ерҙәренән башланып китә. Һис шикһеҙ, болалар баҫтырылғас, каратель отрядтары яуҙа ҡатнашҡандарҙы һәм уларҙың нәҫел-нәсәптәрен эҙәрлекләп, юрматы ауылдарынан үткән. Алда әйтелгән ауылдарҙы үртәп, көлгә ҡалдырып, яуҙа ҡатнашҡандарҙы бер урынға туплап, аяуһыҙ язалауҙар үткәргән. Ә уларҙың һаны ҡот осҡос. 1735-1740 йылдарҙа Ырымбур һәм Минзәлә өйәҙҙәрендә генә лә 700-ләп ауыл яндырыла, 16913 башҡорт үлтерелә, 9191 ҡатын-ҡыҙ ҡоллоҡҡа һатыла, 4 меңгә яҡын кеше каторгаға оҙатыла ("Киске Өфө" гәзите, №21- 22. Урал Мостафин).

Фаразлау һүҙем тағы ла бер ошондай ваҡиға - батырҙарыбыҙҙы язалау урынына юлығыуыбыҙ тураһында. 2004 йылда "Торатау" гәзитендә (№108) 1919 йылда сигенеп барыусы аҡтарҙы -вәлидовсыларҙы үҙҙәрендә йәшәткәндәре өсөн ҡыҙылдар тарафынан күп халҡы атылған, яндырылған Оло Кәбәс ауылы тураһында яҙып сыҡҡайным. Унда ул ауылдың өсөнсө тапҡыр күсенеп ултырыуын иҫкә алып, икенсеһе хәҙерге Ишембай районындағы Зигановка (урыҫ ауылы) тирәһендә булыуын әйтеп үткәйнем. 2010 йылда эшкә Маҡар ауылы дауаханаһына күсеү сәбәпле, Зигановка ауылына яҡынлашылды. Һорашып-белешеп йөрөй торғас, элекке замандарҙа (1735-1740 йылдар) Зигановка тирәләй Бүжә (Ғүмәр), Ибрай ауылдары урынлашҡанын, ә аҙаҡтан уларҙың да икенсе ерҙәргә күсенгәндәрен белдем. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге Петровск ауылы урынында Кинйәкәү исемле башҡорт ауылы булыуы ла билдәле. Үҙенән-үҙе һорау тыуа: ниңә был ауылдарҙың халҡы тамырланған нигеҙҙәрен ташлап, күсенергә мәжбүр булған? Һис шикһеҙ, ихтилалда ҡатнашҡан башҡорттарҙың ауылдары яндырылған, ауыл халҡының күҙ алдында яуҙа ҡатнашҡан батырҙар язаланған. Ә беҙҙең халыҡтың йолаһы буйынса, тотошлай янып бөткән, күпләп халҡы ҡырылған (үлтерелгән) ауылда яңынан төпләнергә ярамай. Улай булмаған хәлдә лә, урыҫ крепостнойҙарын күсереп ултыртыу өсөн башҡорттарҙы ауылдарынан ҡыуыу ваҡиғалары ла яҡшы билдәле. Сөнки Зигановкаға ла, Петровскиға ла Әүжән (Үрге Әүжән, Белорет районы) урыҫтарын күсереп ултыртҡандарын беләбеҙ. Ғөмүмән, Оло Кәбәс, Бүжә, Ибрай, Кинйәкәү ауылдары ни сәбәптән күсенгән, тигән һорау торғанда уға яуапты төҫмөрләүе ҡыйын түгел...

... 2011 йылда Стәрлетамаҡта йәшәүсе Артур ҡатынының ауылынан - Зигановканан ер алып, шунда нигеҙләнергә уйлай. "Ниңә бында ер алдым икән, тигән көнгә төштөм инде", тип аптыранып һөйләне ул миңә берҙән-бер көндө. Аптыраныуының сәбәбе бик етди булып сыҡты. Йорт нигеҙен һәм баҙын трактор менән ҡаҙа башлағас та бер метр, метр ярым тәрәнлектән шауҙырлап кеше һөйәктәре сыға башлай. Тракторист эшен бөтөрмәй ташлап ҡаса. Артур был күренеште шулайыраҡ һүрәтләне: "Һөйәктәр тырым-тырағай, бер-береһенең өҫтөндә ята. Яңаҡ һөйәктәрендәге теш тәре тулыһынса теүәл тиерлек. Баш һөйәктәре тирәһендә сәстәре юҡ. Иң ғәжәпләндергәне: ҡайһы берҙәренең муйындарына кейҙерелгән ағас ҡалыптар..." Танышым һыҙып күрһәтеүенсә, ул ҡалыптар ошондайыраҡ формала булған **(1-се һүрәт)**. Ике өлөштән торған ағас ҡалыптарҙың ике яҡ осона йәмшәйтелгән ҡаҙауҙар ҡағылған. Ҡайһы берҙәренең баштары ялпайтып ҡына һуғылған, ә ҡайһыларының шаҡмаҡ йә дүңгәләк итеп йомарланған була **(2-се һүрәт)**. Ҡаҙауҙарҙың оҙонлоҡтары 120-150 мм самаһы.



1-се һүрәт.

"Йорт нигеҙенән сыҡҡан һөйәктәрҙе ергә 5 метр самаһы оҙонлоҡҡа теҙеп һалдым, - тип дауам итте Артур.- Шунан уларҙы тоҡҡа тултырып, Петровскиҙан килгән полиция хеҙмәткәрҙәренә биреп ебәрҙем. Уларға биреп ебәрер алдынан ҡайны ҡарттың һүҙен тыңлап, поп саҡыртып, йорт нигеҙен "изге һыу" менән сылаттыҡ. Ләкин мажара бының менән генә бөтмәне. Мунса нигеҙен ҡаҙығанда ла шундай уҡ хәл ҡабатланды. Унда табылған кеше һөйәктәре әле лә шунда тоҡҡа тултырылған килеш ята..." **(3-сө һүрәт)**.

Мин Артур һөйләгән был күренеште үҙем барып күрҙем. Шунан электән үҙем ишеткән хәтирәләрҙе лә, уҡығандарымды ла иҫкә төшөрҙөм, ҡайһы бер тарихты белгән кешеләр менән дә фекер алыштым. Ҡайһы берәүҙәр был һөйәктәрҙе Әбей батшаның (Екатерина II) Белорет - Стәрле юлын төҙөү эшендә ҡатнашҡан әсирҙәрҙекелер, тип тә фаразлай. Улай тиһәң, ул әсирҙәр бер көндә тигәндәй шул тиклем күпләп үлмәгәндер бит? Уларҙы ла быҒау-ҡалыптарын һалдырып, үҙ диндәренсә йолалар үткәреп, тәрбиәләп күмгәндәрҙер, ә бер-береһенең өҫтәренә арҡыс-торҡос бәреп түгел...


2-се һүрәт.

Был, минеңсә, 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарында ҡатнашҡан Кинйәкәү, Бүжә, Ибрай, Кәбәс, Ҡармыш ауылдарының батырҙары язалап үлтерелгән урын булырға тейеш.

Ундай язалау урындары өсөн ауыл тирәһендәге ҡалҡыуыраҡ ерҙәрҙе һайлағандар. Ә был урын ысынлап та ҡалҡыуыраҡ ерҙә урынлашҡан...

Йомғаҡлап шуны әйтеп була. Беҙҙең тарихсыларға әле эҙләнәһе, асыҡлайһы тарихи факттар бихисап. Дин әһелдәренә лә, йәмәғәтселекте йәлеп итеп, әлеге урында диндәш әруахтар хөрмәтенә йыназа-ҡөрьән уҡыуҙы башҡарыу фарыздыр (диндәш, тием, сөнки һөлдәләр араһында бер генә тәре лә осрамаған). Тарихсыларыбыҙ ошо фаразлауҙарҙың дөрөҫлөгөн иҫбатлай алһа, бәлки, был ҡәберлектә иҫтәлекле таш ҡуйырға ла мөмкин булыр ине. Был киләһе быуындар өсөн бик тә фәһемле сара булыр. Сөнки илһөйәрлек ил тарихының тамырында ғына үҫешә ала. Тарихыбыҙ ҡороһа, илһөйәрлек тә ҡорор.

**Рәдис ДУСАЛИН,**

**Ишембай районы Маҡар ауылы дауаханаһы табибы.**


3-сө һүрәт.

*✓ Рухты тап гуманитар фәндәр тәрбиәләй. Әлбиттә, рухты һатып ебәрергә, патент алырға мөмкин түгел, тик шулай ҙа рухһыҙ йәмғиәт тә ил өсөн файҙаға түгел.*



# МИЛЛӘТТЕ иң тәүҙә

**Социологтар фекеренсә, Рәсәйҙә ғаилә ҡиммәттәре тамырынан үҙгәрә. Бынан егерме йыл элек кенә хатта күҙ алдына килтереп тә булмай торған күренештәр, әйтәйек, никахһыҙ йәшәп тороу, суррогат әсәлек, эко ярҙамында бала табыу бөгөн ғәҙәти күренешкә әүерелә бара. Бындай шарттарҙа башҡорт ғаиләләре ниндәй үҙгәрештәр кисерә? Традицион ғаилә әҙәбенең юҡҡа сығыуы ғаиләгә нисек йоғонто яһай? Был һорауҙарға рубриканың бөгөнгө ҡунаҡтары - М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты доценттары,
тарих фәндәре кандидаты, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре Мөхәмәт Вәлиәхмәт улы МЫРҘАБУЛАТОВ менән тарих фәндәре кандидаты Розалия Рәфҡәт ҡыҙы БАЯЗИТОВА менән бергәләп яуап эҙләйбеҙ. Әйткәндәй, уларҙың хеҙмәттәре Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһының фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителгән.**

**▸ Күптән түгел РФ Премьер-министры Дмитрий Медведев Рәсәй Фәндәр академияһында реформалар кәрәклеге хаҡында һүҙ ҡуҙғатты. Тимәк, илдең бөтөн структураларында барған үҙгәрештәр фәнгә лә киләсәк. Был туралағы закон проекты әҙерләнә лә инде. Фән өлкәһендә ниндәйҙер үҙгәрештәр талап ителәме? Һеҙҙең был реформаға ҡарашығыҙ нисек?**

**М. МЫРҘАБУЛАТОВ:** Проект авторҙарының ниәте буйынса, Рәсәй Фәндәр академияһына башҡа йүнәлештәрҙәге, әйтәйек, медицина, ауыл хужалығы фәндәре академиялары ҡушыласаҡ. Академиктар, ағза-мөхбирҙәр иҫәбе ҡыҫҡарасаҡ, улар араһында артыҡ эш менән мәшғүл булғандарҙың байтаҡ булыуын иҫәпкә алһаҡ, матди яҡтан бындай реформа кәрәк кеүек. Шулай уҡ бер йүнәлештә, бер үк эште башҡарып ултырыусы тикшеренеү институттары бар, ни эшләп уларҙы берләштермәҫкә? Тик был эште зыян килтермәҫлек итеп башҡарырға кәрәк. Рәсәй Фәндәр академияһына яңы һайлап ҡуйылған президент Владимир Фортов бик эшлекле кеше, шуға ла реформа уйланылған аҙым булыр, тип ышанам.

Элек совет заманында фәнгә иғтибар ҙур булды. Ғөмүмән, коммунистар ике нәмәгә аҡса йәлләмәне - ҡурғауылға (оборона) һәм фәнгә. Сөнки уларҙың береһе икенсеһенән тыш үҫешә алмай. Һөҙөмтәлә, беренсе спутник - совет спутнигы, беренсе космонавт - совет космонавы, асыҡ космосҡа беренсе булып совет кешеһе сыҡты, һәм башҡалар. Ә хәҙер нисек? Бына, мәҫәлән, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгенә талап ителгән бюджеттың 40 процентың ғына бирә ала дәүләт, ә ҡалған аҡсаны улар үҙҙәре табырға бурыслы. Әммә шул уҡ ваҡытта, ҙур сығымдар түгеп, ситкә сығып киткән ғалимдарҙы ҡайтарып, "Сколково" инновацион үҙәге төҙөп ҡуйҙылар. Быны нисек аңларға һуң?

Элегерәк археологтарҙы экспедицияларға үҙҙәре ҡыуа инеләр, хәҙер археолог экспедицияға сығыр өсөн үҙе аҡса табырға тейеш. XVIII быуатта Петр Алексеевич батшалыҡ иткән осорҙа Петербург фәндәр академияһын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителә. Шунда иң аҙаҡҡы пункта былай тиелгән: финанслау өсөн дәүләт бюджетынан 3 процент бүлергә. Бик әҙ, тип уйлайһығыҙмы? Бөгөн Рәсәй Фәндәр академияһына бюджеттан тағы ла әҙерәк - 0,50 процент ҡына аҡса бүленә. Бер һүҙ менән әйткәндә, фән бер кемгә лә кәрәкмәй. Ошоларҙы уйлаһаң, реформа бик урынлы булыр.

**Р. БАЯЗИТОВА:** Эйе, ниндәйҙер кимәлдә реформалар кәрәк, тик улар уйлап эшләнһен, үҙең ултырған ботаҡҡа сабыу менән бер булмаһын ине. Бөгөн иң тәүҙә фәнгә ҡарата мөнәсәбәтте яҡшы яҡҡа үҙгәртеү кәрәк. Әгәр ҙә грантың бар икән, һин эшләйһең, экспедицияға сығаһың, конференцияларҙа ҡатнашаһың, юҡ икән - өйҙә ултыраһың. Академияларҙа ла, вуз системаһында ла фән эше бына ошоға ҡоролған. Хөкүмәттең хәстәре күберәк теүәл, техник фәндәргә ҡағыла, ә гуманитар фәндәргә иғтибар юҡ кимәлендә. Алда әйткән реформаны үткәреү гуманитар фәндәр үҫешенә насар йоғонто яһаясаҡ, тип уйлайым. Ә рухты тап гуманитар фәндәр тәрбиәләй. Әлбиттә, рухты һатып ебәрергә, патент алырға мөмкин түгел, тик шулай ҙа рухһыҙ йәмғиәт тә ил өсөн файҙаға түгел. Ҡиммәттәр үҙгәрә, быны беҙ үҙебеҙ эшләгән тема өҫтөндә эшләгәндә - ғаилә проблемаларын өйрәнгәндә аныҡ күрәбеҙ.

**▸ Донъяла барған интеграция, глобализация кеүек процестар кешелеккә, дәүләткә, милләткә, шул иҫәптән, ғаиләгә лә тәьҫир итмәйенсә ҡалмай. Башҡорт ғаиләһе бөгөнгө шарттарҙа ниндәй үҙгәрештәр кисерә? Ул, әйтәйек, XIX быуат ғаиләһенән нимәһе менән айырыла?**

**М. МЫРҘАБУЛАТОВ:** Был темаға тотоноуыбыҙҙың да сәбәбе шунда: хәҙерге йәмғиәттә элекке ғаиләләр юҡ. Ғаилә шул тиклем ҙур үҙгәрештәр кисергән, хатта тамырынан үҙгәргән, тип әйтһәң дә була. Виктор Астафьев тигән бөйөк ғалим һәм яҙыусының шундай һүҙҙәре бар: "Әгәр ҙә ғаиләләр тарҡала икән, дәүләт, империялар ҙа юҡҡа сыға". Ғаилә ҡиммәттәре алға ҡуйылмаған дәүләттә йәшәйбеҙ беҙ бөгөн. Башҡорттар элек баланы күпләп таба ине, хәҙер ауылдарҙа йәшәүселәрҙә лә уртаса ике бала өҫтөнлөк итә. Быны төрлөсә аңлатырға була, шулай ҙа төп сәбәп - ғаиләләр дәүләттең ярҙамын тоймай, шуға үҙенә лә артыҡ ышанмай. Рәсәйҙә лә, Башҡортостанда ла ғаиләләргә, балалыҡҡа, әсәлеккә ярҙам күрһәтеү буйынса ҡарарҙар күп, әммә, дөрөҫөн әйткәндә, уларҙың береһе эшләмәй. Бөгөн балалар пособиеһы айына 150 һум, был аҡсаға бер ай буйына баланды нисек аҫырайһың? Уны бит ашатырға, кейендерергә, ҡайҙалыр йәшәргә кәрәк. Өфөлә генә 18 мең бала балалар баҡсаһына сиратта тора.

Үлем кимәле күтәрелә, тыуым кәмей, айырылышыуҙар күп. Былтырғы мәғлүмәттәр буйынса, республикала ун никахҡа ете айырылышыу осрағы теркәлгән. Айырылышыуҙы, ни өсөндөр, шулай уҡ ғәҙәти хәл итеп күреү барлыҡҡа килде. Ә ысынында иһә, айырылышыуҙарҙың нигеҙендә ғаилә ҡиммәтенән шәхси азатлыҡты өҫтөн ҡуйыу тормаймы икән?

**Р. БАЯЗИТОВА:** Сағыштырып ҡараһаң, айырмалар ысынлап та күп. Хәҙерге көндә бала, ғәҙәттә, кемгә кейәүгә сығырға, кемгә өйләнергә икәнлеген үҙе хәл итә. Элек иһә ата-әсә хәл иткән. Димләп тә өйләндергәндәр, өйләнер алдынан зат-ырыуын тикшереп сыҡҡандар: туған түгелме, яман исемле кешеләре, ауырыуҙар юҡмы? Унан һуң, бөгөн әсә - улды, ата - ҡыҙҙы белмәй, тигәндәй, әҙәп бөтөнләй юҡ кимәленә төшөп бара, ә элек ғаиләлә әҙәп-әхлаҡ ҡанундарын ныҡ тотҡандар бит.

Үҙ-ара мөнәсәбәттәргә килгәндә инде, ҡатын-ҡыҙ ирен юғары ҡуйған, сөнки ир - ғаиләнең тотҡаһы, уны ҡараусы булған. Ир менән ҡатын тәртип ҡағиҙәләрен үтәүгә ҙур иғтибар биргән, уларҙы боҙһаң, "юғарынан" яза бирелә, тип уйлаған. Мәҫәлән, Себерҙә йәшәгән төрки телле халыҡтарының ышаныуҙарына ярашлы, баланың ауырыуы әсәһенең теге йәки был тыйылған эште эшләүе менән бәйле. Башҡорттарҙа ла, ҡатын-ҡыҙ бала тапҡанда ныҡ ауырый икән, тимәк, ул ире алдында гонаһлы, тигән юрау булған. Ҡатыны ирен бер ҡасан да исеме менән атамаған. Был ҡәтғи тыйылған булған. Беренсе балаһы тыуғансы ҡатыны иренә - "беҙҙеке", "атаһы", бала тыуғас - уның исемен ҡушып, мәҫәлән, "Димдең атаһы", тип, "хужам", "бабай", кесе туғанының исеменә ҡушып - "Ғәйзулланың ағаһы", "Ҡара әле", "Әй!" тип мөрәжәғәт иткән. Ирҙәр өсөн был тыйыу ҡәтғи булмаған. Улар ҡатындарына мөрәжәғәт иткәндә "кәләш", "әсәһе", "ҡатын", "бисәкәй", "әбей", "ҡарсыҡ" тигән һүҙҙәрҙе ҡулланған.

Ир исемдәренең табулашыуы һунарсылыҡ кәсебе, хайуандарҙың һәм ҡоштарҙың культы менән дә бәйле. Билдәле булыуынса, малайҙарға хайуандар атамаларына бәйле исемдәр биргәндәр. Табулау тәүҙә ошо, һуңынан инде барлыҡ ир-егеттәр исеменә таралған. Шулай уҡ кешенең исемен әйтеү - уның йәнен саҡырыуға бәрәбәр булған. Исемләп өндәшһәң, йәненә зыян килә, тигән ышаныс көслө булған.

Шулай уҡ ир менән ҡатынға кешеләр алдында тойғоларын күрһәтеү тыйылған. Ҡатын ирен хурламаҫҡа, дәрәжәһен төшөрмәҫкә тейеш. Ышаныуҙар буйынса, ирен рәнйеткән ҡатындың битен теге донъяла күмер менән яндырасаҡтар. "Ир хурлама - боҫторор тей, аш хурлама - ҡоҫторор тей", тип иҫкәртә боронғолар һүҙе. Үҙ сиратында ирҙәр ҙә ҡатындарына ризаһыҙлығын күрһәтергә, етешһеҙлектәрен сит кешеләр алдында әйтергә тейеш түгел. "Ир типкәнде - мир типкән", тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр.

Ир менән ҡатынға бергә ҡушлап йөрөү тыйылған. Ҡатын кеше иренән ике-өс аҙым арттараҡ йөрөргә тейеш. "Ҡуштандай ҙа йөрөйҙәр!" тип тәнҡитләйҙәр ине элегерәк өләсәйҙәр еңгәйҙәрҙе. Был ҡағиҙә бик боронғо ваҡытҡа, ырыуҙар араһындағы үҙ-ара ыҙғыштар дәүеренә барып тоташа - ғаиләһенә ҡурҡыныс янамаһын өсөн, ирҙәр алдан юлды тикшереп барыр булған.

Бөгөнгө килендәр ҡайныһы-ҡәйнәһе алдында әҙәп һаҡларға кәрәк, тип уйламай ҙа, элек килен ҡайныһы, ҡайнағалары менән бөтөнләй һөйләшмәгән. Башта ҡәйнәһе менән дә һөйләшмәгән, күпмелер ваҡыт үткәндән һуң "Ярай, килен, һөйләшә башлайыҡ инде", - тип әйтеп, бербереһенә бүләктәр бирешкәс кенә аралаша башлағандар. "Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла", тигән һүҙҙәргә тәрән мәғәнә һалынған, сөнки килендәре менән күпселек осраҡта улдары аша аралашҡандар.

Бер табын артында ултырып ашау ҙа булмаған, килен шаршау эсендә ашаған. Бында бер ниндәй ҙә кәмһетеү юҡ, атай



***Әле лә баланың туған телен белеүе, әҙәп-әхлаҡ тәрбиәһе ғаиләнән килә. Шуға ла бөгөн дә милләтте башлыса ғаилә һаҡлап килә, тип әйтә алабыҙ. Бары тик артабан да ғаилә статусын нығытыу мөһим. Был эшкә ғаиләне лә, йәмғиәтте лә ҡушырға кәрәк. Һуңғы ваҡытта ауылдарҙа, ҡалаларҙа ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар ойошмалары тергеҙелә, тимәк, ололарға ҡарата ихтирам ҡайта. Элек барыһы ла оло кешенең һүҙенән ҡурҡып торған, уларҙан тартыныу булған. Хәҙер беҙгә ирҙәрҙең статусын күтәреү, ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләләге урынын билдәләү йәһәтенән эштәр башҡарырға кәрәк.***

***✓ Ғаилә ҡиммәттәре үҙгәрә лә, тик былдай ирекле никах формалары бәхет һәм тормоштан ҡәнәғәт булыу кеүек тойғоларҙы юҡҡа сығара. Ирек бар, ә бәхет юҡ.***



кеше ит бүлгәндә, кемгәлер киҫәк биреп еткермәһә, гонаһ һаналған, тимәк, киленгә лә ярайһы ғына өлөш сыҡҡан. Был йолалар ниндәйҙер кимәлдә киленгә яңы ғаиләгә өйрәнеп китеүгә булышлыҡ ҡына иткән. Былдай тыйыуҙар ҡайныға ла ҡағылған, ул килененең тормошона ҡыҫылмаған, әйберҙәренә теймәгән, тирмәгә инеп килгәндә, иҫкәртеп, тамаҡ ҡырып ингән. Йәғни, ике яҡҡа ла тигеҙ ҡуйылған нормалар булған.

**Был этикет нормалары ғаиләнең ныҡлығын һаҡлау өсөн уйлап табылғандыр бит. Бөгөн айырылышыуҙарҙың күп булыуын халыҡҡа хас ошо традицион этикеттың емерелеүенә лә бәйләп аңлатырға буламы?**

**Р. БАЯЗИТОВА:** Әлбиттә, була. Элек айырылып ҡайтыуҙан оялағандар. Башҡорт ҡатындары айырылыша алған, ул йола "хула" тип атала. "Талаҡ" тип ир кеше әйтһә, ҡатын "хула" тип әйтеү хоҡуғына эйә

Ситтән тороп белем алыусылар араһында айырылышыуҙарҙың сәбәптәре буйынса һорау алыу үткәргәйнек. Айырылышыуҙарҙың күп булыуына ижтимағи ҡоролош та, диндән йыраҡлашыуыбыҙ ҙа сәбәпсе. Әгәр ҙә милләт дингә яҡын икән, ул айырылышыуға ярамаған әйбер тип ҡарай. Эскелек кеүек яман ғәҙәттәр менән дуҫ булыу, хыянат итеүҙе лә төп сәбәпсе тип иҫәпләй студенттар. Ир кеше шулай үҙенең абруйын төшөрә икән, әлбиттә, ғаиләләр тарҡаласаҡ.

**Р. БАЯЗИТОВА:** Ир кешенең абруйын тәрбиәләү бәләкәйҙән башланырға тейеш. Ҡыҙҙар менән малайҙар физиологик күҙлектән генә түгел, психологик йәһәттән дә ике төрлө, бала тәрбиәләгәндә ошоно онотабыҙ йыш ҡына. 5-8 йәшкә тиклем бөтөн халыҡтарҙа ла бала изге, тип иҫәпләнә, ул әсәһе янында йөрөй. Ә бына биш йәштән атай тәрбиәһенә күскән, ул уны үҙе менән эшкә йөрөткән, атҡа һыбай ултыртҡан. Унан, йәше ында был ҡағиҙә боҙолһа, ҡатын кеше эстән генә ғәфү үтенә, юлаусының эше уң булыуын теләй. Былдай ышаныуҙар күп халыҡтарҙа бар.

Ир-егеттәрҙең кейемдәренә ҡарата мөнәсәбәт тә үҙенсәлекле, баш кейемдәрен теләһә кемгә бирергә ярамаған, сепрәк итеп тотонорға, иҙән йыуырға ярамаған. Икмәкте лә атай телгән, сөнки икмәк телгәндә ҡатын-ҡыҙҙың көсө китә лә, уны кире ҡайтарып булмай икән.

Ҡыҙҙар өсөн дә ошондай йолалар булған. Өйләнгәс, кейәүгә сыҡҡас, яңы статустары тағы ла нығытылған. Килен һөйөү йолаһын ғына алайыҡ. Унда килен ниндәй булырға тейешлеген әйтеп, арҡаһынан һөйөп, яңы дәрәжәһе менән ҡотлап, бүләк бирелгән. Йәмғиәттә йоланың роле кәмеүе, әлбиттә, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенең үҙгәреүенә килтерҙе. Әгәр ҙә традицион йәмғиәтте алһаҡ, башта - йола, аҙаҡ совет осоронда октябряттар, пионер, комсомол атрибуттары, кейемдәре бар, уйнап та, йырлап та, бейеп тә күрһәтәләр, шуға ла уның йоғонтоһо көслө. Бер туҡтауһыҙ бер үк ғәмәлде башҡарһаң, ул автоматлашып, ғәҙәткә инә һәм холоҡҡа күсә. Йоланың тәрбиәләй торған механизмы тап ошо автоматизмда.

**Революцияға тиклем хөкүмәт ғаиләне ҡарамаған осорҙа беҙ үҙебеҙҙе милләт булараҡ һаҡлап алып ҡалғанбыҙ. Әле лә өҫтән тороп республикаларҙың, айырым милләттәрҙең хоҡуҡтарын ҡыҫырға, телде өйрәнеүҙе ҡыҫҡартырға була, әммә ғаиләнең эсенә ҡыҫылып булмай. Әгәр ҙә берәй ҡасан Рәсәйҙә йәшәгән аҙ һанлы милләттәр тик ғаилә кимәлендә генә һаҡланып ҡала торған көн килһә, был йөк хәҙерге ғаиләнең ҡулынан килерме? Бының өсөн ул ниндәй булырға тейеш?**

**М. МЫРҘАБУЛАТОВ:** Бәлки, килер ҙә ине. Тик мине бында бына нимә хәүефләндеренсе урында - рус, икенсе урында татар ҡыҙҙары. Миненсә, бында башҡорт ҡыҙҙарының үҙҙәрен артыҡ эре тотоуы ғәйепле, башҡа милләттәр бит сосораҡ. Әлбиттә, башҡорттар күпләп йәшәгән райондарҙа - Әбйәлил, Бөрйән, Баймаҡ, Хәйбуллала тыуым алда әйткән райондарға ҡарағанда юғарыраҡ. Был төбәктә үлем кимәле лә түбән. Иң юғары үлем кимәле Туймазы, Балтас, Яңауыл райондарында.

Әле йәмғиәткә матриархат осоро килде. Ни өсөн тиһегеҙме? Хәҙер бөтөн донъя йөгөн ҡатын-ҡыҙ алып бара. Ауылдарҙа, мәҫәлән, күберәк эште ҡатындар башҡара. Өй эше лә, мал да - ҡатын-ҡыҙ елкәһендә. Рәсәйҙә психологик һәм иҡтисади яҡтан да әсәй кеше лидерға әүерелгән ғаиләләр күбәйә. Социологтар иҫәпләүенсә, атай менән әсәйҙең ролдәре алышыныуы ғаиләлә башҡа үҙгәрештәргә килтерҙе лә инде.

# ДӘҮЛӘТ ТҮГЕЛ...

## ғаилә һаҡлай

булған. Әммә айырылышырға тырышмағандар, ҡатын балаһын ғаиләлә ҡарап үҫтерергә тейеш - шуға өҫтөнлөк биргән, икенсенән, оялған, сөнки айырылған ҡатындың йәмғиәттә статусы ла төшә. Айырылыша ҡалһалар, ислам ҡанундарына ярашлы, бала ирҙә ҡалған.

**М. МЫРҘАБУЛАТОВ:** Яусылыҡ институты көслө булған осорҙа улы өйләнергә теләгәнен ишетһә, атаһы шунда уҡ буласаҡ ҡоҙаларын өйрәнер өсөн яусы ебәргән. Әгәр ҙә ғаиләләрҙең мәҙәниәттәре тура килһә, өйләндергәндәр, килмәһә инде - юҡ. Бына шул ғаиләнең ныҡлығына килтергән. Хәҙер кәпәсе матур, машинаһы бар, тип өйләнешәләр ҙә, бер-береһенә холоҡ-ҡылыҡтары, донъяға ҡараштары тура килмәү һөҙөмтәһендә айырылышып та ҡуялар. Унан һуң, йәмғиәттә насар бер күренеш барлыҡҡа килде. Граждандлыҡ никахы, тиҙәр уны. Беренсенән, уның атамаһы дөрөҫ түгел. ЗАГС-ҡа барып яҙылышһаң, бына шул граждандлыҡ никахы була. Мулла саҡырып, никах уҡытаһың икән, был - дини никах. Әлеге йәштәрҙең ЗАГС-һыҙ ҙа, никахһыҙ ҙа бергә йәшәүе - ул, йәнәһе, ирекле никах. Ундай ғаиләлә бер ниндәй яуаплылыҡ юҡ. Оҡшамай икән, йәнәһе, сығалар ҙа китәләр. Шунан һуң йәмғиәттә ниндәй әхлаҡ булһын! Ғаилә ҡиммәттәре үҙгәрә лә, тик былдай ирекле никах формалары бәхет һәм тормоштан ҡәнәғәт булыу кеүек тойғоларҙы юҡҡа сығара. Ирек бар, ә бәхет юҡ.

үҙгәргән һайын малай кешенең статусы ла үҙгәрә килә, уны йолалар башҡарып, нығытып ҡуйғандар, йәғни, ул халыҡ алдында иҫбатланған. Бала тыуғандан алып егет ҡорона ингәнсе башҡарылған йолалар - сәңгелдәккә һалыу, исем ҡушыу, атлай алмай ултырғанда аяғын киҫеү, һ.б. уның статусын күтәргән. Мәҫәлән, теше сыҡҡас, кем беренсе тешен күреп ҡала, уны бүләкләгәндәр, сәй табыны ойоштороп ебәргәндәр, тешең сыҡҡас, иламайһың инде, ҙурайҙың, тип, уны һүҙ менән йөпләгәндәр. Шуға ла ул бәләкәйҙән ирлеге өсөн яуаплылыҡ тойоп үҫкән.

Шулай уҡ ғаиләлә, йәмғиәттә ир балаға булған мөнәсәбәт уларҙың мәртәбәһен күтәргән.



***Башҡортостанда ҡатнаш никахҡа инеү тенденцияһы көслө. Көнбайыш, мәҫәлән, Балтас, Илеш, Йәрмәкәй кеүек райондарҙа ире татар, ҡатыны башҡорт, йәиһә ире башҡорт, ә ҡатыны татар ғаиләләр һаны 70-80 процент тәшкил итә. Шунан тағы, никахта тороу кимәле, тигән төшөнсә бар. Ул түбәндәгесә иҫәпләнә: мәҫәлән, мең башҡорт ҡыҙы алына һәм уларҙың нисәүһе никахта тороуы билдәләнә. Әгәр ҙә рус, татар һәм башҡорт ҡыҙҙарын ошо нисбәт буйынса сағыштырып ҡараһаҡ, һуңғы урында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары тора.***

Мәҫәлән, башҡорттарҙа ҡатын-ҡыҙға ир-аттың юлын ҡыйырға ярамай (хатта өс йәшлек малайҙарҙың да), тигән тыйыу бар. Күгәрсен районынан Ф. Насырова: "70 йәштә булыуыма ҡарамаҫтан, йәш малайҙарҙың да юлын ҡыймайым, сөнки уларҙың дәрәжәһе оло", - тип һөйләгәйне. Был апай ошолай ир-егеттәргә ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен, ихтирамын белдерә, бәҫен төшөрмәй. Әҙәп ҡағиҙәләре буйынса, ҡатын-ҡыҙ ирҙәрҙе күргәс, туҡтап, алдан үткәреп ебәрергә тейеш. Әгәр ҙә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһбулды. Тәүҙә йола статусыбыҙҙы нығытһа, совет осоронда йәмәғәт ойошмалары беҙгә нисек йәшәргә өйрәтте, иҫләйһегеҙҙер, комсомол шулай булырға тейеш, тип, ҡағиҙәләр ятлай инек. Үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һуң, иреклектән башҡа, бер нәмә лә юҡ. Беҙ хәҙер ниндәйҙер ҡағиҙәләрҙән азат, шуға ла 40 йәштә лә олоғайып бөтмәгән "балалар" осрап ҡуя.

Йола бит кешегә төрлө яҡлап тәьҫир итә, ул тыйыуҙар менән генә бәйле түгел. Йола башҡарғанда һүҙ менән дә әйтелә, ниндәйҙер хәрәкәттәр атҡарыла, уның үҙенә хас рә. Башҡортостанда ҡатнаш никахҡа инеү тенденцияһы көслө. Көнбайыш, мәҫәлән, Балтас, Илеш, Йәрмәкәй кеүек райондарҙа ире татар, ҡатыны башҡорт, йәиһә ире башҡорт, ә ҡатыны татар ғаиләләр һаны 70-80 процент тәшкил итә. Шунан тағы, никахта тороу кимәле, тигән төшөнсә бар. Ул түбәндәгесә иҫәпләнә: мәҫәлән, мең башҡорт ҡыҙы алына һәм уларҙың нисәүһе никахта тороуы билдәләнә. Әгәр ҙә рус, татар һәм башҡорт ҡыҙҙарын ошо нисбәт буйынса сағыштырып ҡараһаҡ, һуңғы урында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары тора. Бе-

**Р. БАЯЗИТОВА:** Дөрөҫөн әйткәндә, әле лә баланың туған телен белеүе, әҙәп-әхлаҡ тәрбиәһе ғаиләнән килә. Шуға ла бөгөн дә милләтте башлыса ғаилә һаҡлап килә, тип әйтә алабыҙ. Бары тик артабан да ғаилә статусын нығытыу мөһим. Был эшкә ғаиләне лә, йәмғиәтте лә ҡушырға кәрәк. Һуңғы ваҡытта ауылдарҙа, ҡалаларҙа ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар ойошмалары тергеҙелә, тимәк, ололарға ҡарата ихтирам ҡайта. Элек барыһы ла оло кешенең һүҙенән ҡурҡып торған, уларҙан тартыныу булған. Хәҙер беҙгә ирҙәрҙең статусын күтәреү, ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләләге урынын билдәләү йәһәтенән эштәр башҡарырға кәрәк.

**Шулай итеп...**

**Йәмғиәттә ғаилә сәйәсәтенең булмауы - ул дәүләттең ғаилә институтына булған мөнәсәбәтенең күрһәткесе. Әммә бөгөн был сәйәсәт ысынлап та ҡағыҙҙа ғына һәм дәүләт үҙе ғаиләнең йәмғиәт һәм кешелек өсөн иң ҡиммәт төшөнсә икәнен танымай һәм уға ярҙам ҡулы һуҙырға теләмәй ҙә. Шулай ҙа әсәйөләсәйҙәребеҙ бер ҡасан да, дәүләт ярҙам итмәй, тип, бала үҫтермәй ултырмаған. Шөкөр, һуңғы йылдарҙа милләттәштәребеҙ бер ни тиклем ҡатнаш никахҡа инеүҙән тыйыла төштө, хәҙер инде йәш быуындың аңына, һин үҙ милләтеңә бала үҫтерергә тейешһең, тигән уйҙы һеңдереү һәм ғаиләләргә халҡыбыҙҙың йолаларын ҡайтарыу зарурҙыр. Нимә генә тимә, шәхесте ғаилә генә тәрбиәләй ала, ә башҡа социаль институттар баланың үҫешенә шарттар ғына тыуҙыра.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

✓ *Заманында хәләлем күптәргә буй етмәслек хыял ине. Бына бит, ел-дауылдарға ҡаршы тора алмай бирешкән ҡая кеүек, аҙ ғына ваҡыт арауығында гөрһөлдәмәй ҙә, селпәрәмә килеп, күҙ алдында йәйлап ыуалды ла ҡуйҙы.*









**Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА**

# КАРТЫМДЫ ЮҒАЛТҠАС

*(Хикәйә)*

Хоҙайға рәхмәт, картым менән йәшәгән ни-геҙем котло булды: балаларым ауырымады, мал-тыуарыбыҙ ишле, хатта ҡаҙҙарыбыҙ ҙа теүәл бәсты бәпкәләрен. Баҡсабыҙ ишелеп уңды, тиһәм, һис тә арттырыу булмаҫ. Әллә үҙебеҙ йәшәүҙән йәм-тәм табып, ихлас йәшәнек, әллә бәхетле нигеҙебеҙҙе Аллаһ Тәғәлә үҙ итеп, үҙе насип әйләне беҙгә. Хикмәт бында ғына түгелдер, ә ғүмер буйы бер-беребеҙҙе ихтирам итеп йәшәүебеҙҙәлер, тип уйлайым. Вафатынан бер нисә көн элек, мәрхүмкәйем: "Әсәһе, яҡыныраҡ кил әле эргәмә, әйтер һүҙем бар", - тип саҡырып алды.

- Ҡыуманым түгел, ҡыуҙым мин был донъяның артынан. Фанилыҡтың да үпкәһе юҡтыр тормошома ҡарата. Әжәлдән ҡурҡмайым. Иң ҙур байлығым - һеҙ. Балаларыбыҙ һәйбәт. Улар алдында йөҙөбөҙ яҡты. Бер кемгә лә ҡыҙыллыҡ та, ауырлыҡ та килтермәнек яҡшылыҡтан башҡа. Рәхмәт һүҙәрем шул булыр, - тигән һымаҡ яҫтығын һыйпай-һыйпай, ауыр һулап ҡуйҙы ла, тынып ҡалды. Мин өйҙәге һиллекте боҙоп:

- Үҙең донъяны аҡыллы итеп көтә белгәс... Ҡаҡманың, һуҡманың, эсмәнең, балаларҙы үҙеңә ылыҡтыра белдең. Ни һөйләһәң дә, ни эшләһәң дә килеште үҙеңә.

- Мин тормоштоң дилбегәһен ҡайырып тотҡанда, һин ипле һәм итәғәтле хужабикә була белдең. Ошо бәләкәй генә ҡулдарың менән иң изге хистәреңде ҡушып бешергән аштарыңды кемдәр генә ауыҙ итмәне. Бөхтә, өҫтөнә туҙан ҡундырмай оҫта итеп ойоштorған зауыҡлы йәшәйешебеҙҙе, көткән донъябыҙҙы күреп хайран булғандар әҙ булманы бит. Шуға ла, тупһабыҙ рәхмәтле, - тип тарамыш ҡулдарымды һөйөргә иткәйне, әммә ҡулдары тыңламаны зиһенгәнәһен. Әжәл яҡынайыуын һиҙепмелер, сыҡмаған йәнендә энә осондай ғына ҡалған көсөн йыйып, һуңғы һүҙен әйтте: "Төпсөк улыбыҙ нигеҙебеҙҙе етемһерәтмәһен, ташламаһын, һәр саҡ тәҙәк тотһон, бәхет юрамай ул ҡаралмаған нигеҙ..."

Сараһыҙлыҡтан, инрәмәй саҡ-саҡ түҙеп торам, ярай әле, күҙҙә йәш кипкән. Быуындарым ҡалтырай, йөрәгем туҡтар төҫлө. Диҡҡәт менән тыңлайым, тыңлаған һайын ғәжәпләнәм. Бәхилләшкәндәге һәр һүҙе зиһенемә яҡты нур булып урала. Һөйөшөп, яратышып ҡауышҡайныҡ. Ныҡыраҡ мин яраттым, ахрыһы. Икебеҙҙең уртаҡ бер йәнебеҙ бына-бына беҙҙе әллә ҡайҙарға, йыһан киңлегенә алып осор һәм беҙ ҡушарлашып ер йөҙөнән юғалырбыҙ һымаҡ. Заманында хәләлем күптәргә буй етмәслек хыял ине. Бына бит, ел-дауылдарға ҡаршы тора алмай бирешкән ҡая кеүек, аҙ ғына ваҡыт арауығында гөрһөлдәмәй ҙә, селпәрәмә килеп, тауыш-тынһыҙ күҙ алдында йәйлап ыуалды ла ҡуйҙы. Ҡасандыр айбарланып, ғәйрәтләнеп тәҙөгән яландай донъяһында, сәселгән юнысҡылай, күҙгә күренер-күренмәҫ булып ята. Ябынған юрғаныны аҫты буп-буш. Ғүмеркәйҙәр нисек матур уҙмаһын, әжәл үткер ҡылысын ялтанлата башлаһа, үкендерә икән...

Шул һуңғы һүҙҙәренән һуң бер кемдә лә эргәһенә саҡырманы, һис берәүгә өндәшергә теләмәне лә. Иге-сиге булмаған уйҙарын үҙе менән бергә алып китте мәңгеллеккә. Уны ерләгән мәлдә, түшәк тартып ятып ҡуймайым, тип ҡурҡтым. Көңгерләй-төнтерәкләй кеше ыңғайына йөрөнөм, иҫәпкә барһанға юҡ хәлендә. Һуңғы юлға оҙатыу сараларын уҙғарыу - үҙе бер афәт. Хатта аҙаҡ, картымдың баҡыйлыҡҡа күсеүен белмәйерәк ҡалған туған-тыумаса, тиң-тош, таныш-белештәрҙең хәлемде белешергә теләп килеүе ауыр һынау булды. Бабайым тураһындағы һөйләшеүҙәр былай ҙа ауыр хәсрәтемде арттыра төштө.

Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән ҡалмайһың инде. Көндәр бер-бер артлы үтеп, килеп-китеп торған кеше таралып, яңғыҙ ҡалғас, бөтөнләй кәрһеҙ ҡалдым, мөҙәрәнем. Шулай бер көн бабай барҙағы кеүек аш-һыу әҙерләмәксе булдым балаларҙың эштән ҡайтыуына. Аҡылымды көүҙәм тыңламай: һауыт-һаба ҡулымдан оса, онтала. Тегенеһен тапмайым, быныһын онотам, яндырам, көйҙөрәм. Тышҡа сыҡһам, тигеҙ ерҙә абынып йығылам. Ғәжәп хәл: мин - мин түгел, ә шәүләм. Ҡулға эш бармағас, бабай бүлмәһенә инеп яттым. Серем иткәнмен әҙмелер-күпмелер. Балалар ҙа ҡайтҡан эштән. Ғүмер буйы йүгерә-атлай йөрөп эшләгән эштәремде нисәнсе көн инде башҡара алмай аҙапланам. Әйтерһең дә, минә ҡушылған көндәлек планды үтәмәйем, ғәйеплемен. Йәнә бөгөн шәмбе - мунса яға торған көн. Әй, әттәгенәһе, былай аяҡ-ҡулымды күтәрә алмай ятһам, тағы ниндәй хәлдәргә төшөрмөн, билдәһеҙ...

Килен менән төүге көндәрҙән үк яраşып, татыу йәшәнек. Әсәлеҡыҙлы кеүек. Алсаҡ, эсендәге - тышында. Ваҡ мәсьәләмә, оло ваҡиғамы, осраҡлы хәлме - бер фекерҙәбеҙ. Тик һуңғы ваҡыттарҙа, бабайҙың вафатынан һуң, ҡартайған да тыртайған тигәндәй, үҙем эшкә ярамаҫ булып киткәс, өйҙәгеләрҙең тын алышы икенсерәк, айырыуса киленем рыяраҡ. Ошоғаса ауырлығымды һалғаным юҡ балаларға. Һауығып китеүемә өмөтөм ҙур.

Бер көн төнөн тәкәтһеҙ ауырып киттем, бөхетемә күрә, киленем уяны, тиҙ генә "Тиҙ ярҙам" машинаһын саҡыртты. Укол һалып, дарыу эсереп киттеләр. Бер нәмә белмәй йоҡлағанмын. Уянып китһәм, башым тыныс, элекке һау хәлемә ҡайтҡан һымаҡмын. Торҙом. Тамаҡ кипкән. Сәй әҙерләп эсәм, йәнәһе.

Йоҡо бүлмәһенән таңғы асыҡ тауыш ҡолаҡҡа салынды:

- Ҡәйнәмдең балаһы бер һин генә түгел, башҡалар ҙа ҡараһын...

- Ни һөйләйһең. Ошоға тиклем кем тотоп торҙо донъяны?

- Йылдан йыл йәшәрмәй инде. Ярай әле, ҡайнымды ҡарарға эшкинде.

Килен менән улымдың һөйләшеүе өҙөлдө. Карауатынан да тормаған ейәнем тауыш бирҙе.

- Өләсәй, төүге пар лекцияға һуңлайым. Ашарға өҫтәлгә теҙә тор...

Эй, бәпесем, һуңғы арала сырхаулап торам шул. Үҙем яман өйрәттем барыһын да. Кисен иртәнге ашты әҙерләп ята торғайным. Бына хәҙер үҙем йөрөйөм төртәнләп. Килен эштә эсә иртәнге сәйен. Ҡалғандары ҡапҡылайыларҙамы берәй нәмә, юҡмы - сығып та йүгерҙеләр. Ниһайәт, саф һауаға сыҡтым. Ҡала ситендә шәхси хужалығың менән йәшәгәс, һәр нәмәгә үҙ ҡулың тейелмәгәнлеге күренеп тора. Ҡайҙа тотонһаң - шунда эш. Аҙбар-ҡура ишектәре шар асыҡ. Һөт-ҡатығы ла нисек бар шулай ултыра.

"Бөртөкләп йыйылған донъяң йәндәй йәл. Кеменә булһа ла шулайҙыр ул", тип үҙемә үҙем һөйләйем. Тынлаусы булһасы. Ҡапҡа келәһе келтерәне.

- Хаят инәйем һуңғы ваҡытта күренгеләмәй ҙә...

- Ни хәл, иҫәнлекме, шәплекме?

- Хоҙай ҡушҡанса, Әлхәм. Әйҙә, түрҙән үт, Сафура .

- Әстәғәфирулла, солан күтәрмәләре үҙендекенә оҡшамағансы, ҡаҡашып бөткән. Ҡаҙ өмәһе үткәрҙегеҙме әллә?

- Юҡсы. Ана бит ҡаңғылдашып тора ҡошҡайҙарым. Күрше хаҡы - тәңре хаҡы. Бына ошо емде һирп тә, алдарына һыу ҡуй.

- Киленеңә ни булған?

- Унан алда улым, ейәнем бар бит әле.

- Киленеңә һүҙ тейҙермәйһең инде...

-Ир-ат күрмәй ул бар нәмәне. Өс бөртөк өйлә, бөтөп барған ауылдан килдем, тимәй ул хәҙер.

-Алдында өлтөрәп торған ире бар. Балалары ҡараулы. Сығып китһә лә, килеп инһә лә - донъяһы саф-ялт. Нишләп ул һәйбәт килен булмаһын, һәр хәлдә, мин түгел инде...

- Нинә улай тиһең. Һинең дә донъяң гөл кеүек.

- Азат менән ҡауышырға йөрөгәндә һеҙ бит ҡамасау булдығыҙ. Йәнәһе, ауылдан килгән ҡыҙ егәрлерәк, яҡшыраҡ, матурыраҡ, һыйыр һауа, имеш. Яманмы-яҡшымы, яҙғаны менән көн итәм.

- Сафура, егерменсе быуатта булған хәлде онотorға күптән ваҡыт.

- Мин түгел, әсәйем онотмай әле төүге һөйөүен. Егете менән икеһе ҡалала тимер юлын һуҙыуҙа ҡатнашҡан. Төүге поезд килеү менән өйләнешергә вәғәҙәләшкәндәр. Йәнәһе, ике байрам бер юлы. Тарихи поезд ГПТУ-ға вагон-вагон ҡыҙҙар тейәп килгән. Араларында кемдәр генә булмаған, әлбиттә, негрҙан башҡаһы: сыуашмы, марыймы, сирмешме - тағы әллә кемдәр. Әсәйемдең мөхәббәт ҡошо осҡан шулар яғына. Юҡҡа һөйләмәнем күптәнге ваҡиғаны. Әсәйемдең яҙмышын ҡабатланым мин. Бында һеҙҙең ғәйеп юҡ. Тик былай ғына, һүҙ ыңғайында.

- Ни булһа ла булды инде, былтыр ҡыҫҡанға быйыл илашмайыҡ. Атта ла, тәртәлә лә булғандыр.

- Инәй, мунсамды томалап килдем. Әсәйем килгән, ваннаны өнәмәй бит ул. Ҡайын миндеге менән икегеҙҙе сабындырырмын. Бал, май менән һылармын. Ҡыҙҙар һымаҡ осорта баҫып ҡайтып инерһең өйөңә.

- Рәхмәт, мине ҡайғыртҡаның өсөн.

- Һауыҡҡас әйтерһең рәхмәтеңде. Өс өй аша ергә ни. Мине әҙләп улым килеп еткән, үҙе рүлдә. Йәтеш булды. Әйҙә-әйҙә, өсөбөҙ бер кешеләй булмаһаҡ, оят.

Ай-вайыма ҡуймай алып ҡайтып китте мине Сафура үҙҙәренә. Кеше таяныр, ышыҡланыр кешеһе булғанда көслө. Мунса төшөп, үлән сәйҙәре менән һыйланыу быуындарыма һығылмалыҡ, күҙемә яҡтылыҡ, башыма асыҡлыҡ индергәндәй итте. Мине өйөмә тиклем оҙата килгән Сафура: "Элекке матур хәлеңә ҡайттың, Хаят инәй. Күҙ теймәһен", - тине.

- Ғүмер буйы йүгерә-атлай йәшәнем. Бабайҙан ҡалғас, аяҡтарға әллә ни булды. Ҡул көсө лә самалы. Аяғыма баҫтырҙың, ҡулыңдан һөйөн, рәхмәт.

- Һеҙҙең ҡапҡа төбөнә әсәйемдең йәшлектәге "Сирмеш"енең Джип машинаһы туҡталған...

Беҙ өйгә килеп ингәс, ҡара һөрөм баҫты киленемдең йөҙөн. Ул:

- Больницаға-маҙар һалып ҡуйҙылармы тип хәүефләнһәк, ҡәйнәмдең үҙ врачы бар икән дә баһа... - Үҙе артынса уҡ хәйләкәр йылмайып, йомшара төштө. Эсендәге ҡыуанысын йәшерә алмай киленем:

- Малды һатып алыусы табылды. Алыусыһы барында һатып ҡалайыҡ. Бөтә урамға яр һалдырып бақыртты-рып торҙорғансы.

- Кем һата? Мал һатыу тураһында уйлаған юҡ...

- Икебеҙ ҙә һыйыр һауа алмайбыҙ. Эш итергә кәрәк бит малдың ағын...

Мин һүҙһеҙ ҡалдым, улай ғына ла түгел, хатта ебеп төштөм. Көс-хәлемде йыйып һорай ҡуйҙым:

- Азат нәмә тиер...

- Ул ҡаршы тороп ҡайҙа барһын? Ейәнеңдең уҡыуына ла түләрлек аҡса кәрәк. Аҡса түләмәйенсә, имтиханға индермәй ыҙалаталар ҙаһа.

Шул саҡ һүҙһеҙ ултырған "Сирмеш":

- Йә, һатаһығыҙмы, юҡмы? Сауҙалашайыҡ та аҡсаны ташлайым өҫтәлгә.

- Бабайым бесәнен дә тейешенсә әҙерләп киткән. Ҡайһылай булһа ла һауырмын үҙем. Сафураға әйләнеп: "Зинһар, ярҙам ит. Мал ҡараған мәлдә килерһең: иртәле-кисле. Азатым Себер һынлы ерҙән ҡасан ҡайта әле ул. Уртаҡ булыр ағы",- тип ярҙам һоранам.

Ялтан-йолтан ҡараған киленемдең күҙҙәре ҡырыҫ, һалҡын ине. Элегерәк күҙем бәйле булғандыр, ахырыһы. Шулай булмаһа, маҡтаулы киленемде бөгөн танымай торор инемме? Шул саҡ ейәнем уҡыуҙан ҡайтып инде. Хәлемде һораны.

- Юҡ әле, улым, хәлем мөшкөләрәк. Һин дә имтихандарыңды бирә алмай йөрөйһөң икән...

- Нисек, аңламайым?- тип аптыраны ейәнем.

- Атайың уҡыуыңа аҡса түләмәгән түгелме?

- Беҙҙең тоҡомдағы ирҙәр типһә - тимер, баҫһа - баҡыр иретерлек. Ундайҙар үтескә, кредитҡа йәшәмәй, ти атайым. Ул алдан уҡ өс йылдыҡын бергә түләп ҡуйған. Минең атай донъя йөҙөндә берәү. Өләсәй, нинә улай тиһең?

-Нинәләр уйҙарым буталды...

Киленем өнһөҙ ҡалды, әммә уйлаһып торғандан һуң, өҫтәп ҡуйҙы:

- Түләһә, яңы түләгәндер...

Азатым эшсән булып үҫте. Атаһын да, мине лә берҙәй үк тыңланы. Һүҙебеҙҙе йыҡҡанын һис хәтерләмәйем. Ошоғаса киленемә тел-теш тейгәне юҡ. Бабайым: "Бер тапҡыр Азатты күндерҙең, тыңлаттың, шул еткән. Артабан ҡыҫылма, йәшәһендәр үҙҙәренсә. Тормош үҙе өйрәтер, донъя аҡылы кинерәк һәм тәрәнерәк", - тиер ине яйы сыҡҡан һайын. Етмеш ете йыл оҙонлоғондағы ғүмер ептәрен тағатып уйланһам, йәшәгәнмен икән ҡартым өсөн аҫыл биҙәк миҫалында. Хатта кисә генә, түребеҙ йән рәхәте - тәхет, нигеҙебеҙ бәхет ине...

**(Дауамы бар).**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# "БАШҠОРТ ТЕЛЕН...

## олатайым әҫәрҙәрен уҡырлыҡ кимәлдә белергә ине, тип хыялланам"

**...Ике бала беренсе тапҡыр үҙҙәре генә олатаһының урмандағы умарталығына юл тота. Тылсымлы урман һуҡмағы уларҙың һәр теләген үтәй - муйыллыҡҡа ла алып сыға, шишмә һыуын да эсертә, көнбағышынан да ауыҙ иттертә... Ике йыл элек Ейәнсура районының Ибрай ауылында төшөрөлгән әлеге ваҡиғалар һүрәтләнгән "Урман һуҡмағы" тип аталған ҡыҫҡа метражлы фильм оло еңеүгә өлгәште: Владикавказда үткән "Дирижабль" кинофестивалендә икенсе урынға лайыҡ булды. Еңеү менән ҡотлап, фильм режиссеры Роман Пожидаевҡа бер-нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



**- Ғәҙәттә, йәш режиссерҙар балалар өсөн фильмдар төшөрөүгә әүәҫ түгел, уларҙы замансараҡ, "текәрәк" темалар ҡыҙыҡһындыра...**

- Был фильм олатайым - билдәле башҡорт шағиры Хәниф Кәримдең хикәйәһе буйынса төшөрөлдө. Уны үҙ күсөм менән ижад иттем. Төп ролдәрҙә - Айсулпан Фәйзуллина һәм Мортаза Бураҡаев. Уңайы менән файҙаланып, Ибрай ауылында йәшәүсе Миңзифа һәм Ғөбәйтулла Иҫәнсуриндарға оло рәхмәтемде белдерәм. Былтыр Ибрай ауылында тағы бер фильм төшөрөү бәхете тейҙе. "Ер кешеһе" тип аталған документаль фильмдың төп геройы - ғүмер буйы ауылда көтөүсе булып эшләгән, һигеҙ балаһын да нигеҙле иткән Хөсәйен Ҡолмөхәмәтов. Был фильм тамашасы хөкөмөнә көҙ сығарыласаҡ.

**- Һинә олатайың менән аралашыу бәхете теймәне - Хәниф Кәрим фронтта алған яралары арҡаһында яҡты донъянан бик иртә киткән. Уның ижады һәм тормошо менән ҡыҙыҡһыныу ҡасандан башланды?**

- Офицер, Ҡыҙыл Йондоҙ һәм башҡа бик күп орден һәм миҙалдар менән наградланған, политрук, хәрби корреспондент булған, ғәҙеллек һәм намыҫ ҡанундары менән генә йәшәгән, ҡатыны Мәрзиә менән дүрт балаһын да шәхес итеп тәрбиәләгән олатайым - беҙҙең ҙур ғаилә өсөн оло үрнәк. Ижад менән ныҡлап шөғөлләнә башлағас та мин уның ижады менән ҡыҙыҡһына башланым. "Башҡортостан" киностудияһында төшөрөлгән иң тәүге "Тауҙарға артылғанда" тип аталған документаль фильмым уға бағышланған. Әлеге көндә мин "Бүреләр" рок-төркөмөнөң гитарисы, көйҙәр ҙә ижад итәм. Шуға ла киләсәктә Хәниф Кәрим шиғырҙарына заманса йырҙар ҙа ижад итмәксемен.

**- Март айында һин башҡорт тамашасыларын "Карусель" исемле ҡыҫҡа метражлы фильм менән ҡыуандырҙың. Башҡорт телен белмәйенсә, башҡортса фильмдар сығарыу ҡыйын түгелме?**

- Телде белмәйем, тип әйтеп булмай. Мин уны аңлайым, тик үҙем һөйләшергә тартынам. Әлбиттә, әҙәби әҫәрҙәр, олатайымдың шиғырҙарын уҡырлыҡ кимәлдә телде белһәң ине, тип хыялланам. Тик кескәй саҡтан рус теле даирәһендә, ҡала мөхитендә үҫкәс, әлегә был хыял ғына. Әммә тормошҡа ашырлыҡ хыял. Ә инде башҡорт теленә килгәндә... Музыкант булғас, мин олатайымдың туған телен моңло бер көй кеүек ҡабул итәм. Миңә уның яңғырашы, йомшаҡлығы оҡшай. "Карусель" фильмына килгәндә - унда башҡорт теле лә, рус теле лә, инглиз теле лә яңғырай.

**- "Карусель" фильмы хаҡында тағы бер-нисә һүҙ әйтеп китһәң...**

- Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләп алдым. Бик күп башҡорт спектаклдәрен ҡараным, ҡайһы бер спектаклдәрҙе сығарыуҙа видеопроекция режиссеры булараҡ та ҡатнаштым. Һәләтле, нескә күңелле башҡорт актерҙарын мөмкин тиклем күберәк киноға төшөргөм килә минең. "Карусель" фильмында Рәүис Заһитов, Фирғәт Ғарипов, Илгизә Ғилманова, Шәһит Хамматов, Лилиә Ғәлина, Ринат Баймырҙин, Вәкилә Ҡалмантаеваларҙы төшөрҙөм. Американан килеп, Өфөлә йәшәүсе Крейг Пигей, кескәй актер Самуил Саваж да ҡатнашты, шулай уҡ биш йәшлек Камилә Мөлөкова бик матур уйнаны. Фильмды БСТ каналы күрһәтте, киләсәктә "Ҡурай" һәм "Туған тел" каналдары ла күрһәтер, тип уйлайым.

**- Хәҙер ниндәй пландар менән янаһың?**

- Ошо көндәрҙә тағы бер ҡыҫҡа метражлы фильм төшөрә башлайбыҙ. Ҡалғаны сер булып ҡалһын...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Яугир һәм шағир олатаһының рухында йәшәүсе Роман Пожидаевҡа, әлбиттә, уңыштар ғына теләргә ҡала. Һәләттәрен асырға, кино белгесе булараҡ камиллашырға мөмкинлек биргән "Башҡортостан" киностудияһына ла яңы ижади үрҙәр теләйек.**

**Зилә ЯННАРИНА**
**әңгәмәләште.**



Фильмдан күренеш.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МАШИНА ТӘҘРӘҺЕНӘН ГЕНӘ...

## фарман бирәләр хәҙер

**Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ, БР Дан музейы ғилми хеҙмәткәре, "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы етәксеһе:**

- Заманыбыҙ еңел түгел, ауыр, ти ҙә хәбәр һөйләйбеҙ. Бер уйлаһаң, улайтып әйтерлек түгел дә һымаҡ: дөйөм алғанда, илебеҙ тип атарлыҡ республикабыҙ бар, ил-йортобоҙҙа - именлек, һуғыш-маҙар юҡ, Аллаға шөкөр. Тағы ла, әллә ни баш китерлек аһ-зарҙарыбыҙ ҙа юҡ һымаҡ. Ошоларҙы уйлаһаң, әлбиттә, тыныс күңел менән йәшәп ятырға кәрәк тә бит. Шулай ҙа, күңел тигәненде тынысландырыуы, ай-һай, еңелдән түгел шул, туғандар. Уныһын һәр кем үҙенән сығып әйтә алалыр, моғайын. Күңелде бер аҙ өйкәңкерәп торған мәсьәләләр тураһында һөйләмәксе итәм. Алыҫҡа китергә түгел - үҙебеҙҙең ауылдарыбыҙҙа ла бар ул уртаға һалып һөйләшер проблемалар. Әле бына ялға атайымдарға ауылға ҡайтҡанымда, тирә-яҡта ниҙәр барғаны тураһында туғандар, дуҫтарҙан һораштырып алынды. Әйтергә кәрәк, халыҡ элеккесә эшһөйәр, хатта ҡайһы саҡта саманан да арттырып ебәрәләр тырышлыҡ буйынса. Ул яғынан һөйөнөрлөк. Миҙалдың икенсе яғы шунан ғибәрәт: хәҙер һәр ғаилә үҙ хужалығында үҙе тир түгә, үҙ йүнен үҙе күрергә тырыша. Бының өсөн уңайлыҡтары ла бар: өй һайын тиерлек машина-трактор, башҡа ауыл хужалығы ҡоролмаһы, тигәндәй. Һәр кем үҙ донъяһын үҙе тарта, үҙ йөгөн дә үҙе һөйрәй. Тик был айырымланыуҙың, үҙаллы хужалыҡ итеүҙең ыңғай яҡтары ла булған һымаҡ, ҡайһы бер кире яҡтары ла бар икәнлеге, хатта беҙгә, аграр өлкәлә эшләмәгән кешегә лә, айырым-асыҡ күренә. Мәҫәлән, фермерҙар айырым-айырым эшләгәнгә күрә, юлда осраған бюрократик кәртәләрҙе, тәбиғәт ҡуйған һынауҙарҙы һәм башҡа ҡаршылыҡтарҙы үтә алмай, бер урында тапана. Шуға ла элекке күмәк хужалыҡтарҙы киренән ҡайтарып булмаҫ инеме икән, тип тә уйланыла. Тап элеккесә аталмаған хәлдә лә, холдинг йәки ассоциация төҙөп, бер-нисә фермер бергә эшләһә, яҡшыраҡ булыр ине, минеңсә. Ул сағында ергә лә һаҡсыллыҡ артыр ине. "Минең ерем" тип түгел, ә "халыҡтың ере" тип ҡабул ителер ине еребеҙ ҙә. Ә бит күмәкләп, берләшеп эшләү совет власы йылдарында ғына уйлап табылған алым түгел ул, беҙҙең ата-бабалар борон-борондан бергәләшеп атҡарған ер эштәрен.

Тағы мине ауылдарҙа көтөүлектәр булмау мәсьәләһе лә борсой. Ундай ауылдар беҙҙең районда ла етерлек. Ғафури районының Красноусол ҡасабаһы хакимиәте башлығы Аҫылғужин иптәштән һорағайным был турала, "Ауылдарҙа көтөү көтөргә риза булған кеше юҡ", тип яуап бирҙе ул. Ә беҙ, ауылдарҙа эшһеҙлек, тип лаф орабыҙ. Көтөүсе булмағас, ауыл халҡы малын ҡайҙа ашатырға белмәй, ни үҙҙәре алмашлап көтөү ойоштормай. Ошондай хәлдә нимә эшләһен кеше, әлбиттә, малын ауыл ситенә ҡыуа. Ә ауыл хакимиәте башлығы, туҙырап йөрөгән мал килгән-киткән ҡунаҡтарға күренмәһен, тип, малдарҙы бикләтеп ҡуя ла, хужаларына штраф сәпәй. Бөтә был хәлдәргә ҡарата халыҡтың ризаһыҙлығын бер һылтау менән аҡлайҙар ҙа ҡуялар: көтөүсе юҡ. Ирекһеҙҙән, халҡыбыҙҙың бик тапҡыр итеп әйткән "Бейей белмәгән бейеүсенең итәге оҙон була" тигән әйтеме хәтергә төшә. Йәғни, кәрәк һылтау тиҙ табыла. Хәҙерге бәғзе бер етәкселәр халыҡ менән һөйләшеү, уларға өндәмә менән мөрәжәғәт итеү, дөйөм проблеманы өйрәнеп, уларҙы хәл итеү юлдарын эҙләү урынына затлы автомобиль тәҙрәһе аша ғына фарман бирергә өйрәнеп алған. Бындай идара итеү ғәҙәтигә әйләнгән. Ә бит кешеләр менән һөйләшмәйенсә, уларҙың кәңәшен ишетмәйенсә тороп, теләһә ҡайһы өлкәлә лә дөрөҫ ҡарар табыуы ауыр. Шуға бөгөн мин етәкселәргә өндәшкем килә: төрлө юлдарын табып, халҡыбыҙҙың тормошон яҡшыртырға тырышайыҡ әле.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺУЛ ҠУЛЛЫЛАР...
## хислерәк

■ Ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә хислерәк, тип белдерә Вашингтон университеты менән Джорж Мейсон университеты белгестәре. Һәр хәлдә, улар йыышраҡ беренсе ҡараштан ғашиҡ була, тип раҫлай улар. Төрлө илдәрҙә йәшәгән 70 мең кешенән һорау алғандан һуң, тап ир-егеттәрҙең көтөлмәгән ярһыулыҡҡа һәләтле икәне асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ир-аттарҙың 48 проценты тәү ҡараштан ғашиҡ булған, ҡатын-ҡыҙҙар араһында бындайҙар иҫәбе 28 процент ҡына. Дөрөҫ, ир-егеттәр яратҡан кешеһенә йышыраҡ хыянат итә, "ситкә йөрөүселәр" һаны улар араһында 33 процент, ҡатын-ҡыҙҙарҙа - 19.

■ Варвик медицина мәктәбе (Бөйөк Британия) үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йәшелсә-емештәр үҙенде бәхетле тойоу өсөн дә кәрәк. 80 мең британлының рационын анализлап, ғалимдар шундай фекергә килгән: йәшелсә һәм емеш-еләк яратыусылар тормоштан да ҡәнәғәт була, үҙен бәхетлерәк тә тоя, шуға уларҙың психик сәләмәтлеге лә яҡшыраҡ. Кеше ни тиклем күберәк йәшелсә-емеш ҡуллана, ул үҙен шул тиклем яҡшыраҡ тойған. Әммә был факттың йәшелсә һәм емештәрҙе күберәк ашау тормоштоң сифатын яҡшырта, тип аңларға кәрәкмәй, тип иҫкәртә ғалимдар. Бары тик бәхетлерәк кешеләр былай ҙа файҙалы ризыҡтарҙы йышыраҡ ҡуллана.

■ Уң ҡулы менән генә түгел, һул ҡулы менән дә яҙа белгән кешеләргә тәьҫир итеүе еңелерәк, тип белдерә психологтар. Нью-Джерсила урынлашҡан Монклер дәүләт университеты ғалимы Рут Проппер шундай тикшеренеү үткәргән. Беренсе төркөмгә ике ҡулы менән дә, икенсеһенә уң ҡул менән генә яҙа алыусылар йыйылған. Һынауҙар барышында уларҙың барыһы ла йә күңелле, йә ҡыҙғаныс, йә хәүефле берәй ваҡиға тураһында уйлаған. Был ваҡытта лабораторияла классик музыка уйнатҡандар. Кем ике ҡулы менән яҙа белә, шулар ғалимдар ҡушҡан тойғоларға тиҙерәк бирелгән. Белгестәр аңлатыуынса, бындай кешеләрҙең уң һәм һул мейе ярымшарҙарын бәйләп тороусы нервы туҡымалары нығыраҡ үсешә. Был уларҙың эмоциональ әүҙемлеге һәм ситтәрҙән тәьҫиренә тиҙерәк бирелеүен аңлата.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештән күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■ Стокгольм университеты ғалимдары мармелад, емеш желелары, төрлө ҡайнатмалар сәләмәтлек өсөн файҙалы, тип белдерә. Уларҙың составындағы пектин организмдан зарарлы матдәләрҙе, ауыр тоҙҙарчч ҙы, свинец һәм башҡа матдәләрҙе сығарыу һәләтенә эйә. Еләк-емеш желеһы һәм мармелад организмдың бөтөн проблемаларын хәл итә алмаһа ала, күп белгестәр иҫәпләүенсә, был татлы ризыҡтарҙы көн һайын ашау күңелһеҙ ӡлөгөүҙәр хәүефен күпкә түбәнәйтә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# СӘТЛӘҮЕК ТӘМЛЕ ЛӘ...
## әммә файҙалымы?



**Сәтләүектәр майлы кислоталарға, шул иҫәптән, омега-3 һәм -6, А, Е, В төркөмө витаминдарына, кальций, калий, магний, цинк кеүек минералдарға бай. Улар шулай файҙалы ризыҡ булһа ла, аллергия тыуҙырыу сифатына эйәләр. Сәтләүектәрҙә май күп, шуға ла ябығырға теләүселәргә уны ашарға кәңәш итмәйҙәр. Быдай төрлө үҙенсәлектәргә эйә аҙыҡ-түлек менән нисек дөрөҫ ҡулланырға һуң?**

### Оҙон ғүмер сығанағы

**Сәтләүектәр йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн бик файҙалы.** Көнөнә берәй төрлө 10 сәтләүек ашап, йөрәкте нығытырға була, сөнки был осраҡта "насар" холестерин кимәле түбәнәйә.

**Альцгеймер ауырыуынан һаҡлай.** Сәтләүектәрҙәге Е витамины көслө антиоксидант, ул баш мейеһенә зарар килтереүсе ирекле радикалдарҙы нейтраллаштерә.

**Олеин кислотаһы аппетитты кәметә.** Был кислота артыҡ ашауҙы булдырмаусы химик реакцияларҙы "тоҡандыра". Һеҙөмтәлә, баш мейеһенә, мин туҡ, тигән сигнал бирелә. Шуға ла сәтләүектәр ябығыусыларға ла файҙалы.

**2-се тип диабет үсеше хәүефен юҡҡа сығара.** Фин ғалимдары тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, даими сәтләүек ашау (бигерәк тә ер сәтләүеге - арахисты) диабет хәүефен түбәнәйтә. Бында ла Е витамины ҙур роль уйнай.

**Сәстәр ҡуйы булһын өсөн.** Әгәр ҙә сәсте юғалтыуҙың нигеҙендә генетик һәм гормональ сәбәп ятмаһа, тимәк, сәстәр тимер етмәүҙән ҡойола. Ә был минералды тулыландырырға сәтләүектәр ярҙам итер.

**Афродизиак булып тора.** Бигерәк тә әстерхан һәм кедр сәтләүектәре. В төркөмө витаминдары нервылар системаһына яҡшы йоғонто яһай, ә Е витаминын мускулдар һәм енес биҙе функцияһы әүҙемлеген стимуллаштыра.

**Организмды таҙарта.** Сәтләүектәрҙә дөрөҫ эсәк эшмәкәрлеге өсөн кұҙәнәкле туҡыма бар.

### Хәүефләнергә кәрәкме?

Әммә сәтләүектәрҙең кире яғы ла бар. Беренсеһе - юғары калориялы булыуы. Сәтләүектәр төрөнә ҡарап, 100 грамм сәтләүеккә 700 ккал һәм 68 грамм май тура килә. Етмәһә, сәтләүекте бер ашай башлауың була, туҡтауы бик ауыр. Тағы ла бер етешһеҙлек: сәтләүектәр күптәрҙә аллергия булдыра. Ул иң көслө аҙыҡ-түлек аллергены. Хатта туңдырма составындағы бер бөртөк кенә сәтләүек тә аллергия сығанағы була ала. Медицинала сәтләүекле батон ашаған кеше менән үбешеү һөҙөмтәһендә анафилактик шок кисергән кешеләр тураһындағы осраҡтар теркәлгән. Белгестәр әйтеүенсә, һуңғы йылдарҙа сәтләүеккә аллергия осраҡтары йышая бара. Көнбайышта хатта "сәтләүек истерияһы" тигән термин бар. Ауырлы һәм бала имеҙгән ҡатындарға арахис ашау ҡәтғи тыйыла. Уны өс йәшкә тиклем балаларға биреү ҙә ярамаған ғәмәл иҫәпләнә. Әммә һуңғы асыштар күрһәтеүенсә, был кәңәштәр күптән иҫкергән. Барыһы ла был тиклем ҡурҡыныс түгел, ти табиптар.

Яңыраҡ Бөйөк Британияның аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге агентлығы үткәргән тикшеренеүҙәр ауырлы саҡта сәтләүек ҡулланыу һәм бала аллергия булыуы араһында уртаҡлыҡ юҡлығын раҫлаған. Ғалимдар әйтеүенсә, баланы сәтләүек ашауҙан тыйырға ла ярамай, юғиһә, ҙурайғас, уларҙа мотлаҡ рәүештә был ризыҡ төрөнә аллергия буласаҡ. Мәҫәлән, Израилдә 7-8 айлыҡ сабыйҙарға ер сәтләүеге бирә башлайҙар, был илдә сәтләүеккә аллергия менән балаларҙың 0,2 проценты ғына яфалана. Францияның Милли ғилми-тикшеренеү институты ғалимдары раҫлауынса, әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ ауырлы саҡта омега-3 майлы кислотаһына бай ризыҡтарҙы, шул иҫәптән сәтләүектәрҙе лә рационына индерә икән, балала аҙыҡ аллергияһы хәүефе күпкә түбәнәйә.

### Сәтләүек хаҡындағы мифтар

● **Ни тиклем күберәк сәтләүек ашайһың, шул тиклем яҡшыраҡ.**

Әлбиттә, сәтләүекте көн һайын ашарға була, тик күп күләмдә түгел. Быныһ өсөн көндөң тәүге яртыһы уңайлыраҡ, тип иҫәпләнә, сөнки организм энергияны тотоноп өлгөрөргә тейеш.

● **Ҡайһы бер сәтләүектәр ябығырға ярҙам итә, сөнки барлыҡ майҙар ҙа үҙләштерелмәй.**

Был дөрөҫ түгел. Киреһенсә, сәтләүек составындағы углеводтар организмда майға әйләнеүе ихтимал.

● **Сәтләүектәр ашау араһында ҡапҡылап алыу өсөн уңайлы. Шуға ла уны балаларға биреү файҙалы.**

Сәтләүекте өлкән йәштәге балаларға ғына, аҙнаһына 1-2 тапҡыр бирергә ярай. Тик уларҙың артыҡ ауырлығы һәм сәтләүеккә аллергия булмаһын.

● **Сәтләүектәр ит ашамаусыларға итте алыштыра.**

Был дөрөҫ түгел. Ҡайһы бер сорттарында, мәҫәлән, миндалдә аҡһым күп, әммә бер ниндәй сәтләүек тә хайуан аҡһымын алыштыра алмай - уларҙа ҡиммәтле аминокислоталар бөтөнләй юҡ.

● **Ҡыҙҙырылған сәтләүектәр яҡшыраҡ үҙләштерелә.**

Ысынлап та, ҡыҙҙырыу сәтләүектәрҙең үҙләштерелеүен яҡшырта, тик был осраҡта ҡайһы бер витаминдар юҡҡа сыға. Етмәһә, ҡыҙҙырылған сәтләүектең аллерген сифаттары тағы ла көсәйә.

### Нисек дөрөҫ ҡулланырға?

Сәтләүектәр тик файҙа ғына килтерһен өсөн бер нисә ҡағиҙәне белергә кәрәк.

**Лимитты иҫәпләгеҙ.** Таҙартылған сәтләүектәр ғәҙәттә 20, 30, 40, 50, 60 грамлыҡ ҡаптарҙа һатыла. Иҫәпләгеҙ: 20 грамм (120-140 ккал) - ҡапҡылап алыу өсөн, ә 60 грамм (400 ккал) - төшкө аш урынына. Бер юлы 100 грамдан күберәк сәтләүек ашау бөтөнләй файҙаһыҙ, ул үҙләштерелмәй. Тимәк, көнөнә 30 грамдан артыҡ сәтләүек ашау кәңәш ителмәй. Ябығырға теләүселәргә 15-20 грамм да етә. Был, мәҫәлән, 6-7 әстерхан сәтләүеге.

**Аппетитты алдағыҙ.** Саҡ ҡына сәтләүек өҫтәп әҙерләнгән ризыҡтар һәм тәмтомдар туйымлыраҡ була. Уның был сифатын иҫәпкә алып, сәтләүектәрҙе үҙен генә түгел, ә ниндәйҙер ризыҡҡа өҫтәп ашарға күнегегеҙ.

**Сәтләүек майын һәм пастаһын ҡулланмағыҙ.** Улар үтә майлы, составында шәкәр ҙә бар.

**Дөрөҫ һайлағыҙ.** Ҡабығынан әрселмәгән сәтләүек алаһығыҙ икән, ауырыраһын һайлағыҙ. Улар һелкетеп ҡарағанда шалтырап тормаҫҡа тейеш. Бигерәк тә ер сәтләүеген ентекле һайлағыҙ: саҡ ҡына серек сәтләүек тә ауыр ағыуланыуҙарға килтерә.

**Дөрөҫ һаҡлағыҙ.** Ҡабығынан әрселмәгәндәре һалҡын урында ярты йылға тиклем һаҡлана. Ә таҙартылған сәтләүектәрҙе ябыҡ контейнерҙа һыуытҡыста торорға кәрәк - был осраҡта улар ике айға тиклем боҙолмаясаҡ.

### Иң файҙалы ун сәтләүек

**Әстерхан сәтләүеге** (100 грамда 688 ккал, 68,5 грамм май) - иң файҙалы сәтләүек: уларҙа антиоксиданттар ике тапҡыра күберәк. Е витамины һирәк формала гамма-токоферолда осрай, ул омега-3 менән бергә "насар" холестерин күләмен түбәнәйтә. Әстерхан сәтләүегендә баҡыр күп, ул тирене ультрафиолеттан һаҡлай.

**Ер сәтләүеге** (564 ккал, 46,1 грамм май) - дөрөҫөн әйткәндә, ер сәтләүеге бөтөнләй сәтләүек түгел, ә ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған үҫемлектең орлоҡтары. Ул аҡһымға һәм фолий кислотаһына бай.

**Фундук** (650 ккал, 64 грамм май) - Н витамины, биотинды матурлыҡ витамины, тип йөрөтәләр, ә был сәтләүек уға бик бай. Биотин аҡһым һәм май әйләнешен нормаллаштыра, эсәк эшмәкәрлеген яҡшырта, сәс һәм тырнаҡтарҙы нығыта, тирене ҡартайыуҙан һаҡлай. Фундукта Е витамины ла күп.

**Бразиль сәтләүеге** (682 ккал, 68,2 грамм май) - уның составында селен күп. Селен үпкә, тура эсәк, ҡатын-ҡыҙҙарҙа - күкрәк һәм ир-егеттәрҙә простата яман шеше хәүефен түбәнәйтә. Көндәлек норма өсөн 5 сәтләүек ашау етә. Уларҙа аҡһым йомортҡаға ҡарағанда ла күберәк, шуға ла ул вегетариандар өсөн ҡиммәтле ризыҡ. Шулай уҡ витаминдар, калий, магний, фосфор, цинк күп.

**Миндаль** (612 ккал, 55,8 грамм май) - составындағы "кальций-магний-В6 витамины" комбинацияһы һөйәктәрҙе нығыта. 50 грамм миндаль сәтләүегендә кальцийҙың көндәлек нормаһының яртыһы бар, ә магний менән В6 витамины уны үҙләштерергә ярҙам итә. Был сәтләүектә йөрәк һәм нервылар системаһы өсөн кәрәкле аҡһым һәм калий күп.

**Кешью** (573 ккал, 48 грамм май) - уның составындағы тимер һыйыр итендәге күләмдә, шуға ла уны анемия булдырмау өсөн ҡулланалар. Цинк, баҡыр, фосфор, Е һәм В4 витаминдары физик эштән һуң көстө тулыландыра.

**Фисташка** (556 ккал, 50 грамм май) - лютеин каротиноидтары һәм зеаксатин күреү һәләтен яҡшырта. Фисташка - был элементтар булған берҙән-бер сәтләүек.

**Пекан** (689 ккал, 70,1 грамм май) - Е витаминына, магний, цинкка бай. Сәстәр һәм тире матур булһын өсөн ҡулланыла.

**Кедр сәтләүеге** (673 ккал, 61,0 грамм май) - авитаминозды иҫкәртеү өсөн яҡшы сара. Яҡшы үҙләштерелә, шуға ла уны балаларға тәҡдим итәләр.

**Каштан сәтләүеге** (170 ккал, 1,7 грамм май) - иң диетик сәтләүек, майы әҙ, еңел үҙләштерелә торған углеводтар күп. Бешерелгән каштандар - ябығыусылар өсөн файҙалы.

Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

### Әҙһәм - һуңғы гид

Хәҙер китаптың икенсе өлөшөндә Әҙһәм тигән уйҙырма исем аҫтында биреләсәк кеше тураһында һөйләмәксемен. "Һуңғы гид" тип аталған икенсе өлөш яҙылыуға тап ул сәбәпсе. Китаптың тышында минең генә авторлығым ҡуйылһа ла, ғәмәлдә, уның авторы - Әҙһәм.

Әҙһәм урта белемгә эйә һәм, нигеҙҙә, тәҙәләштә эшләй. Тәү ҡарашҡа ошо профессия вәкилдәренән бер нәмә менән дә айырылмай. Хәҙерге күҙлектән сығып баһалағанда, ул ауыр физик эш менән мәшғүл наҙан кеше. Әммә уның менән тәүге осрашыуҙа уҡ мин уның икенсе донъя кешеһе, ғаләмдең йәшерен серҙәрен белгәнен аңланым. Уның менән осрашҡанға тиклем, мәҫәлән, мин тыуғанға тиклем һәм яҡты донъяға тыуғас та үҙен иҫләгән кешене осратҡаным юҡ ине. Шулай уҡ үҙенең үлгәндән һуң нимә эшләйәсәген белгән кеше менән күҙгә-күҙ ҡарашып аралашырға тура килмәне. Оҙаҡ аралашҡандан һуң уға башҡа таныштарыма бирелмәгән һәләт бирелеүен аңланым. Ә минең таныштарым араһында доктор исемен йөрөткән ике тиҫтәнән дә кәм булмаған ғалим бар. Әҙһәм миңә бер нисә тапҡыр "ваҡыт" тигән философик категорияның тәбиғәтен аңлатырға тырышты, әммә минең аңым уның концепцияһын ахырынаса ҡабул итергә һәләтле түгел ине.

Әҙһәм шулай уҡ үҙенең гид тип аталған аҙ һанлы кешеләр рәтенә инеүен дә һөйләне. Гидтарҙың тәғәйенләнеше - кешелекте күтәреү. Улар кешегә уның тышҡы проблемаларын хәл итеү юлдарын күрһәтергә тейеш. Уларҙың һаны Ерҙә 500-ҙән артмай. Әҙһәм гидтар араһында үҙенең иң йәш, иң көслө һәм иң сыҙам булыуы тураһында ла белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, гидтарҙың барыһы ла тиерлек үлеп бөткән, ә ул шуларҙың иң һуңғыларының, кешелеккә заманды, ауыр бурыстарын хәл итергә ярҙам итә алыусыларҙың береһе. Был бурыстар тураһында "Һуңғы гид" яҙмаларын уҡып белә алаһығыҙ.

### Урта быуат әрмән шағиры Модуниҙы эҙләү

Осрашыуҙарҙың береһендә Әҙһәм элек, Урта быуаттарҙа был донъяға тыуғанында әрмән шағиры булыуын һәм шундай юлдар яҙыуын белдерҙе:

*Грехи всех лежат во мне*
*За грехи всех отвечаю я, и только я!*

Үҙенең барлыҡ тормошо ошо шиғыр менән программаланыуын аңлатты. Мин унан был шағирҙың исемен белмәйһеңме, тип һорағас, ул: "Беләм, Ражон Модуни. Миңә хатта нисектер ошо шағирға арналған тапшырыуҙан өҙөк тә тыңларға тура килде", - тип яуапланы. Шағирҙың ошо шиғырын табыу тураһындағы тәҡдимемә ул ризалыҡ бирҙе. 2006 йылдың сентябрендә, исмаһам, ошо шағир тураһында нимә булһа ла табырға өмөтләнеп, Зәки Вәлиди исемендәге китапханаға юлландыҡ. Беҙгә ул ваҡыттағы әрмән шағирҙарының бер ни тиклем шиғыры тупланған бер генә антологияны табырға мөмкин булды. Әммә унда Модуни тураһында бер генә һүҙ ҙә юҡ ине. Шулай ҙа минең иғтибарымды үҙенең ябайлығы, талапсанлығы һәм күңелгә үтеп инеүе менән икенсе шиғыр йәлеп итте. Уны күсереп яҙып һәм ятлап алдым. Тексын хәтеремдә нисек ҡалған, шулай яҙам. Урта быуат әрмән шағирының был әҫәре мин оҙаҡ йылдар уйлап йөрөп тә аңлата алмаған бик күп һорауҙарға яуап бирҙе. Шиғырҙы уҡығас, кешенең хаталарында, ғәмәлдәрендә, гонаһлы эштәрендә ғәҙәттә ҡабул ителгәнсә уның тәне түгел, ә ошо тәндә ыҙалатҡан йән ғәйепле икәнлеге асыҡланды.

***Бренное тело корила душа***

*Бренное тело корила душа,*
*Телу, скорбя, говорила душа:*
*"Грешное, все ты соблазны*
*Познало этого мира,*
*Где святости мало.*
*И меня погубило грехами,*
*Ввергнуло в неугасаемое*
*пламя.*
*И в аду, не избегнув огня,*
*Будешь терзаться*
*И мучить меня".*
*Тело ответило:*
*"Полно, душа!*
*Я в служении, а ты госпожа.*
*Ложно, неправо меня не суди,*
*Раны кровавые не береди.*
*Конь я, и ты оседлала меня,*
*Гонишь куда ни попало коня.*
*Все по твоей совершается*
*воле,*
*В этом мире я -*
*Горстка праха, не боле".*
***(Хачатур Кечареци).***

Миңә ниңәлер бөгөнгәсә Әҙһәм мине китапханаға бары тик ошо - аҡыл тулы, тыныслыҡ һәм ҡырыҫ ябайлыҡ менән һуғарылған шиғырҙы табып уҡыһын өсөн генә алып барған кеүек тойола. Һәм ошонан һуң Әҙһәм тынысланды - ул барлыҡ ваҡытын миңә, бары тик миңә генә бүлә алмай бит инде.

### Йомғаҡлау урынына йәки һабаҡ дауам итә

Ғүмеремдең һуңғы 18 йылындағы барлыҡ ҡырҡа боролоштарҙы тамамланмаған һабаҡ кеүек ҡабул итәм. Тәүҙә йыһан мине ҡанатлылар, һуңынан кешеләр ярҙамында уҡытты. Юра Ястребцов хәҙер инде һабаҡ бирмәй, ул нисектер һиҙҙермәй генә беҙҙең йорттан күсенеп, ҡайҙалыр икенсе яҡтарға йәшәргә сығып киткән, шикелле. Әҙһәм Өфөлә йәшәй, әммә минең турала уйламай ҙа, яҙмышым менән дә ҡыҙыҡһынмай. Ул, миненсә, мин ҡабул итә алған тиклем белем биреп, артабан минең менән ваҡыт уҙғарыуҙы кәрәкле тип һанамаған, күрәһең. Уларға үпкәләмәйем - беҙ бит һәр ваҡыт бергә йөрөй алмайбыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, улар тормошома ҡапыл килеп инделәр ҙә, ҡапыл юғалдылар. Минең төрлө командировкалар, лекциялар һәм семинарҙар менән тулы көсөргәнешле тормошомда Әҙһәм менән Юра бер ваҡытта ла алдынғы роль уйнаманы. Уларҙың һабағы нисектер юл ыңғайы ғына тапшырылды.

Күптән түгел мин тағы бер һоҡланғыс кеше менән таныштым. Дөйөм ҡабул ителгән баһалама буйынса уның юғары белеме юҡ, әммә уның был тормошто танып белеүенә ябай кешенең аҡылы етерлек түгел. Билдәле бер ваҡытҡа тиклем беҙ уның менән исемдәребеҙ менән генә өндәшеп һөйләштек. Унан фамилияһын һорап, яуап ишеткәс, тертләп киттем: яңы танышым "кош" фамилияһын йөрөтә ине...

Әммә шунда уҡ тынысландым. Тимәк, белем алыу дауам итә. Һәм уның ахыры булмаясаҡ та.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**
**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Самат Мөхәмәтйәновтың "16 йәшлек ҡартлас" яҙмалары тамамланды. Гәзитебеҙҙе даими уҡып барған уҡыусылырҙа авторға һәм уның үҙ-үҙенде һауыҡтырыу, туҡланыу ысулына, үҙенсәлегенә ҡарата төрлө һорауҙар тыуғандыр. Әгәр шулай икән, һорауҙарығыҙҙы беҙҙең адреска ебәрә йәки шылтыратып әйтә алаһығыҙ. Һорауҙар мотлаҡ авторға еткерелер һәм уларға яуаптар бирелер.**

**Ғөмүмән, байтаҡ йәште ваҡлаған, ғүмер урталарына еткән һәр кешелә хаталаныуҙар тәжрибәһе лә була бит инде ул. Әлбиттә, Самат Әбдрәхим улы кеүек, һәр көндән, һәр аҙымдан бындай матур һығымталар яһау бар кешенең ҡулынан килмәй. Ә шулай ҙа һәр кем "хаталар өҫтөндә эш"те башҡара ала, тип уйланыла. Әйҙәгеҙ, башҡалар, бигерәк тә йәштәребеҙ ул хаталарҙы ҡабатламаһын өсөн үҙ хаталарыбыҙ тураһында һөйләйек. Хаттар көтәбеҙ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Алтынсы көн.

**Беренсе бүлек. Аҡыл. Аҡылыңдың тикшеренеүсеһе булыу**

Мейене һәм аҡыл эшмәкәрлеген стимуллау ныҡлы сәләмәтлек һәм интеллектуаль үҫеш өсөн бик мөһим. Мәғлүм булыуынса, беҙ иң яҡшы осраҡта аҡыл ҡеүәтенең ни бары 25 процентын ғына файҙаланабыҙ. Көсөргәнешле эшләгәндә һәр кем "фекер гиганты" була ала. Башҡалар һәләттәрегеҙ тураһында нимә әйтеренә иғтибар итмәгеҙ. Үҙегеҙ һәм ҡаҙаныштарығыҙ өсөн бер ниндәй ҙә сикләүҙәр ҡуймағыҙ. Ғәмәлдә, бер ниндәй ҙә сикләүҙәр юҡ.

Аҡыл һәләттәрегеҙҙең тикшеренеүсеһе булығыҙ, аҡылығыҙҙың барлыҡ ҡеүәтен һәм уның мөмкин булмаҫтай кеүек күренгән һәләттәре тураһында күберәк белергә тырышығыҙ. Был юлда тәүге аҙым - уны асыҡ килеш тотоу. Медитация, йога, нимәгәлер фокус ҡуйыу һәм визуалләштереү - күнекмә режимының иң төп мәле. Донъяның билдәле атлеттары иң юғары ҡаҙанышҡа ынтылғанда тап шулай эшләй ҙә инде.

**Күнегеү**

Яҡындағы китапханаға йәки китап магазинына инегеҙ һәм ундағы уңыш ҡаҙаныу ысулдары тураһындағы әҙәбиәтте өйрәнегеҙ. Һеҙҙең ҡарашҡа иң сәйер атамалы тойолған ике китапты алып, уларҙың йөкмәткеһен уҡығыҙ. Шәхси ҡаҙаныштар өлкәһендә билдәле буласаҡ барлыҡ яңы идеяларға асыҡ булып ҡалығыҙ. Ғәмәлдә, яңы нимәнәләр эшләп ҡарағыҙ.

**Икенсе бүлек: Тән. Аҙыраҡ йоҡлап, күберәк уяу булығыҙ**

Организмығыҙға физик һәм аҡыл көсөн тергеҙеү өсөн көнөнә алты сәғәт йоҡо етә. Шуға ҡарамаҫтан, күптәр оҙағыраҡ йоҡлауҙы хуп күрә. Аҙнала ни бары 168 сәғәт, ә ошо ваҡыт эсендә күпме ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс нәмәләр эшләп өлгөрөргә кәрәк! Шәхси һәләтегеҙҙе күтәреүҙең иң һөҙөмтәле ысулдарының береһе - тәүлектең йоҡоға киткән сәғәттәрен бер сәғәткә ҡыҫҡартыу. Оҙаҡ йоҡлау - бары тик насар ғәҙәт кенә ул. Яңы, ҡыуаныслыраҡ һәм һөҙөмтәлерәк ғүмер йәшәү өсөн ошо ғәҙәтегеҙҙе боҙоп, организмға күпме кәрәк, шунса ғына йоҡлай башлағыҙ.

Быны ҡапыл түгел, ә яйлап эшләгеҙ. Мәҫәлән, һәр иртән ғәҙәттәгенән ярты сәғәткә алдараҡ тороғоҙ. Өс көндән был ваҡытты бер сәғәткәсә арттырығыҙ. Тәүҙә ауырыраҡ булыр, һуңынан инде үҙегеҙ уҡ күнегеп китерһегеҙ. Шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ: нимәнәләр 21 көн дауамында туҡтауһыҙ эшләнһәгеҙ, ул артабан ғәҙәткә әйләнә һәм аҙаҡ инде уны эшләүе еңел була башлай. Ошо ваҡытты тоторға тырышығыҙ һәм ҡапыл ғына быға тиклем бер ваҡытта ла етмәгән ваҡытты табырһығыҙ. Был - тормошоғоҙҙо тамырынан үҙгәртергә һәләтле уңыштың ҡеүәтле сере.

**Өсөнсө бүлек: характер. Бай булыу менталитеты**

Тәбиғәттең төп ҡанундарының береһе - башҡаларға ни тиклем күберәк бирһәгеҙ һәм хеҙмәт күрһәтһәгеҙ, үҙегеҙгә шул тиклем күберәк кире ҡайта. Күптәр идеяларын, байлығын, милкен башҡалар менән бүлешһә, үҙҙәрендә был нәмәләр аҙ ҡалыр, тип ҡурҡып йәшәй. Был - сикләнгән һәм ярлы тормошҡа иң тура юл. Үҙегеҙгә башҡалар, бигерәк тә нужа күреүселәр өсөн нимәлер эшләүҙе ғәҙәт итеп алығыҙ. Аҡсаларығыҙҙы яраткан мәрхәмәтлек фондына бирегеҙ һәм йәмәғәт эштәренән ситтә ҡалмағыҙ. Үҙегеҙҙең эшегеҙҙә лә, йәмәғәт эштәрендә лә башҡалар менән хеҙмәттәшлек итегеҙ. "Үҙемдеке - сит" тигән принципты ситкә ҡуйығыҙ һәм синергизмдың ҡеүәтен тойорһоғоҙ: ике ҡул берәүгә ҡарағанда көслөрәк.

**Робин ШАРМА**



## 19 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.20 "Трое в Коми". Сериал (16+)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Однолюбы". Сериал (16+)
23.30 "Джо". Сериал (16+)
00.25 "Цепная реакция" (12+)
02.20, 03.05 "Мисс Март" (12+)
03.00 Новости
04.05 "Контролная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 154-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-4". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.10 "Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.45 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Сериал (12+)
23.50 "Обитель Святого Иосифа" (12+)
01.05 "Вести+"
01.15 "Визит к Минотавру". Сериал
02.50 "Закон и порядок-17". Детективный сериал (16+)
04.45 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Айрат Ғайсин (6+)
10.15 "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". "Дебет шәл" (6+)
10. 40. "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Урал Мортазин. Концерт (6+)
21.00 "Йырҙарыбыҙ һөйгән йәрҙәргә". Иҙел Нурғәлин, Юнир Һағынбаев (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00, 11.30 "Новости недели"**
**10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 17.40, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**10.45 "Семәр"**
**11.00 "Городок АЮЯ"**
**11.15, 18.15, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Куласа"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Байтус" (+6)**
**16.00 "Бауырһаҡ"**
**16.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.15 "Автограф" (6+)**
**17.50 "Создай свое дело" (12+)**
**18.00 "История признания" (12+)**
**18.30, 02.15 "Эдера" (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+)**
**20.30 "Телецентр" (12+)**
**21.00 "Жизнь замечательных людей" (12+)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00 "Единое время" (16+)**

## 20 АВГУСТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2" .Сериал (16+)
16.10 "Последний герой". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.20 "Трое в Коми". Сериал (16+)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Однолюбы". Сериал (16+)
23.30 "Джо". Сериал (16+)
00.25 "Дом с приколами". Комедия (12+)
02.20, 03.05 "Зеркала-2" (18+)
03.00 "Новости"
03.50 "Элементарно" (16+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Выборы-2013"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 155-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-5". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.10, 19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Сериал (12+)
23.55 "Железный Шурик"
00.50 "Вести+"
01.15 "Визит к Минотавру". Детектив
02.40 "Закон и порядок-17" (16+)
04.25 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Дарман" (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.30 "Йәштәр тауышы" . Йырҙар (6+)
09.15 "Замандаштар". Миңлеғәфүр Зәйнетдинов (6+)
09.30 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Йырҙар (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүе (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Юлдаш йыры". Концерт (6+)
20.00 "Кис ултырып". Фидан һәм Азамат Ғафаровтар. Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**10.00 "Царь горы"**
**10.45 "Зеркальце" (6+)**
**11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "Здоровое решение" (12+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 01.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен"**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.40 "Башҡорт йыры-2013"**
**14.10 "Тәмле" (12+)**
**14.45 "Куласа" (12+)**
**15.15 "Книга сказок"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ"**
**16.30, 21.30, 03.00 "Новости (на русс. яз.)**
**16.45 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+)**
**18.30, 02.15 "Эдера" (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Власть отвечает" (16+)**
**20.30 "Телецентр" (12+)**
**21.15 "Жизнь замечательных людей" (12+)**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**22.30, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00 "Единое время"**
**06.30 "Полезные новости" (12+)**

## 21 АВГУСТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом" (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.20 "Трое в Коми". Сериал (16+)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Однолюбы". Сериал (16+)
22.25 "Дом, которого нет" (12+)
23.30 "Джо". Сериал (16+)
00.30 Спящая красавица". Драма(18+)
02.35, 03.05 "Приятели из Беверли Хиллз". (16+)
03.00 Новости
04.30 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 156-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-5". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Сериал (12+)
23.55 "Проклятие Тамерлана". Док. фильм (12+)
00.50 "Вести+"
01.15 "Визит к Минотавру"
02.50 "Закон и порядок-17" (16+)
04.35 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.10 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Байыҡ". 1-се тур (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Урал Иҙелбаев. Концерт (6+)
19.00 "Уңыш джентльмендары" (12+)
21.00 "Кис ултырып". Дим Мәннән иҫтәлегенә арналған концерт (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Книга сказок"**
**11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "Отдел культуры" (12+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем"**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.40 "Байык-2013"**
**14.45 "Куласа" (12+)**
**15.15 "Цирк в 13 метров"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Семәр"**
**16.00 "Городк АЮЯ"**
**16.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Орнамент"**
**17.50 "Алтын тирмә"**
**18.30, 02.15 "Эдера"**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15, 06.30 "Полезные новоти" (12+)**
**20.30 "Телецентр" (12+)**
**21.00 "Министерству юстиции РБ - 5 лет" (16+)**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**22.00 "Историческая среда"**
**22.30 "Аль-Фатиха"**
**23.00, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00 "Единое время" (12+)**

## 22 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.20 "Трое в Коми". Сериал (16+)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Дом на обочине". Драма (16+)
23.30 "Джо". Сериал (16+)
00.25 "Сломанная стрела". Боевик (16+)
02.25, 03.05 "Макс Дьюган возвращается" (12+)
03.00 Новости
04.20 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Выборы-2013"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 157-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-5". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Склифосовский". Сериал (12+)
23.35 "Тайна египетских пирамид" (12+)
00.50 "Вести+"
01.15 "Визит к Минотавру"
02.40 "Закон и порядок-17" (16+)
04.25 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Дарман" (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Автограф". Тамара Юлдашева (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.45 "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". "Ирәмәл" (6+)
10.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Зифа Нагаева. Концерт (6+)
20.30 "Кис ултырып". Мөхәббәтле парҙар дуэты (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00 "Круизы в мир открытий"**
**10.30, 12.30, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**10.45 "Каникулы НЕстрогого режима"**
**11.00 "Цирк в 13 метров"**
**11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "Власть отвечает"**
**11.45 "Мир настоящих мужчин" (16+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен"**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости**
**13.40 "Поет Лина Гареева" (12+)**
**14.35 "Выборы-2013"**
**14.45 "Куласа" (12+)**
**15.15 "Ғәләмәт донъя"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Шәп арба"**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ"**
**16.30, 21.30, 03.00 Новости**
**16.45 "Орнамент"**
**17.50 "Сәләм" (12+)**
**18.00 "Бәхетнама"**
**18.30, 02.15 "Эдера" (16+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+)**
**20.30 "Телецентр" (12+)**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**22.00 "ФК "Уфа"**
**22.30, 03.30 "Художественный фильм" (16+)**
**01.00 "Единое время" (12+)**

## 23 АВГУСТ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Последний герой" (16+)
18.00 Вечерние новости
18.20 "Трое в Коми". Сериал (16+)
18.50 "Человек и закон" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Один в один!"
00.30 "Кто такой этот Кустурица". Док. фильм (16+)
02.20 "Здоровый образ жизни". Комедия (12+)
04.10 "Элементарно" (16+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
14.50 "Международный конкурс детской песни "Новая волна - 2013"
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-5". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "50 лет на эстраде". Большой бенефис Евгения Петросяна (16+)
23.10 "Эта женщина ко мне". Мелодрама (12+)
01.25 "Визит к Минотавру"
03.00 "Честный детектив" (16+)
03.30 "Горячая десятка" (12+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Ижад коллективтары. Нефтселәр мәҙәниәт һарайы (6+)
20.00 "Кис ултырып". Айгөл Һағынбаева (12+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+)**
**10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 17.40, 06.45 "Выборы-2013" (16+)**
**10.45 "Город АЮЯ"**
**11.00 "Ғәләмәт донъя"**
**11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.30 "ФК "Уфа"**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.40 "Мелодии души" (12+)**
**14.00 "Автограф" (6+)**
**14.45 "Куласа" (12+)**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Каникулыҫ"**
**15.45 "Байтус"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)**
**17.15 "Времен связующая нить. Художники" (6+)**
**17.50 "Создай свое дело" (12+)**
**18.00 "Йома"**
**18.30, 02.15 "Эдера" (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+)**
**20.30 "Телецентр" (12+)**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**22.30 "Отдел культуры" (12+)**
**23.00 "Дарман"**
**23.45 "Песни на стихи" (12+)**
**01.00 "Смелая музыка"**
**03.30 "Художественный фильм" (16+)**

## 24 АВГУСТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Королевский сорняк" (12+)
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря"
10.00, 15.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Николай Валуев. Самый крупный политик в мире" (12+)
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Идеалъный ремонт"
13.10 "Форт Боярд" (16+)
14.40 "Ноттинг Хилл". Мелодрама (12+)
16.55 "Давайте похудеем?" (12+)
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Свадебный переполох" (12+)
19.15 "Угадай мелодию"
19.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+)
00.35 "Боевой конь". Военная драма (12+)
03.15 "Проблески надежды". Мелодрама (16+)

### РОССИЯ 1
06.00 "Пристань на том берегу". Мелодрама
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан" (16+)
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова"
08.50 "Планета собак"
09.20 "Субботник"
10.05 "Качество жизни"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив" (16+)
12.25 "Русалка". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Международный конкурс детской песни "Новая волна-2013"
15.55 "Субботний вечер"
17.55, 20.30 "Его любовь". Мелодраматический сериал (12+)
20.00 "Вести"
21.55 "Девушка в приличную семью". Мелодрама (12+)
00.00 "От сердца к сердцу" (12+)
02.00 "Проект А" (16+)
04.10 "Комната смеха"
05.00 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
08.20 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.35 "Тәмле" (12+)
09.15 "Кош юлы". Рамазан Йәнбәков (6+)
10.15 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.45 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.25 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Альберт Салауатов. Концерт (6+)
21.00 "Кис ултырып ". Гөлсинә Мөхәмәҙиева (12+)

### БСТ
**07.00, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 "Фильм детям"**
**09.00 "Көндәлек" (6+)**
**09.30 Мультфильм**
**10.00 "Сәләм+" (12+)**
**10.15 "Бәхетнамә"**
**10.45, 03.30 "Теплый дом"**
**11.30 "Аль-Фатиха"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Здоровое решение" (12+)**
**13.15 "Млечный путь" (6+)**
**13.45 "Дарю песню"**
**16.00, 04.15 "Арслан" (16+)**
**16.45, 06.45 "Выборы-2013" (16+)**
**17.00, 05.00 Т. Гарипова "Девушка с монистами" (12+)**
**18.30 "Хазина"**
**19.00 "Башкорттар"**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Еду я деревню"**
**20.45 "Живое село" (12+)**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**22.00 "Башҡорт йыры - 2013"**
**22.45 "Нескучная классика" (12+)**
**01.00 Художественный фильм (16+)**
**06.30 "Замандаштар" (6+)**

## 25 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.35, 06.10 "Королевский сорняк" (16+)
06.00 Новости
07.45 "Армейский магазин" (16+)
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Хроники Нарнии: покоритель зари" (12+)
14.15 "Ералаш"
14.40 "Мимино". Лирическая комедия
16.30 "До Ре" Лучшее
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+)
21.00 "Воскресное "Время"
21.15 "Универсальный артист"
23.00 "Под куполом" Сериал (16+)
23.55 "Закрытый показ" "Охотник". Драма (16+)
03.30 "Элементарно" (16+)
04.20 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.35 "Без права на ошибку". Детектив
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20, 14.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Городок. Дайджест"
11.45, 14.30 "Русалка". Сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Вести - Башкортостана"
14.30 "Международный конкурс детской песни "Новая волна - 2013"
15.55 "Смеяться разрешается".
17.55 "Оазис любви". Мелодрама (12+)
20.00 "Вести"
20.30 "Тариф "Счастливая семья". Мелодрама (12+)
22.20 "Клуши". Комедия (12+)
00.35 "Прощение". Мелодрама (12+)
02.20 "Долгое приветствие и быстрое прощание" (16+)
04.05 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.50 "Йырлап асыла күңел" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ҡыҙҙар ни өсөн илай". Спектакль (6+)
19.00 "Йондоҙло сәғәт". Венер Йылҡыбаев (6+)
20.00 "Кавказ тотҡонбикәһе" (12+)
21.00 "Ҡурай дуҫтарын йыя". Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома"**
**09.00 "Еду я в деревню"**
**09.30 "Живое село"**
**10.00 "Бауырһаҡ"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.35 "Шәп арба"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус"**
**11.15 "Семәр"**
**11.30 "Книга сказок"**
**11.45 "Алтын тирмә"**
**12.30 "Үткән ғүмер"**
**13.00 "Тәмле" (12+)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00, 20.00 "Весело живем" (12+)**
**14.30, 04.00 "Белое солнце пустыни" (16+)**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30, 18.30 "Замандаштар" (6+)**
**16.45, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)**
**17.00 "Историческая среда"**
**17.30 "Вестник"**
**17.45 "Орнамент"**
**18.00 "Любимое дело"**
**19.00 "Автограф" (6+)**
**19.30, 21.30 "Новости недели"**
**20.15 "История признания" (6+)**
**20.30 "Новости спорта"**
**20.45 "Мир настоящих мужчин" (12+)**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40" (16+)**
**21.15 "Бизнес-обзор"**
**22.00 "Байык-2013"**
**23.00 "Вечер.com" (12+)**
**23.45 "Поет И. Абдразаков" (12+)**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+)**
**02.15 Художественный фильм (16+)**
**05.30 "Млечный путь" (6+)**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАЙМАҠ - БАЙ ЯҠ




**Горизонталь буйынса:** 11. Әүлиәләр араһындағы Ғабдулла. 12. Өҫтө ҡалын үлән менән ҡапланып, аҫты һыу булғанлыҡтан һиңкелдәп ятҡан батҡыл урын. 13. Сәхнә яҡтыртҡысы. 14. Тормош шартынан килгән теләк, ихтыяж. 15. Марий Илендә Волгаға ҡушылған йылға.18. Луиза Дәүләтшинаның эш урыны. 21. Кәрт һалыу уйыны. 26. Пародист Галкинға исемен биргән пулемет. 28. Ауыр атлетика снаряды. 29. Әрәмә баҫҡан түмгәкле һаҙлыҡ. 31. "Ватандаш" йәки "Ағиҙел" баҫма булараҡ. 33. Баймаҡ районындағы йылға. 34. Ире үлгән ҡатындың муллаға биргәндән ҡалған малы. 36. Ерҙең йыйырсыҡтары. 37. Ур тигән нығытма. 39. Боронғо гректар өсөн ҡырағай халыҡ. 42. Төрөпкәнең "утыны". 45. Доға, намаҙ. 47. Термометр. 50. Теҙгендең "ағаһы". 55. Халыҡ фантазияһы. 56. Хоҙайҙан ниҙер үтенеү йолаһы. 57. Түбәнгә ҡараған ауыш ер. 58. Зыян, ҡаза. 59. Ялбыр һары сәсле енбәрей заты. 60. Кешенең эсендәге паразит.

**Вертикаль буйынса:** 2. Африка хайуаны. 4. Японда-рҙың ҡағыҙ сәнғәте. 5. Тәмәке ағыуы. 7. Ҡыллы музыка ҡоралы. 8. Абсурд, мәғәнәһеҙлек. 9. Хәйләкәр, мут кеше. 10. Йондоҙло ҡунаҡхана. 16. Бронялы машина. 17. Һарыҡ тиреһенән тегелгән аяҡ кейеме. 19. Ылыҫлы ҡыуаҡ. 20. Иҫерткес эсемлек, шарап. 22. Үҫемлектәр "тоҡомо". 23. Атаҡлы комбайнсы, Социалистик Хеҙмәт Геройы. 27. Лира Яҡшыбаева өсөн Сиражитдинов хәҙрәт. 28. Ҡәҙер, хөрмәт. 30. Ҡарт, йонсоу ат. 32. Һыу төбөндәге шыйыҡ мәте, ләм. 33. Ҡыҫҡа, түңәрәк ҡойроҡло йыртҡыс ҡош. 38. Һиндтарҙың изге сәскәһе. 40. Йәмшәйгән квадрат. 41. Дәһан тигән ағза. 43. Үлем. 44. Дегет ҡайната торған һауыт. 45. Баймаҡ "Ниагара"һы. 46. Тел, һүҙ сәнғәте. 48. Көмбәҙле түңәрәк павильон, зал, "торнадо"ның анаграммаһы. 49. Бик ныҡ көткән хәл, осраҡ. 51. Текст буйынса яҙылған ҡыҫҡа фекер. 53. Йығылып, сереп ятҡан йыуан ағас. 54. Офис хеҙмәткәре.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

## 32-се һандағы сканворд яуаптары:

**Горизонталь буйынса:** Мурзина. Хәйруллина. Март. Тәжрибә. Көмбәҙ. Саҡсауыл. Лава. Мәтрүшкә. Ботаника. Старшина. Трактор. Интрига. Лама. Лексика. Ниагара. Йыр. Ваза. Тантана. Катапульта. Тумыртҡа. Нота. План. Таҡыя. Мунса. Нуга. Ҡаҙаҡ. Мышы. Сәмситова. Стена. Ҡояш.

**Вертикаль буйынса:** Өмөт. Ғәйнетдинов. Ашлама. Тәм. Өйрәк. Готика. Ошаҡ. Хәстә. Ҡарағалпаҡ. Әҙрәс. Абсент. Маргаритка. Линза. Ҡасаба. Белем. Залимә. Алҡым. Тояҡ. Саба. Туташ. Астра. Ислахов. Арыш. Аҙым. Кенәз. Айнур. Атарган. Иридий. Ырғаҡ. Лиана. Ажар. Арпа.

ЙӘШЕЛ ДАУАХАНА

# ЕРКӘҮЕК

**Бесән ваҡыты. Һутҡа туйынған үләндәр бер аҙ ҡарая төшкән. Болонлоҡтар төрлө-төрлө сәскәгә күмелгән. Ошондай фонда алыҫтан уҡ күренеп, муйыл еҫе аңҡытып ултырған үләнде еркәүек тип атайҙар. Ҡайһы бер урындарҙа уны аҡбаш үлән, ерегүлән, еркүлән, ерекләүек, еркәүләп, ерек ҡураһы тип тә йөрөтәләр. Рус телендә ул (таволга вязолистная) йәки (лабазник вязолистный) тигән исем алған.**

Еркәүек иртә яҙ уҡ үҫеп сыға. Яйлап ҡына япраҡ яра, ҡыуаҡлана һәм июндең урталарында сәскә ата. Сәскәләре ваҡ ҡына булып, ап-аҡ йәки көрән аҡ төҫкә инә. Еркәүек йәй буйына сәскә ҡоймай, тирә-яҡты биҙәп ултыра. Шуға ла тәбиғәттең иң баҙыҡ биҙәктәренең береһе булып һанала. Юҡҡа ғына Франция уға "болон батшаһы" тигән исемде бирмәгән икән.

Еркәүек бөтә Европала, Рәсәйҙең бик күп ерҙәрендә: дымлы болондарҙа, ҡыуаҡтарға бай булған шишмә, йылға буйҙарында, урман аҡландарында күпләп үҫә. Ул бигерәк тә ҡырҡылған ағас диләнкәләрендә йыш осрай.

Еркәүектең һабаҡтары тура күтәрелгән, шыма, осона тиклем япраҡтар менән ҡапланған. Тамырсаһы йыуан, үрмәләүсән. Ҡыйғас япраҡтары бысҡы ситле, осҡо япрағы башҡаларынан ҙурлығы менән айырылып тора. Ул 3-5 өлөшкә бүлкәтле.

Еркәүекте кеше бик борондан файҙалана белгән. Был турала уның исеменең килеп сығыу тарихы һөйләй. Үрҙә күрһәтелгәнсә, уның бер нисә исеме бар, һәм улар бөтәһе лә ерек һүҙе менән бәйләнгән. Ә ерек ағасы менән был үләндең ниндәй уртаҡлығы бар һуң, ниңә уларҙың икеһе лә бер һүҙ тамырынан?

1969 йылда Ленинградта сыҡҡан "Боронғо төрки һүҙлегенең 257-се битендә "йер" һүҙе "тураҡларға, ярғыларға, һындырырға" тигән мәғәнәне бирә, тиелгән. Йәғни һүҙ яһаусы - "к" аффиксы ҡушылғас, ҡылым предмет мәғәнәһен ала, йәғни тураҡланыусы, ярылыусы, һыныусы. Сағыштыр: көрә-к - көрәк, илә-к - иләк, һ. б. Ерек ағасының бик мурт, тиҙ һынып барыуын иҫәпкә алһаҡ, уға исем ошо билдәһенә ҡарап бирелгәнлегенә төшөнөрбөҙ. Ә еркәүек, ерек кеүек үк, бик мурт, тиҙ генә һынып барыусан. Тимәк, ул да атаманы шул уҡ билдә буйынса алған икән. Э "ерек" һүҙе, күреүебеҙсә, бик боронғо. Төрки халыҡтарының дөйөм тарихына, беҙҙең эраның беренсе мең йыллығына барып тоташа.

**Еркәүек эсемлеге.** 50 г яңы ғына өҙөп алынған еркәүек сәскәләре, 60 г бал, 1 л һыу. Сәскәләрҙе һыуҙа ҡайнатып алалар ҙа 30 минут һыуыталар. Артабан бал һалып, һыуытҡысҡа ҡуялар.

**Болон сәйе.** Шәкәр һалмайынса ла тәмле сәй әҙерләп була. Еркәүек сәскәләрен һыуҙа ҡайнатып, бер тәүлеккә тондорорға ҡуялар. Икенсе көндә төнәтмә тәмләнә.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,**

**биология фәндәре докторы.**

ИҒТИБАР!

# ТАУЫШ БИРӘЙЕК



**Рус география йәмғиәте һәм Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһы "Комсомольская правда" гәзите ярҙамында "Рәсәй 10" мультимедия проектын тормошҡа ашыра.**

Проекттың тәүге этабында махсус булдырылған сайтта Рәсәйҙең 700-ҙән ашыу тәбиғәт, мәҙәниәт, археология, фәнни-техник прогресс ҡомартҡыһының фотоһүрәттәре урынлаштырылғайны. Интернет менән ҡулланыусыларға бөгөнгө Рәсәйҙе символлаштырған 10 иҫтәлекле урынды һайлап алырға тәҡдим ителде. Еңеүсе тип табылған объекттарҙың миниатюралары Мәскәү янында урынлашасаҡ "Рәсәй" ландшафт паркына тәҡдим ителәсәк.

Бәйгенең беренсе этабында тауыш биреү өсөн Башҡортостандан Шихандар, "Шүлгәнташ" мәмерйәһе, "Ләлә-Тюлпан" мәсете, Янғантау, Красноусол минераль сығанаҡтары, Ирәмәл тауы, Солоҡсолоҡ, "Ирәндек айыуы" тип аталған алтын самородок тәҡдим ителгәйне. 1 июлдән 1 сентябргә тиклем тауыш биреүҙең икенсе этабы бара. Унда ҡатнашыусы 80 объект араһында Башҡортостандан Шихандар һәм Салауат Юлаев һәйкәле лә бар.

Проекттың финалы 2 сентябрҙән 29 сентябргә тиклем дауам итәсәк. Интернет-тауыш биреүҙә һәм СМС-тауыш биреүҙә иң күп тауыш йыйған 10 объект еңеүсе тип иғлан ителәсәк.

Шихандар - Торатау һәм Йөрәктау өсөн бөгөн ниндәй көрәш барғанын beләһегеҙ: уларға сеймал булараҡ емерелеү ҡурҡынысы янай. Битараф булмаған кешеләр, шулай уҡ "Салауат Юлаев" һәйкәле өсөн тауыш биреүселәр ҙә, **"Рәсәй10" сайтында (http://10russia.ru/about)** һәм телефонда **1880** һанын йыйып, СМС аша **12-се** объектты билдәләп, "Шихан" өсөн тауыш бирһә ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.

**Абдрахман ВӘЛИДОВ,**

**йәмәғәт эшмәкәре.**

ҠУНАҠЙОРТ

# ЕВРАЗИЯ ТАУЫШЫ...

## алтын ҡурай сыңында

**Бөтә Рәсәй телекомпанияларының төбәк вәкилдәре (уларҙың иҫәбе 90-дан ашыу) август аҙағында Өфөлә "Евразия тауышы - 2013" телефестиваленә йыйыла. Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпаниялар етәксеһе Олег Добродеев тәҡдиме менән "Бүрәт" дәүләт телерадиокомпанияһы башлап ебәргән был фестивалде был юлы "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы дауам итәсәк.**

Фестиваль Европа һәм Азия ҡитғалары мәҙәниәттәрен үҙ иткән башҡалабыҙ Өфөлә 28 августа асыла. Әлегә беҙ төрлө төбәктәрҙән телевидение һәм радиотапшырыуҙар ҡабул итеү менән мәшғүлбеҙ. Иң беренсе эштәр Сахалиндан, Читанан килде. Башҡортостанға фестивалгә килергә теләүселәрҙең исемлеге үҫкәндән-үҫә бара: Камчатка, Красноярск, Калининград, Әстерхан, Грозный, Нальчик, Мурманск, Санкт-Петербург, Волгоград, Төмән, Ҡаҙан,Чебоксары, Алтай, Улан-Удэ, Сахалин...

Ҙур һәм бәләкәй халыҡтарҙың үҙ-үҙен танытырға ынтылыуы тәү сиратта уларҙың үҙҙәренең әүҙемлегенән тора. Был фестиваль ошондай әүҙемдәргә, йәғни милли мәҙәниәт вәкилдәренә үҙ тауышын ишеттереү мөмкинлеге бирә лә инде. Сарала милли мәҙәниәткә дәүләттең иғтибарын йүнәлтеү юҫығында эшләүсе телевидение, радио һәм башҡа баҫмалар журналистары үҙ эштәрен күрһәтәсәк, глобалләшеү шарттарында бәләкәй халыҡтарҙы, уларҙың телен, мәҙәниәтен, тарихын һаҡлап ҡалыу ысулдары эҙләү кеүек кешелектең мөҡәддәс бурыстарын атҡарыу тураһында күҙгә-күҙ ҡарашып әңгәмә ҡорасаҡ.

Бындай фестивалдәр ябай тамашасыға нимә бирә һуң? Беренсенән, беҙҙең "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы тапшырыуҙарын күрһәткән Рәсәй - 1, Рәсәй - Культура каналдарында ошо фестивалгә килгән иң яҡшы эштәр эфирға сыға башланы. Ә ул фильмдар беҙҙе мәғлүмәт менән дә, тарихи факттар менән дә байыта. Мәҫәлән, "Красноярск" дәүләт телерадиокомпанияһы поляр түңәрәк артында оло иленән буленеп йәшәгән яҡуттар тарихын өйрәнгән һәм "Ессей яҡуттарының байлығы" тигән фильм төшөрөп ебәргән. Ошондай тарихи фильмдарҙы ҡарап ҡына ла бар халыҡтарҙың да ҡасандыр бик яҡын туған булыуына инанаһың.

Икенсенән, журналистарҙың үҙ-ара, шулай уҡ ошондай ҙур сара һылтауы менән дәүләт власы вәкилдәре менән дә аралашыуы бик мөһим. Халыҡ менән власты бәйләүселәр һүҙенә дәүләт даирәләре күберәк ҡолаҡ һалһа, аралашып йәшәһә, яҡшы үҙгәрештәр тормошҡа тиҙерәк үтеп инеүе билдәле.

Мәҫәлән, милли телекомпанияларҙың тәүге фестивалендә бүрәттәр үҙҙәренең символы - Байғол-Байкал тураһында фильм күрһәтте. Уны ҡарағандан һуң журналистарҙы юғары власть органдары вәкилдәре - Президент, Премьер-министр, Хоролтай рәйесе, Улан-Удэ ҡалаһы башлығы, гуманитар фондтарҙе өйрәнеүсе фән эшмәкәрҙәре сәләмләне, бүрәт милли мәсьәләләре менән таныштырҙы. Беҙҙә лә бындай аралашыуҙар булыр, тигән ышаныс бар.

Беҙ ҡунаҡтарҙы Башҡортостаныбыҙ менән лайыҡлы таныштыра алырбыҙ, тип уйлайбыҙ. Әлбиттә, башҡорттар өсөн Шүлгәнташ, солоҡ ҡорто - милләт ғорурлығы. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: беҙ был тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙы фестиваль ҡунаҡтарына күрһәтерлек мөмкинлек тапманыҡ, сөнки Бөрйән ерендә 100-ләгән кешене ҡабул итерлек ҡунаҡханаларыбыҙ, турист комплекстарыбыҙ юҡ. Туризмды үҫтереү буйынса әллә күпме программалар ҡабул итеүле, кемдәр генә ниндәй генә вәғәҙә бирмәне, әммә ниҫкен боролош һиҙелмәй. Бәләкәй эшҡыуарлыҡ өсөн бик яҡшы мөмкинлек түгелме ни туризм? Былтыр октябрь аҙағында Алтайҙа булып, Ҡатын йылғаһы буйында саҡрым һайын урын алған бәләкәй генә турист йорттарын, эйәрле аттарҙы күреп, хайран ҡалынғайны. Алтай бит - дотацияланған төбәк, ә Башҡортостандыбыҙ иһә унан ҡеүәтлерәк. Аҡсалы кешеләребеҙ ҙә аҙ түгел. Мысырҙа, Испанияла, Швейцарияла күсемһеҙ милек тотҡан башҡорттарҙы беләм, улар ҙа дәүләт органдарында эшләп, байлыҡ йыйыу ысулын тапҡан. Эшҡыуар Марс Хәбибулла улы Юлбарисовтан башҡа хозур тәбиғәтебеҙҙән ожмах яһарлыҡ бүтән илһөйәрҙәребеҙ юҡмы ни беҙҙең? Был әсенеүҙәр һүҙ ыңғайында ғына әйтелде, сөнки үҙенең мәнфәғәтен генә уйлаған беҙҙең милли матбуғатты ла уҡымауы билдәле бит.

Конкурсҡа килгәндә, фестиваль почтаһына хаттар килеүен дауам итә, 300-ләп конкурс эшен теркәнек тә инде. Ун номинацияла иң яҡшы эштәр билдәләнәсәк. Гәлсәр ер шарын монға сорнаған алтын ҡурай гран-при бүләге булһа, башҡорт орнаменттарынан туҡылған алтын елкән беренсе урын яулаусыларға



биреләсәк. Жюри ағзалары - Үҙәк телеканалдарҙың билдәле шәхестәре, юғары профессионалдар. Башҡортостандың кино һәм сәнғәт белгестәре лә бар улар араһында.

Билдәле, бындай ҙур йыйынды "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы яңғыҙы ғына ойоштора алмаҫ ине. Беҙгә республика Хөкүмәте лә, бағыусылар ҙа оло ярҙам күрһәтә. Республиканы бар тулылығында һәм ысынбарлығында ғаләмгә күрһәтеү яуаплы һәм мәртәбәле эш. Һәр нәмә сағыштырып ҡарағанда аныҡрараҡ күренә, шуға ла беҙҙәге халыҡтар дуҫлығын, республикала йәшәгән һәр кемдең үҙ телә ғәнсә уҡый, үҫешә ала икәнен күрһәтеп, халыҡтың социаль-көнкүрешен үҫтереүгә йүнәлтелгән программалар менән таныштырыу республикабыҙға мәрәй генә өҫтәр. Өлгәшкән уңыштар менән ғорурлана белеү ҙә кәмһенеү һәм кәмһетеү кеүек шикле ҡылыҡтарҙы киҫәтеп ҡуя, ышаныс өҫтәй. Йәш быуындар өсөн рух орлоҡтары ла һала. Ә был эштә дәүләт сәйәсәтенең нигеҙ таштары, кире ҡаҡҡыһыҙ ҡанун.

Фестиваль Башҡорт дәүләт академия драма театрында еңеүселәрҙе бүләкләгән кисә һәм маһир артистарыбыҙҙың гала-концерты менән 30 августа тамамланасаҡ. Шул уҡ сәхнәлә фестиваль эстафетаһын "Татарстан" телерадиокомпанияһына тапшырасаҡбыҙ. Беҙҙең "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы тапшырыуҙарын күҙәтеп барығыҙ, фестиваль менән хәбәрҙәр булығыҙ. Европа менән Азияны тоташтырып торған илдең монло тауышы был көндәрҙә тағы ла күп яҡлыраҡ, сағыуыраҡ булмаҡсы.

**Луиза ФАРХШАТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТА АЛМАҒАН...

## йәйә һайлар

Ҡыш - ҡыҫыл, яҙ - яҙыл, йәй - йәйел, көҙөн үҙең белерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер аҡһаҡалдан:"Ни өсөн йыланды аҡыл символы тип йөрөтәләр?"- тип һорағандар. "Сөнки ул хәҡиҡәт кеүек әсе саға", - тип яуаплаған аҡһаҡал.

**(Су Дун-по).**

Һәр ҡыйынлыҡтың сиселеше бар. Ауырлыҡ шунда: ул сиселеште табырға кәрәк.

**(Эвви Неф).**

Сәйәси кампания - ул милләттең йөрәк тибешен ауыҙ асып тыңлау сәнғәте.

**(Фил Тьюсет).**

Юл насар булған һайын күҙгә ныҡыраҡ саң тула.

**(Михаил Ганин).**

Һорауыңды кире ҡағыуҙарын теләмәһәң... һорама ла ҡуй.

**(Джон Драйден).**

Аҡсаһы аҙ булып та күңел күтәренкелегендә йәшәгән кеше - бәхетле, аҡсаһы күп булып та йән тыныслығы тапмағандар - бәхетһеҙ.

**(Демокрит).**

Тәбиғәттән бөрөү ҙә түбән йә бейек булмай, бары тик хеҙмәте генә кешене түбән йә бейек итә.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Ахмаҡтың тормошо ҡурҡыу менән тулы, сөнки ул бер эшен дә бөгөн эшләмәй, ә барыһын да иртәгәгә ҡалдыра.

**(Кесе Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Әнәс исемле кеше үткер телле һәм шаян булыуы менән тирә-яҡта дан алған. Күптәр уның шаянлығына шаянлыҡ менән яуап биреп йә көтөлмәгән һорау биреп, уның иғтибарын яуларға тырышҡан. Аҡылға һайыраҡ һәм тәрбиәһеҙ бер егет Әнәсте аптыратмаҡсы булған һәм уға: "Хөрмәтле Әнәс ағай, әйт әле, һин ҡасаныраҡ был донъяны ташлап китәсәкһең?"- тип һорай. "Ә нинә һиңә минең үлеүем кәрәк?" - ти Әнәс. "Күптән түгел атайым беҙҙе ташлап, теге донъяға күсте, - ти егет. - Мин уға хат яҙҙым, хатымда һеҙгә, шуҡлығы менән танылған Әнәс ағайға, әлеге һорауҙы биреүем тураһында ла белгерттем. Бер рәхәтләнеп көлөп алһын, әйҙә. Тик был хатты атайыма нисек тә еткерергә кәрәк бит инде. Хатты уға һеҙ алып барып еткерә алмаҫлығыҙмы икән, тигәйнем". "Һиңә ярҙам итергә бик теләр инем дә ул, - ти Әнәс. - Ләкин һинең атайыңа хат илтер өсөн икенсе кешене ялларға тура килер. Сөнки мин бик гонаһлымын һәм Хоҙай Тәғәлә мине туп-тура тамуҡҡа ебәрәсәк. Ә бына һинең кеүек "үткер телле" улды тыуҙырған һәм тәрбиәләгән атайыңды Хоҙай, моғайын, ожмахҡа ебәргәндер, сөнки ул бит һинең ҡылыҡтарыңа оҙаҡ ваҡыт түҙемлек күрһәткән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририят:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 5006
Заказ 3079